ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26-4 февраль - март (шаҡай - буранай) 2022

№8 (998)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Закондар...** халыҡ ихтыяжынан сығып тыуа 6



**Мәҙәниәт йорттар төҙөмәй,** юлдар һалмай. Ул киләсәктең моделен формалаштыра 8-9



**Изге китапҡа...** изге күңел менән тотонайыҡ! 12



**Мөғжизәгә тиңдер был байрам** 13



**ТВ-программа** 14

***"Быяла һауыттарҙың сифатлы булыу-булмауы сыңлауынан беленгән кеүек, әҙәм балаларының һөнәрҙәре лә һүҙҙәренән беленә".***

***Ризаитдин Фәхретдин.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *1 март - Башҡорт ғаиләһе көнө. Ошо уңайҙан бер нисә кешегә: "Һеҙҙең ғаиләнең нигеҙе ниндәй ҡағиҙәләргә, кем тәжрибәһенә таянып төҙөлгән?"- тигән һорау бирҙек.*

***Роза АҠЪЮЛОВА, Башҡортостан Республикаһы Мәғарифты үҫтереү институтының башҡорт һәм башҡа туған телдәр һәм әҙәбиәт кафедраһының өлкән методисы:*** Мин, ғөмүмән, 20 йылдан ашыу ҡәйнәһен ҡараған әсәй менән үҫкән кешемен. Атайым да үҙ ҡәйнәһенә шул тиклем ихтирам менән йәшәне, өләсәй 90 йәшкә етеп, һәр саҡ, кейәүем шәп, кейәүем яҡшы, тип маҡтап йәшәне. Шуға күрә беҙҙең ғаиләлә ҡәйнә-ҡайныға ихтирам бәләкәйҙән тәрбиәләнгән ине, тип әйтә алам. Илдар менән ғаилә ҡорғас та бейемемә үҙемдең әсәйемә ҡараған һымаҡ ихтирам һәм һөйөү менән ҡарарға тырыштым. Әммә бейемем ҡыҫҡа ғүмерле булды, беҙ өйләнешкәндән һуң ике йыл үткәс, ҡаты сир уны беҙҙән алып китте. Шуға ла бейемемә килен хөрмәте күрһәтеп өлгөрҙөммө икән, тигән уй ҙа тыуа. Ҡайным шундай уҡ егәрле, уңған, эшлекле кеше ине. Уға ла үҙ атайыма ҡараған кеүек ҡарарға тырыштым.

Ысын ғаилә булып ойошоп китеүе ауыр ҙа, ҡатмарлы ла һынау үтеү ул. Сөнки, ысынлап та, һәр ғаиләлә кеше үҙенсә тәрбиә ала, һәр ғаиләнең үҙ тормош ҡанундары була. Шуға күрә, ике йәш йөрәк ҡауышҡас та, һәр ҡайһыһы үҙе баш, үҙе түш булдынитә, ғаилә булып ойоша алмай. Беҙ һәр ваҡытта ла бер-беребеҙҙе аңларға тырыштыҡ. Тәүҙә, әлбиттә, аңлашмаусылыҡтар, кем баш булыр икән, тигән һымағыраҡ хәлдәр ҙә булып алғандыр, әммә йәшәй-йәшәй төрлө ысулдарҙы эҙләйһең, ҡайһылай яҡшыраҡ булыр икәнен ҡарайһың, бер-береңә юл да бирәһең, һүҙен дә алға сығараһың. Психологтар ҙа хатта никахтың 1, 3, 7-се йылдарында көрсөк мәлдәре булып тора, тип фаразлай, йәғни ошо осорҙар ғаиләне ныҡлыҡҡа һынай. Бөгөнгө күҙлектән ҡарап, беҙ ундай стадияларҙы үттек, тип уйламайым, бәлки, булғандыр, әммә беҙ уны уртаҡ тел табып, еңел үткәргәнбеҙҙер, моғайын, шуға һиҙмәгәнбеҙҙер ҙә. Ә бына 10 йылдан һуң, килеп тыуған проблемаларҙы нисек хәл итербеҙ икән, тигән һорауҙар йышайҙы, сөнки ғаилә лә ҙурая, ауырлыҡтар ҙа тыуа. Тормош - ул ысынбарлыҡ. Шуға ғаилә усағынан ситкә сәсрәгән бәләкәй генә осҡондан ҙур ялҡын ҡабыҙмай, уны шунда уҡ туҡтатып тороу мөһим. Бының өсөн, әлбиттә, бер-береңде ихтирам итеү тәүге урынға сыға, шул ваҡытта ғына хаталарҙы һәм проблемаларҙы уртаға һалып һөйләшеп, уларҙан бергәләп сығыу юлдарын табырға мөмкин. Туйҙан һуң күршетирә апай-еңгәйҙәр, оло инәйҙәр "Барған ереңә таш булып бат", тип оҙатты, шуға күрә ике ауыҙлы - бер һүҙле булып йәшәргә тырышабыҙ.

*БАШ ҠАЛАМ*

# ЗАТОН БИҪТӘҺЕНДӘ ЙӘШӘЙЕМ



**Ҡаланың үҙәгенән ситтә ятҡан, әммә уның өсөн бер үк кимәлдә кәрәкле булған биҫтәләр менән Өфөбөҙ ҙур, йәмле, йәшел, заман талаптарынан ҡалышмай үҫешкән миллионлы ҡала булып тора. Баш ҡала рәсми рәүештә райондарға бүленеп йөрөтөлә, ләкин барыһы ла һөйләшкәндә Өфөнө төрлө атамалағы - Черниковка, Инорс, Затон, Үҙәк һәм башҡа исемле биҫтәләр менән атай. Бөгөнгө һүҙебеҙ Өфөнөң Ленин районына ҡараған Затон биҫтәһе хаҡында.**

**(Дауамы 2-се биттә).**

*АФАРИН!*

# УЛАР - ШАЙМОРАТОВСЫЛАР!

**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының һәм 1-се, 2-се республика полилингваль күп профилле гимназияларҙың 6-7-се класс уҡыусылары шайморатовсылар сафына алынды. Тантаналы сарала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты.**

Республика етәксеһе йәш шайморатовсылар Ватанды һаҡлаусыларҙың традицияһын дауам итәсәгенә ышаныс белдерҙе. "Герой исемен йөрөткән кластар республиканың бик күп мәктәбендә асыласаҡ. "Шайморатовсы" булыу - маҡтаулы. Шайморатовсы символы булған форма кейеү хоҡуғын алғас, һеҙгә легендар командир иҫтәлегенә лайыҡлы, республиканың һәм илдең ысын патриоты булыу яуаплылығы йөкмәтелә. "Салауат тоҡомдары сигенә белмәй!" тигән беҙҙең девизға тоғро булығыҙ. Аныҡ эштәр менән иҫбатлағыҙ", - тине республика Башлығы.

**(Дауамы 16-сы биттә).**



12+

БАШ ҠАЛАМ

# ЗАТОН БИҪТӘҺЕНДӘ ЙӘШӘЙЕМ

**(Башы 1-се биттә).**



Затон биҫтәһе халыҡ телендә "спальный" районлар иҫәбендә. Был, ысынлап та, шулай. Бында тормош үҙенең ҡабаланмаҫ ағышы менән бара, кешеләр ҙә яй ғына атлап йөрөгән кеүек (үҙәктә иһә ҡуҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй сабалар), йәйгеһен бында әле булһын йорт янында шешлек ҡыҙҙыралар, күршеләр менән әңгәмә ҡоралар һәм башҡалар. Элек биҫтә йылғасылар районы иҫәпләнгән һәм был тенденция бөгөнгө көндә лә һаҡланған, сөнки беҙҙә ошо өлкәгә бәйле әйберҙәр күп.

Затон әүҙем үҫешкән биҫтәләрҙең береһе. Бында һуңғы йылдарҙа ғына ла әллә күпме иҫке йорттар һүтелеп, улар урынына яңы йорттар ҡалҡып сыҡты, элек буш торған ерҙәр ҙә хәҙер балалар тауышынан яңғырап тора. Фатир хаҡтары ла башҡа районлар менән сағыштырғанда ҡот осорлоҡ түгел. Йәшәр өсөн бөтә социаль инфраструктура бар, үҙәккә лә алыҫ түгел. Йәйге йылы оҙон көндәрҙә фатирҙа ултырмаҫ өсөн биҫтәнән алыҫ булмаған ерҙән баҡса алып ебәрергә була.

Шулай ҙа биҫтәлә яҡшыртаһы ерҙәр ҙә бик күп. Мәҫәлән, композитор Хөсәйен Әхмәтов исемен йөрөткән Затондың үҙәк урамын ипкә килтереп, матурлап алыу урынлы булыр ине. Ә барактар янындағы тулып, һаҫыҡ еҫ сығарып ятҡан канализиция янындағы күләүектәр тураһында яҙыуы ла сирҡаныс хатта. Канализация соҡорҙарын ваҡытында таҙартып тороу өсөн яуаплы ойошмаларҙың үҙ эшенә һүлпән ҡарауы шунда йәшәгән әллә күпме кешенең тормошо насар шарттарҙа үтеүенә сәбәпсе. Ғөмүмән, был барактар күптән үҙҙәренең функцияһын үтәп бөткән, уларҙы тиҙерәк бушатырға һәм һүтеп ташларға кәрәк. Был биҫтәнең йөҙөн дә яҡшыртасаҡ, унда йәшәгән кешеләр өсөн дә файҙалы буласаҡ.

Шулай уҡ беҙ үҙебеҙҙең кинотеатрыбыҙ булыуы тураһында хыялланабыҙ. Йәмәғәт транспорты әүҙемерәк йөрөй башлар тигән ышаныста йәшәйбеҙ. Оҙаҡламай бында тағы ла балалар баҡсалары, мәктәптәр асылыр һәм бында күсеп килеүселәр иртәле-кисле балаларын ыҙалатып ҡала үҙәгенә йөрөтмәҫ, тип көтөп ғүмер итәбеҙ.

Биҫтәнең берҙән-бер паркы - "Тулҡын"ға айырым туҡталып үткем килә. Һуңғы йылдарҙа ул күҙгә күренеп матурайҙы. Минә бигерәк тә парктағы юлдар оҡшай - улар тигеҙ, асфальт түшәлгән, коляска үтеүгә ҡамасаулаған бордюрҙар юҡ. Балалар өсөн төрлө уйынлыҡтар булдырылған - уйын һәм спорт майҙансыҡтары, автоҡаласыҡ, хоккей ҡумтаһы, уйынлы ултырғыстар менән йыһазландырылған сәхнә майҙансығы һәм башҡалар. Ғөмүмән, паркыбыҙ бик күркәм һәм уйынлы.

Затон биҫтәһенә йәштәрҙең күпләп күсеүе мине шатландыра, тимәк, биҫтә йәшәрә, яңы һулыш ала, әүҙемләшә, сөнки ҡайҙа йәшлек, шунда көс-дәрт һәм ғәйрәт. Һәм йәштәрҙең үҙҙәре йәшәгән биҫтәне тағы ла матурыраҡ һәм заманса итеүҙәре өсөн тырышасаҡтарына шигем юҡ. Шулай булғас, Затон алдағы көндәрҙә үҫәсәк һәм балҡыясаҡ әле.

**Земфира АҠБУЛАТОВА.**

БЫЛ АЙҘА...

# МАРТТЫҢ ШАРТЫ НИ БУЛЫР?

**Хоҙай ярҙамы менән ҡыш сығып та киләбеҙ, буғай. Ә башҡаса нисек әйтергә, кемдән ярҙам көтөргә? Сирле - табип, йәйәүле - транспорт, ярлы ҡатлам республикала иғлан ителгән уртаса 47 мең 688 һум эш хаҡын көтөп ала алмай сәсе ағара...**



Бәлки, был айҙа ябай халыҡ тормошонда берәй ыңғайға көйләнеш булыр? Хәйер, ул тиклегем айлыҡ аҡсаны ярлы-ябаға төшөндә лә күрмәй әле. Баҡтиһәң, уртаса эш хаҡы ла хәҙер өс "ҡатлам"ға бүлеп ҡарала икән: уртасаһынан башҡа тағы ла уның 29 мең 492 һумлыҡ медиан ( эш урындарының 50 процентына - ошо хаҡтан күберәк, ә ҡалған 50 процентына әҙерәк түләнеү, йәғни уртаса статистик эш хаҡы) һәм 25 мең тәшкил итеүсе модаль, йәғни күпселек халыҡ иҫәбенә ҡарата килем күрһәткесе. Ә бөгөнгө көндә күптәрҙең айлыҡ эш хаҡы тиҫтә йылдан ашыу инде үҙгәрмәүсән дәүмәл -15 мең булып ҡала килә икән, "модаль " күрһәткесебеҙ ни саҡлы тәшкил итәләр?

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***1 март - Башҡорт ғаиләһе көнө. Ошо уңайҙан бер нисә кешегә: "Һеҙҙең ғаиләнең нигеҙе ниндәй ҡағиҙәләргә, кем тәжрибәһенә таянып төҙөлгән?" - тигән һорау бирҙек.***

***Гөлнара Мостафина, журналист:*** Ирем Фларис ҡыҙҙары өсөн, ысынлап та, үлеп тора. Минең үҙемдең атайым иртә үлгәс, ир кеше - ҡатынына, ҡатын иренә ниндәй мөнәсәбәттә булырға тейешлеген күреп үҫмәнем. Әммә өләсәй менән олатайҙы, бәлки, үрнәк итеп тә алғанмындыр. Ни өсөн тиһәң, бөтә каникулдарҙы уларҙа үткәрә торғайным. Олатай һуғыш ветераны, өләсәйем тылда хеҙмәт иткән, алты балаға ғүмер биреп үҫтергәндәр. Бер береһенә "атай", "әсәй" тип өндәшеүҙәре элек бигерәк мәҙәк тойола торғайны. Хәҙер үҙем дә ҡайһы берҙә, балалар ыңғайынамы, бигерәк тә саҡырырға кәрәк булһа, Флариска "Атай!" тип ҡысҡырам. Өләсәй һәр ваҡыт беренсе урынға олатайҙы ҡуйҙы. Унан алда бер нәмә лә эшләнмәне. Баларына ла: "Әллә, атайығыҙ ни әйтер..." - тип тәүҙә уның ризалығы алына ине. Шуға эйәреп микән, мин дә ҡыҙҙарға: "Ана, атайығыҙҙан һорағыҙ", - тием. Үҙем риза булмаған осраҡта бигерәк тә. Шулай тием дә, тиҙ генә Флариска шылтыратып ебәрәм: "Ҡыҙҙар һораһа, риза булып ҡуйма, йә шулай-шулай тип әйт", - тим. Юҡһа, ул ҡыҙҙары ыңғайына торорға ярата.

Бер ваҡытта ла балаларға үҙем аҡса бирмәнем. "Ана, атайығыҙҙан һорағыҙ", - тип уға ебәрә инем. Хатта бер ваҡыт Лилиә ныҡ итеп аптырап, үпкәләгәйне. Аҡсаһыҙраҡ ваҡыт тура килде микән? Фларистың эштәре хөртөрәк булдымы, Лилиә барып аҡса һорағайны (ҙурайғайны инде), Фларис ҡыҙы ла китте: "Миндә ниндәй аҡса булһын. Эш хаҡын тиненә тиклем әсәйегеҙгә биреп торам. Унан һорағыҙ!". "Әсәйҙәрҙә аҡса булмай бит!" - тип Лилиәнең күҙенә хатта йәштәр төйөлгәйне. Нишләп улай өйрәткәнмендер, үҙем дә аңламайым... Беҙҙе Хоҙай үҙе ҡауыштырған бит инде. Белгән нисек һайларға: Фларис кеше менән аралашырға ярата, бер урында ултырып сыҙай алмай, ә мин тыныс, күберәген өйҙә булырға тырышам, кеше менән дә аралашып бармайым. Силәгенә күрә ҡапҡасы, кеүекбеҙ, ҡыҫҡаһы.

***Ғәзиз Йосопов, БР Стратегик тикшеренеүҙәр институтының матбуғат хеҙмәте етәксеһе:*** Тәү сиратта ғаиләнең әһәмиәтен аңларға кәрәк. Ҡайһы берәүҙәр, өйләнеп ҡарайым да, килеп сыҡмаһа, айырылышырбыҙ, тип уйлай. Шуның өсөн ғаилә ҡорор алдынан кем балаһы, кем менән яҙмышыңды бәйләйәсәкһең, кем буласаҡ балаларыңдың әсәһе йәки атаһы тип ҡарайһың. Башҡа ғаиләләрҙә нисектер, беҙҙә атай-әсәй бала саҡтан шулай тәрбиәләне. Йәғни был тәрбиә кем менән дуҫ булырға кәрәклекте аңлауҙан башланып, кем менән аралашырға, кем менән ғаилә ҡорорға, тигән мәсьәләне лә үҙ эсенә ала. Юҡҡа ғына, кем арбаһына ултырһаң - шуның йырын йырларһың, тимәйҙәр бит. Ә инде "үлеп ғашиҡ булдым, унһыҙ бер минут йәшәй алмайым", тип түгел. Ундай ғаиләләр, күп осраҡта, тәүге хистәр - эйфория үтеү менән көрсөккә терәлә. Әле беҙҙең ғаилә ҡорғанға тиҫтә ярым йыл, йылдар һаны арткан һайын, мин ҡатынымды тағы ла нығыраҡ яратҡанымды аңлайым. Моғайын, тағы ла 10-15-20 йылдан һуң, артҡа боролоп ҡарап, "Эээх, 45 йәшемдә, моғайын, хәләлемде әлеге ҡәҙәре яратмағанмындыр", тип әйтермен.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Рәсәй Президенты Владимир Путин 24 февралдә иртән илебеҙ граждандарына ашығыс мөрәжәғәт менән сығыш яһаны һәм Донбасс республикалары биләмәһендә Рәсәй Федерацияһы хәрби көстәренең махсус операцияһы башланыуы тураһында белдерҙе. Ғәскәрҙәрҙе индереү тураһында ҡарар Донецк Халыҡ Республикаһы һәм Луганск Халыҡ Республикаһы менән дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында төҙөлгән килешеүҙәргә ярашлы ҡабул ителде. Ул Донбастағы ваҡиғаларҙы фажиғәле тип баһаланы.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров оператив кәңәшмәлә республикала Луганск һәм Донецк халыҡ республикалары халҡын эвакуациялау буйынса оператив штаб ойоштороуҙары хаҡында һөйләне. "Ике меңгә яҡын ҡасаҡты ҡабул итербеҙ. Мобиль урынлаштырыу пункттары астыҡ. Уларҙы йылы ҡабул итергә кәрәк, унда оло йәштәгеләр, ҡатын-ҡыҙҙар, балалар бар. Уҡыусылар мәктәп кәрәк-ярақтары, дәреслектәр менән тәьмин ителергә һәм мәктәптә уҡый башларға тейеш", - тине Радий Хәбиров.

✔Башҡортостанда ЛНР-ҙан һәм ДНР-ҙан эвакуацияланған граждандарға гуманитар ярҙам күрһәтеү иғлан ителде. Гуманитар ярҙам Өфө ҡалаһы, Цюрупа урамы, 17 адресы буйынса ҡабул ителә. Эш режимы: дүшәмбе-йома - иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 9-ға тиклем. Шәмбе-йәкшәмбе - иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға хәтлем. Йәмәғәтселек ярҙамы штабының Берҙәм колл-үҙәге: 8 (347) 218-19-19. Шылтыратыуҙар иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 8-гә ҡәҙәр ҡабул ителә.

✔Дәүләт Думаһы депутаттары пленар ултырышта бер юлы өс уҡыуҙа хәрбиҙәрҙең пенсияһын индексациялау тураһында хөкүмәт закон проектын ҡабул итте. "Пенсия күләме, ҡануниәттә ҡаралған төрлө механизмдарҙы ҡулланып, 2022 йылдың 1 ғинуарынан 8,6 процентҡа арта", - тип хәбәр ителә Дәүләт Думаһы сайтында. Шулай уҡ документта 2022 йылға һәм 2023, 2024 йылдарҙың план осорона бюджетта хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең һәм уларға тиңләштерелгәндәрҙең аҡсалата тәьминәте дүрт процентҡа арттырыла тип билдәләнгән. Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин эшләмәүсе пенсионерҙарҙың пенсияһы ла ошолай уҡ индексацияланыуын әйтте.

Унаһы әлеге лә баяғы Хоҙай Тәғәләгә генә мәғлүмдер ки... Ярай, гәйепкә алһа, алырҙар, һүҙ ыңғайы тел осонда торған бер кәлимә булды был.

Яҙ етә бит, проблемаларға, пандемия ҡотороуына ҡарамаҫтан, тәбиғәт үҙ ҡанундары буйынса йәшәй, үҙгәрә, тик бына тормошобоҙҙа ла ике йыл буйы тажзәхмәт тотҡононда тилмергән күңелдәрҙе күтәреп, һулыштарҙы иркенәйтеп ебәреүсе үҙгәреш, күптән көтөлгән ниндәй ҙә булһа ҡыуаныс көсәтә яҙ шауҡымы. Ләкин нишләмәк: хыялланып алыу гәйеп түгел, тиҙәр. Өҫтәүенә, һауа торошо белгестәре лә яҙ һулышы менән бәйле беҙҙе ҡыуандырырға ашыҡмай, ҡышҡы кейемдәрҙе шкаф төпкөлөнә элмәйерәк торорға кәңәш бирә: март ахырыныҙ яҙ башланмаҫ, ти улар. Уларына күптән ышаныс бөттө, унан һуң буранайҙың да бит уйындағын ҡайҙан беләһең? "Яҙ килеләһә, көҙҙән яман"; "Яҙғы көн - ярталҡыл" тигән халыҡ һынамыштары тикмәгә тарихта тороп ҡалмағандыр. Тәғәйен буранайға ҡарата иһә "Марттың көнө - шарт", "Март сыҡмай - дәрт сыҡмай", "Март башында сәпсек эсерлек һыу булһа, йыл яҡшы килә" тип тә фараз ҡылған халыҡ, һау булайыҡ - үҙебеҙ күрербеҙ.

Көн маҙаһы ла булдымы маҙа. Иң мөһиме - тажзәхмәт дөмөкһөн, мәхшәр бер төш кеүек кенә булып ҡалһын ине. Ошоға тиклем медиктар береһенән-береһе хәүефлерәк фараздары менән беҙҙе көсөргәнештә тотоп килде, әле бына бөгөн интернет сығанаҡтарҙа тажзәхмәттең бишенсе төрө - омикрон мартта баҫыла төшәр, тигәндәй булалар. Күрәһең, медицина "күрәҙәселәре" лә арыны-алйыны, ахыры, әллә фантазиялары бөҫкәрҙе - түгге осорҙағы кеүек , "берҙәнбер ҡотолоу юлы - вакцинация", тип алҡымдан алмай башланылар. Тик барыбер вирус менән артабан ни булыры коллектив иммунитет тупланыуға, йәғни дөйөм вакцинация күләменә бәйле, тигән ҡараш нығынды. Шул уҡ ваҡытта, хас та әкәттәге дейеүҙең башын киҫкән һайын яңыһы үҫеп сыҡҡан кеүек, тажзәхмәткә лә туктауһыҙ үрсеү, төрләнеү, йәғни мутация хас булыуын оноторға ярамай. Оптимистик рухтағы эксперттарҙың береһе медицина фәндәре докторы Михаил Фролов фаразлауынса, омикрондың башланыуы, гөмүмән, был эпидемияның тамамланыуына килтерәсәк. Иммунолог Николай Крючков та йәйгә табан тажзәхмәттең көсһеҙләнеүен, уға контроллек итеүҙең күпкә еңелләшеүен күҙаллай. Ә инде Н.Ф.Гамалея үҙәге директоры Александр Гинцбург үҙ репертуарында: коронавирус быйыл ғына бөтмәйәсәк, тип күңелгә шом һалыуын дауам итә. Кемдер быйдай ҡараштың коммерция һәм бизнес ихтыяжынан сығып эшләнеүенә ишаралай. Баяғыса, имен-аман булайыҡ, ни яҙғаныңа үҙебеҙ шаһитлыҡ ҡылырбыҙ.

Ә әлегә март ҡояшы йылыһын көтә күңел, ҡыйыҡтан тамыр тәүге яҙ тамсыһы, һары бәпкә төҫөндәге мимоза гөлләмәһенең хуш еҫтәре һағындырҙы. Был тормоштоң ябай, элек күҙгә лә эленмәгән бәләкәй генә шатлыҡтарын танһыҡланы күңел. Шул уҡ ваҡытта метеорологтар иҫкәртеүен дә хәтерҙә тотайыҡ: буранай - аҡман-тоҡман осоро - еңел-елпе, уйһыҙнимеҙ алыҫ юлға сығыуҙан тыйылып тороу кәрәк булыр: быйылғы ай оҙайлы бурандары, йылы көндәре, ҡаты һалҡындары менән дә шаҡ ҡатырыуы бар әле. Ә шулай ҙа яҙ барыбер килер, тәбиғәт ҡышҡы йоҡоһонан уяныр, ер йөҙө терелә, ҡарҙан әрсеlә башлар һәм... быныһ үҙ башына яу булырын аңғарып та өлгөрмәҫ, тәбиғәтебеҙҙе тағы төрлө тарафтан ике аяҡлы гөп ҡорһаҡ ҡороҡкостар һырып алыр: тау-таштарыбыҙҙы емерер, йөшеллекке күмелгән еребеҙ ҡуйынын соҡор, ер ҡыртышын аҡтарып, саң-туҙан борҡотор...

Был айҙа билдәләнәсәк Халыҡ-ара йылғалар (14), Һыу ресурстары (22), Халыҡ-ара урмандар (21), Ер (20) һәм Ерҙе һаҡлау (30) көндәре Баязит Бикбайҙың "Ер" поэмаһынан мәңгегә күңелгә һеңгән юлдарҙы "кылт" итеп хәтергә төшөрә: "Башҡортостан тәне ҡара янған меңәрләгән ҡамсы эҙенән. Ауыр миңә... Һыуҙар ҡорой, тау валлар, урман ҡырҡалар - ҡайҙа миндә тыуған батырҙар?.." Мәңгелек ер темаһы бөгөн айырыуса киҫкенләшә, оло проблемаға әүерелә бара, сөнки хужаһыҙлыҡ, ергә, тәбиғәткә ҡарата енәйәти баш-баштаҡлыҡ көсәйә генә бара. Башҡортостаныбыҙҙың тәбиғи биләмәләре күптән түгел генә әле йырып сыҡҡыһыҙ урмандары, мәғрур тау һәм ҡаялары менән гүзәл ине. Бөгөн ҡалдымы ошо матурлыҡ? Әҙәм аяғы баҫмаған урыны бармы еребеҙҙең? Ситтәр килеп тапай, кеҫә ҡалынайта, ер күкрәген йыртып, алтын-көмөш, баҡыр эҙләй... Шалҡандай ағас тейәгән йөкйөк машина ағымы сит тарафтарға юллана. Ҡырағай тәбиғәт тигән тейелмәгеҙ матурлыҡ ҡалманы ла бөгөн. Тимәк, Бөтөн донъя ҡырағай тәбиғәт көнө (3) фәҡәт календарҙа ғына билдәләнә - быны замана, бына афәт! Республикабыҙҙа ғына ла бөгөн тирә-яҡ мөхиткә ҙур зыян менән эшләүсе 11,5 мең объект булып, шуларҙың 2 меңдән ашыуы федераль экологик күҙәтеү контроле аҫтында. Улар иҫәбендә бысраҡ ҡалдыҡ һыуҙары менән йылғаларыбыҙҙы ағыулаусы, еребеҙҙең уңдырышлы ҡатламын юҡҡа сығарып, уны аҡтарып файҙалы ҡаҙылма эҙләүсе компаниялар байтаҡ. Яңыраҡ хәбәр ителеүенсә, шуларҙың береһе - Баймаҡ районында алтын табыусы "Граф" йәуаплылығы сикләнгән йәмғиәтте, тәбиғәткә килтергән күп һанлы зыяны өсөн лицензиянан мәхрүм итеү мәсьәләһе ҡуйылды. Учалы районының Мулдаш, Ураҙ ауылдары янында ла экологияға, урындағы халыҡ һаулығына зыян килтереүсе компаниялар эшмәкәрлеген контролгә алыу менән генә сикләнмәйенсә, улар килтергән зыянды ауыл һәм халыҡ файҙаһына ҡаплатыу, тирә-яҡты төҙөкләндереү, бысратылған һәм аҡтарылған ерҙәрҙе тигеҙләп, тәртипкә һалып, ҡайтанан тергеҙеү кеүек саралар күреү кәрәк, тигән фекерҙә урындағы йәмәғәтселек. Ошо гәзәл талаптарҙан бер аҙым да сигенергә ярамай, халыҡ талабы - хаҡ! Ни тиһәң дә, Росприроднадзор Башҡортостанда тәбиғәткә, тирә-яҡ мөхиткә ауыҙ ҡаныҡ фактарын һәм ошо йәһәттән законға һыйғыһыҙ хәлдәрҙе күреп-белеп тора, контролдә тота. Тик үҙебеҙгә лә берҙәм булырға, мәсьәләләрҙе экологик күҙәтеү органдары, махсус комиссиялар һәм суд аша хәл итеү юлдарын ҡарарға кәрәк.

Буранай көндәлегендәге иҫтәлекле ваҡиға һәм даталар: Бөтөн донъя граждандар оборонаһы (1), Бөтөн донъя ҡырағай тәбиғәт һәм Яҙыусылар (3) көндәре, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ойошторолоуға - 90 йыл (4), Халыҡ-ара теш табибы һәм Балалар телевидениеһы менән радиоһы (6) көндәре, Стандарт булмағанса фекерләүсе кешеләр (9), Архив (10), Наркотик күҙәтеү органдары хеҙмәткәрҙәре (11), Бөтөн донъя йоҡо (12), Халыҡ-ара йылғалар (14), Бөтөн донъя ҡулланыусы хоҡуҡтарын яҡлау (15), Ҡырымдың Рәсәйгә ҡушылған (18) көндәре, Сауҙа, көнкүреш хеҙмәте һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ, Ишембай районы ойошторолоуға - 85 йыл, Бөтөн донъя Ер, Халыҡ-ара бәхет (20) көндәре, Бөтөн донъя шиғриәт, Халыҡ-ара ҡурсаҡ театры актерҙары (21), Бөтөн донъя һыу ресурстары (22), Бөтөн донъя туберкулезға, Халыҡ-ара депрессияға ҡаршы көрәш (24) көндәре, Мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре (25), Халыҡ-ара театр (27) һәм Ерҙе һаҡлау (30) көндәре.

**Буранайҙа тыуғандар:**

**5** - шағир, прозаик, ҡурайсы, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **Мәүлит Ямалетдиновтың тыуыуына - 75 йыл** (1947-2020).

**9** - композитор, Башҡортостандың халыҡ артисы **Рим Хәсәновҡа - 75 йәш** (1947).

**10** - микробиолог, академик, медицина фәндәре докторы, профессор, Рәсәйҙең атҡаҙанған фән эшмәкәре **Риза Мағазовҡа - 90 йәш** (1932).

**18** - дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, иҡтисад фәндәре докторы **Зифҡәт Сәйетгәлиевҡа - 75 йәш** (1947).

**23** - педагог, йәмәғәт эшмәкәре **Мөхәмәт Искужиндың тыуыуына - 95 йыл** (1927-2000).

**28** - опера йырсыһы (баритон), Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры солисы, Рәсәйҙең - атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы **Рәил Кучуковҡа - 70 йәш** (1952).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

### 1 март - Башҡорт ғаиләһе көнө. Ошо уңайҙан бер нисә кешегә: "Һеҙҙең ғаиләнең нигеҙе ниндәй ҡағиҙәләргә, кем тәжрибәһенә таянып төҙөлгән?" - тигән һорау бирҙек.

***Гөлнәзирә ЗӘЙНУЛЛИНА, дүрт бала әсәһе:*** Мин үҙем килен булып төшкән ғаиләне үрнәк итеп килтерер инем. Сөнки улар балаларына матур тәрбиә бирә алғандар. Иңәһе көслөнөң - иләүе көслө, тип халыҡ ҡалай тапҡыр әйткән, тип уйлайым йыш ҡына. Ҡәйнәм көслө рухлы, һәр нәмәгә үҙенең фекере бар, һәр осраҡта ла ғәҙел булып ҡала белә. Күп һөйләмәй, гәйбәткә урын ҡалдырмай, ундай һүҙҙе тыңлап та тормай. Үҙебеҙ ҙә дүрт балаға атайәсәй һәм улар үҫә барған һайын дөрөҫ тәрбиә биреүҙең ни тиклем мөһим икәнен аңлайһың. Шуға ла мин һуңғы ваҡытта матур ғаиләләрҙең балаларын нисек тәрбиәләүенә иғтибар итергә ғәҙәтләндем. Мәҫәлән, ҡайным менән ҡәйнәм хеҙмәт тәрбиәһенә ҙур урын бүлгән. Уларҙың балалары бер ҡасан да юғалып ҡалмаясаҡ, бөтөн эште лә эшләй беләләр. Кемдер үҙ ғүмерендә бер йорт та һалып инә алмай. Ә уларҙың улдарына быйдай эш бер ни түгел, тотоп эшләй ҙә ҡуялар. Ҡайным менән ҡәйнәм байрам, уйын-көлкө тип артыҡ иҫтәре китеп бармай. Улар өсөн иң мөһиме - ғаилә байрамдары. Ғаиләлә атай һүҙе, әсәй һүҙе ҙур әһәмиәткә эйә, бындай кәңәш-теләктәргә мотлаҡ ҡолаҡ һалына. Ҙурайышып бөтһәләр ҙә, атай-әсәй менән ултырып кәңәшләшеү матур йолаға әүерелгән.

Шулай уҡ бер туған апайымдың ғаиләһе минең өсөн өлгө. Улар урыҫтар араһында йәшәп, ғаиләлә милли рухты һаҡлап ҡала алдылар. Өйҙә балаларҙың береһе лә урыҫ теләндә һүҙ һөйләмәй. Ә мәктәптә барыһы ла алдынғы уҡыусы. Урыҫ телен белмәү арҡаһында уңышҡа өлгәшә алманым, тигәндәрен күп ишеткәнем бар. Шуға ла балам ыҙаламаһын, уны урыҫса ғына һөйләштерәм, тиҙәр. Был фекерҙең дөрөҫ түгеллеген апайымдарҙың ғаиләһенә ҡарап аңларға була. Бөгөн йәш ғаиләләр балаларына бөтөнләй эш ҡушмаһа, улар, киреһенсә, балаларын эшләтеп үҫтерә.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығына вертолет һатып алды. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, хәҙер техниканы экипаж менән тәьмин итергә һәм йәйгә әҙерләнергә кәрәк. "Әлеге ваҡытта пилоттар әҙерләү ойошторолған. Артабан Федераль һауа транспорты агентлығынан тейешле аккредитацияларҙы алабыҙ, мартта иһә ташҡынға ҡаршы саралар сиктәрендә тәүге осош яһарға әҙерләнәбеҙ", - тине Башҡортостан Республикаһының Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты етәксеһе Фәрит Ғүмәров.

✓Республика етәксеһе Хөкүмәт Премьер-министры Андрей Назаровҡа вице-премьер Азат Бадранов һәм мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова менән бергә кәңәшмә уҙғарырға һәм Өфөлә танылған йырсы Федор Шаляпин музейын һәм Кире ҡайтарылған исемдәр музейын (теге йәки был сәбәптәр арҡаһында онотолған йәки улар хаҡында аҙ билдәле булған кешеләр тураһында) ойоштороу мәсьәләһен тиҙерәк хәл итергә ҡушты. Эш барһын өсөн финанслау мәсьәләһен хәл итергә кәрәк икәнен дә һыҙыҡ өҫтөнә алды.

✓Башҡортостан Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, Ауыр тормош хәлендә ҡалған балаларға ярҙам фонды муниципаль берәмектәрҙең балаларҙың ғаилә мөхитен һаҡлауға һәм тергеҙеүгә йүнәлтелгән инновацион социаль проекттарын конкурс нигеҙендә һайлап алыу турын ойоштора. Ғаризалар 2022 йылдың 21 мартынан 1 апреленә тиклем ҡабул ителә. Муниципаль берәмектәр фондтың 2 миллион һумға тиклемге грант ярҙамына иҫәп торорға мөмкин (бер проекты финанслау күләме).

✓Рәсәйҙә 2022 йылдан түләүле отпуск көндәре үҙгәрҙе. Эш биреүселәр хеҙмәткәрҙәргә 28 көн түгел, ә 30 көн отпуск бирергә тейеш. Рәсәйҙең социаль-хеҙмәт мөнәсәбәттәрен көйләү буйынса өс яҡлы комиссияһы шундай тәҡдимдәр индерҙе. Коронавирустан прививка яһатыу өсөн хеҙмәткәрҙәргә түләүле ике көнлөк ял бирергә кәрәк, тип иҫәпләй комиссия. Был көндәрҙе отпускыға ҡушырға, шулай уҡ улар өсөн аҡса түләргә мөмкин. Ковидҡа ҡаршы вакцинацияға бәйле өҫтәмә ял көндәре коллектив килешеүҙәрҙә йәки локаль актарҙа яҙып ҡуйылырға тейеш.

ҠЫҪҠАСА

# ТӘРТИП ҮҘГӘРӘ

✔ **Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай "Башҡортостан Республикаһында урындағы үҙидара тураһында" Башҡортостан Республикаһы Законының 11-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проектын хупланы.** "Закон проектында ниндәйҙер сәбәптәр буйынса һайлау хоҡуғына эйә булған халыҡтың яртыһынан ашыуы ҡатнаша алмаһа, тораҡ пунктында граждандар сходын үткәреү тәртибен үҙгәртергә тәҡдим ителә. Мәҫәлән, ҙур ауылдарҙа йәшәгән халыҡтың яртыһынан күберәген бер урынға йыйып булмай. Хатта барыһын да һыйҙырырлыҡ бина ла юҡ. Бындай осраҡтарҙа граждандар йыйылышы этаплап уҙғарыла. Бер кеше бер тапҡыр ғына тауыш бирергә мөмкин. Ҡатнашыусыларҙың яртыһынан ашыуы уның өсөн тауыш бирһә, ҡарар ҡабул ителде тип иҫәпләнә", - тине Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. Был үҙгәрештәр халыҡҡа урындағы әһәмиәттәге мәсьәләләрҙе хәл итеүгә йоғонто яһарға мөмкинлек бирә, тип билдәләне ул.

✔ **Рәсәй Президенты Владимир Путин Донецк һәм Луганск халыҡ республикаларының бойондороҡһоҙлоғон таныны.** Рәсәйҙең Хәүефһеҙлек советы ағзалары бының өсөн бер тауыштан ризалығын белдерҙе. 21 февралдә Донецк һәм Луганск халыҡ республикалары башлығы мөрәжәғәтенә бәйле Именлек советының ашығыс ултырышы үтте. Денис Пушилин һәм Леонид Пасечник Рәсәй Президенты Владимир Путинға республикаларҙың бойондороҡһоҙлоғон таныуҙы һорап мөрәжәғәт итте. "Бөтә халыҡ исеменән республикаларҙы бойондороҡһоҙ, демократик, хоҡуҡи, социаль дәүләттәр итеп таныуығыҙҙы һорайбыҙ", - тип белдерҙе улар. Шулай уҡ улар республикалар менән Рәсәй араһында дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөү мөмкинлеген ҡарауҙы һораны. Владимир Путин бөтә каналдарҙа эфирға сыҡҡан мөрәжәғәт менән сығыш яһап, Рәсәй Донбасс республикаларын үҙ ҡанаты аҫтына алыуын билдәләне. Артабан Президенттың ҡарарын Дәүләт Думаһы һәм Федерация Советы раҫларға тейеш.

✔ **Башҡортостанда балалы ғаиләләргә социаль түләүҙәр процедураһын ябайлаштырыу тәжрибәһе уңышлы һыналды, хәҙер ул бөтә ерҙә лә индерелә башлай.** Был хаҡта республика Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итте. 2020 йылда Башҡортостан Милли социаль башланғыс механизмдарын һынау үткән биш пилот төбәк иҫәбенә инде. Республикала йыл һайын 70 меңгә яҡын балалы ғаилә тейешле түләү алыу өсөн мөрәжәғәт итә. Уларға федераль һәм республика бюджеттарынан социаль ярҙамдың 30-лаған төрө күрһәтелә. Пилот механизмы биш социаль ярҙам араһына бер ғариза биреүгә ҡайтып ҡалды. Мөрәжәғәттәр һаны биш тапҡырға кәмене, ғариза биреү, шулай уҡ уны ҡарау ваҡыты һәм һоралған документтар аҙайҙы, тип билдәләнеләр Башҡортостандың Хеҙмәт министрлығында. 21 февралдә республика Хөкүмәтендә ошо мәсьәлә тикшерелде. Башҡортостан Премьер-министры Андрей Назаров министрлыҡ алып барған эште хуплап, яҡын арала тәжрибәне тотош республикала таратырға ҡушты.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БЕҘҘЕҢ СПОРТСЫЛАР



**Башҡортостан Ҡытайҙағы Олимпиадала яуланған миҙалдар һаны буйынса Рәсәйҙең дүрт төбәге иҫәбенә инде.**

XXIV Ҡышҡы Олимпия уйындарында Башҡортостан исеменән сығыш яһаған биатлонсы Эдуард Латипов Рәсәйҙең Пекиндағы Олимпиадала иң күп миҙал алған спортсылары исемлегенә инде. Эдуард ҡатнаш эстафетала, әҙәрлекләү ярышында һәм ир-егеттәр эстафетаһында өс бронза награда яуланы. Өфө шорт-трексыһы Семён Елистратов та Башҡортостанға һәм Рәсәйҙең олимпия комитетына "бронза" килтерҙе. Ошо көндәрҙә спортсы тыуған ҡалаһына ҡайтты һәм миҙалды, гәзиттәгесә, Рәсәйҙең Спорт министрлығы музейына ебәрәсәге хаҡында һөйләне. Республиканың спорт министры Руслан Хәбибов һүҙҙәренсә, Башҡортостан ил субъекттары араһында миҙалдар һаны буйынса Мәскәү өлкәһе, Татарстан Республикаһы һәм Санкт-Петербург менән бергә дүртенсе урынды билән. "Ҡышҡы Олимпиадала күп миҙалдар, һис шикһеҙ, Башҡортостандың ҡышҡы спорт төрҙәре төбәге булыуын раҫлай, әммә беҙҙә "Тау саңғыһы спорты" һәм "Сноуборд" кеүек спорт төрҙәрендә үҫеш нөктәләре бар. Был төрҙәрҙә дисциплиналар күп, донъя аренаһында беҙ тағы ла юғарыраҡ күтәрелә алабыҙ. Бөгөн бының өсөн бөтә шарттар ҙа бар", - тип билдәләне Руслан Хәбибов. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың Спорт министрлығына Башҡортостан спортсыларын ҡотлау тәҡдимдәрен әҙерләргә ҡушты. "Балалар күрһен өсөн беҙ уларға хөрмәт күрһәтергә тейешбеҙ", - тине Радий Хәбиров.

# ДӘРТЛӘНДЕРЕҮ ӨСӨН...



**Радий Хәбиров Башҡортостан Башлығы стипендиаттарына дәртләндереү түләүҙәрен арттырыу тураһында указға ҡул ҡуйҙы.**

Шулай уҡ уҡыуҙа, ғилми эшмәкәрлектә юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән юғары һәм урта махсус уҡыу йорттары аспиранттары, студенттары өсөн стипендиялар һаны 235-кә тиклем арттырылды. Документҡа ярашлы, 2022 йылдың 1 майынан Башҡортостан Башлығының аспиранттарға айлыҡ стипендияһы - 8 050 һум, юғары уҡыу йорттары студенттарына - 6 000 һум, урта махсус уҡыу йорттары студенттарына 4 900 һум була. Республика етәксеһе Радий Хәбиров урта һөнәри белем биреү буйынса республика советының беренсе ултырышында ошо хаҡта әйткәйне. "Ошо көндәрҙә урта махсус уҡыу йорттары студенттары араһында Башҡортостан Башлығы стипендияһын алыусыларҙы 107-нән 150-гә тиклем арттырыу тураһында Указға ҡул ҡуйҙым. Айлыҡ түләүҙәр суммаһы ике тапҡырҙан ашыуға - 2 300 һумдан 4 900 һумға тиклем арта. Бөгөн урта һөнәри белем биреү системаһы тәжрибәле, квалификациялы остаздарға һәм мастерҙарға мохтаж. Иң яҡшы уҡытыусыларыбыҙға ярҙам ҡулы һуҙасаҡбыҙ. Быйыл уҡытыусыларға, производствоға уҡытыу мастерҙарына гранттар булдырыла. Йыл һайын иң яҡшы 10 уҡытыусыға 600-әр мең һум аҡса бирергә йыйынабыҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

# ШӘФҠӘТ ТУТАШЫ БУЛҒЫҢ КИЛӘМЕ?



**Сираттағы "Һаулыҡ һаҡлау сәғәте"ндә Башҡортостан вице-премьеры - һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин республика ҡалаларында һәм районлдарында медицина колледждарының яңы филиалдарын асыу пландары хаҡында һөйләне.**

Әйтәйек, алдағы ике йылда Өфөлә, Бөрөлә, Стәрлетамаҡта, Туймазыла, Салауатта, Бәләбәйҙә, Белоретта һәм Сибайҙа эшләгән медицина колледждарына Нефтекамала, Октябрьскийҙа, Учалыла һәм Мәсәғүт ауылында яңы филиалдар өҫтәлә. Һаулыҡ һаҡлау министры һүҙҙәренсә, республика 2 меңдән ашыу фельдшер-акушерлыҡ пунктын һаҡлап ҡалды, һуңғы йылдарҙа уларҙы этаплап алмаштырыу, ремонтлау һәм яңыларын төҙөү эштәре бара. "2019 йылдан "Һаулыҡ һаҡлау" милли проекты сараларын бойомға ашырыу барышында 151 фельдшер-акушерлыҡ пункты файҙаланыуға тапшырылды. Яңы ФАП-тар өсөн белгестәр кәрәк, ә был тәү сиратта медицина колледждарын тамамлаған йәштәр", - тине Забелин. Быға яуап итеп Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров быйыл уҡ ошо ҡалаларҙа һәм райондарҙа медицина колледждарын асыу бурысын ҡуйҙы. "Иртәгә колледж директорҙары ҡатнашлығында кәңәшмә үткәрәбеҙ, унда урта һөнәри белемле, шул иҫәптән һаулыҡ һаҡлау системаһы өсөн белгестәр әҙерләүҙе тикшерәбеҙ", - тип өҫтәне ул.

# ЕНӘЙӘТСЕЛЕК КӘМЕГӘНМЕ?



**БР Дәүләт Йыйылышы ултырышында сығыш яһап, республиканың эске эштәр министры Роман Деев былтыр йыл дауамында ҡылынған енәйәттәр тураһында 985 меңдән ашыу ғариза һәм мөрәжәғәт билдәле тәртиптә теркәлде һәм тикшерелде, тип хәбәр итте.**

Министр әйтеүенсә, 28 меңдән ашыу хоҡуҡ боҙоу осрағы буйынса ғәйепләнеүселәр, үткән йылдарҙа ҡылынған бер мең ярым тирәһе енәйәт асыҡланды. Талауҙың, ғурлыҡтың бөтә төрө, шул иҫәптән транспорт саралары, мал, фатирҙан, гараждан, баҡса йорттарынан, дачаларҙан урлау осраҡтары кәмеүе күҙәтелде. Профилактика хеҙмәттәренең эшмәкәрлеге урамда, көнкүрештә, балиғ булмағандар ҡатнашлығында һәм иҫерек килеш ҡылынған енәйәттәр һанын кәметеүгә булышлыҡ итте. Бынан тыш, 234 енәйәттә ғәйепләнгән 165 законһыҙ формированиелар лидерҙары һәм ағзалары яуаплылыҡҡа тарттырылды. Талау, ҡурҡытып аҡса талап итеү менән шөғөлләнгән криминаль төркөмдәр (14 эпизод), законһыҙ миграция ойоштороған (9 эпизод), күсемһеҙ милек өлкәһендә мутлашҡан (40 эпизод) енәйәтселәргә ҡарата енәйәт эштәре судҡа йүнәлтелде. Законһыҙ әйләнештән 123 кг тыйылған психоактив матдә тартып алынды. Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы талабына ярашлы, наркотиктарҙы пропагандалаған 4 мең тирәһе сайт ябылды. Роман Деев әйтеүенсә, легаль булмаған алкоголь һатыуға ҡаршы көрәш бара. Был өлкәлә 165 енәйәт һәм 2 меңгә яҡын административ хоҡуҡ боҙоу осрағы асыҡланған. 47 меңдән ашыу литр суррогат тартып алынған. 5 йәшерен цехтың эшмәкәрлеге туҡтатылған. Суррогаттан ағыуланып үлеү осраҡтары 8 процентҡа кәмегән.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Өфө лимондары Рәсәйҙең Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы, Федераль техник көйләү һәм метрология хеҙмәте ярҙамында ойошторолған "Рәсәйҙең иң яҡшы 100 тауары" конкурсында еңеүселәр иҫәбендә. Башҡортостан Урман хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 2021 йылда республиканың 43 предприятиеһы конкурстың төбәк этабы финалсылары булды. Сарала ҡатнашыусылар 60 төр продукция, шулай уҡ 11 төр хеҙмәт күрһәтте.

✔Өфөлә 24 марттан 22 апрелгә тиклем йөк машиналары хәрәкәте сикләнә. Баш ҡала советы депутаттары юл япмаһын һаҡлап ҡалыу өсөн шундай ҡарар ҡабул итте. Элеккесә аҙыҡ-түлек, медикаменттар, малдар, ағыулыҡ һәм почта ташыған автомобилдәргә йөрөргә рөхсәт ителә. Сикләүҙәр автобустарға, муниципаль учреждениелар, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ предприятиелары, социаль объекттар төҙөгән төҙөлөш ойошмаларының автомобилдәренә, хәрби транспортҡа һәм ауыл хужалығы техникаһына ҡағылмай.

✔Өфө ҡалаһе төҙөлөүҙең 450 йыллығына арналған ултырышта "Көньяҡ ҡапҡалар" районын комплекслы төҙөү һәм Пугачев урамын реконструкциялау мәсьәләләре ҡаралды. Быға тиклем Пугачев урамын оҙайлы ваҡытҡа ябыу күҙалланһа, властар икенсе вариант һайлаған. "Юл эштәрен беҙ трассаның ике яғында этаплап алып барасаҡбыҙ. Шуға күрә был участкала хәрәкәт туҡталмаясаҡ, әммә бер ни тиклем сикләнәсәк", - тип белдерә төҙөлөш кураторы, БР Хөкүмәте вице-премьеры Рәиф Әбдрәхимов.

✔Башҡортостан Республикаһы Федераль почта элемтәһе идаралығының почта музейы һәм Өфө ҡалаһының бер төркөм филателистары 2022 йылда тәүге өс маркаһыҙ почта карточкаһын сығарҙы. Улар Өфөнөң 450 йыллыҡ юбилейына арналған. Карточкалар сығарыу идеяһын В.Лебедьков, В. Березин, дизайнерҙар М. Кузьмин һәм Ж. Васюкова тәҡдим иткән. Һәр береһе 136 дана тираж менән нәшер ителгән. "Был почта карточкаларының маркаһы юҡ. Тариф хаҡы буйынса теләһә ниндәй марка йәбештереп, донъяның төрлө мөйөштәренән ебәрергә мөмкин", - тине Федераль почта элемтәһе Башҡортостан идаралығының матбуғат секретары Борис Слуцкий.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# КӨНДӘЛЕК МӘШӘҠӘТТӘРГӘ...

## бирешеп тормабыҙ



**Ил яҙмышы - ирҙәр иңендә, ти халыҡ мәҡәле. Һөҙөмтәне ваҡыт күрһәтер, әммә Өфө ҡала хакимиәте вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Ратмир Мәүлиевтың үткәргән беренсе оператив кәңәшмәһенең тап Ватанды һаҡлаусылар көнө алдынан ойошторолоуы ниндәйҙер символик мәғәнәгә эйә кеүек. Хәйер, бар нәмәнән кинәйә эҙләмәй торайыҡ, мэр һайлау буйынса конкурс үтеүен көтәйек. Һуңынан, киленде йыл тормай маҡтама, тигән мәҡәлгә таянырбыҙ.**

Ратмир Мәүлиев ысынлап та тынысһыҙ ваҡытҡа тура килде: Донецк һәм Луганск өлкәһенән Башҡортостанға килгән мәжбүри ҡасаҡтарҙы урынлаштырыу һәм уларға ярҙам итеү көн үҙәгенә сыға. Өфөгә килеүселәр һаны ике мең самаһы тип билдәләнә. Тап ошондай ваҡытта башҡа проблемалар: урамдағы ҡар, ҡыйыҡтағы боҙлауыҡ, юлдарҙағы тығындар һ.б. икенсе планға күсә - улар хатта әһәмиәтһеҙ кеүек күренә башлай, сөнки һүҙ йәшәү менән үлем тураһында бара.

Ә артыҡ философияға бирелмәй, көндәлек тормошҡа урап ҡайтҡанда, һаман да ҡар проблемаһы көн тәртибенән төшмәй. Өфө ҡала хакимиәтенең коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, уҙған аҙнала барлығы 244 мең кубометр ҡар сығарылған, миҙгел башынан сығып ҡарағанда был һан 1,6 млн кубометр, йәғни былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 40 процентҡа күберәк. "Ҡарлы Өфө" интерактив картаһына 16842 мөрәжәғәт килһә, уларҙың 13377-һе башҡарылған, 1474-е буйынса эш алып барыла, 1984-е кире ҡағылған, 7-һе - ҡарала. Яҙ һулышы тойолоу менән ямғыр һыуын ағыҙыу канализацияларын тикшереү мәшәҡәте лә килеп тыуған. Әгәр канализация таҙартылмаһа йәки тонһа, урамдарҙы һыу баҫыуын көт тә тор.

Шулай уҡ оператив кәңәшмәлә сүп-сар таҙартыу мәсьәләһенә лә иғтибар бирелде. Был йәһәттән Октябрь һәм Киров районы хакимиәттәре башлыҡтары үҙ биләмәләрендәге ихаталарҙа, контейнер майҙансыҡтарында эш нисек алып барылыуы тураһында һөйләне һәм уртаҡ проблемаға туҡталды - сүп-сарҙы ваҡытында алып сығыу. Быға күп осраҡта контейнерҙар алдына парковкаланған транспорт һәм шәхси секторҙағы ҡатмарлы рельеф ҡамасаулай.

Оператив кәңәшмәлә күңелле темалар ҙа булып тора. Был юлы ул Пекинда үткән 24-се Ҡышҡы Олимпия уйындарында ҡатнашыусы Өфө спортсыларының уңыштары тураһындағы мәғлүмәт булды. Ҡала хакимиәтенең физик культура һәм спорт буйынса идаралыҡ начальнигы Егор Сорокин белдереүенсә, Рәсәйҙең йыйылма командаһына 15 спортсы ингән һәм Семен Елистратов шорт-трек буйынса бронза призер, биатлонсы Эдуард Латипов - өс тапҡыр бронза призер исемен яуланы.

Оператив кәңәшмәлә күтәрелгән мәсьәләләр буйынса гәзитебеҙҙә даими таныштырып барабыҙ, шуға уларҙың һәр ҡайһыһына айырым туҡталып тороу кәрәкмәй ҙә. Иң мөһиме - илебеҙ тыныс, донъяларыбыҙ имен булһын, көндәлек мәшәҡәттәргә генә бирешеп тормабыҙ.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# ТЕРРИТОРИЯҢДЫ ТАҘА ТОТ!



Башҡортостан Республикаһының Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы ҡышҡы осорҙа төҙөкләндереү объекттары һәм уларҙың эргә-тирәһен таҙа тотоу буйынса төп талаптар тураһында иҫкәртеп тора. Был, тәү сиратта, граждандарҙың ғүмеренә һәм сәләмәтлегенә хәүеф тыуҙырған ҡағиҙә боҙоуҙарҙы булдырмауға йүнәлтелә. Төҙөкләндереү, таҙартыу һәм территорияны санитар тәртиптә тотоу ойоштороу-хоҡуҡи формаһы ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, ошо территорияға беркетелгән граждандар, предприятиелар, ойошмалар, учреждениелар тарафынан башҡарыла.

Инеү урыны, баҫҡыстар тулыһынса ҡарҙан һәм боҙҙан, шулай уҡ ҡыйыҡтарҙан ҡар һәм боҙбармаҡтарҙан таҙартылырға тейеш. Эргә-тирә юл ҡатламына тиклем таҙартырға кәрәк. Шулай уҡ хәрәкәт мөмкинлеге сикләнгән граждандар өсөн пандустар һәр саҡ таҙа булырға тейеш.

Төҙөкләндереү ҡағиҙәләренә ярашлы, биләмә сиктәре билдәләнә. Айырым торған сауҙа нөктәләре өсөн ул 15 метр, шәхси йорттар өсөн - 10, күп фатирлы торлаҡ йорттарҙың беренсе ҡатында урынлашҡан торлаҡ булмаған биналар өсөн - 10, төҙөлөш барған объекттар өсөн - 15, башҡа торлаҡ булмаған биналар, кәртәләнмәгән ҡоролмалар өсөн - 25. Был территорияларға тротуарҙар, йәшелләндерелгән территориялар инеүе мөмкин, әммә улар юл бордюрына, дөйөм ҡулланылышта булған автомобиль юлына еткәс, туҡтай.

Ғәмәлдәге Төҙөкләндереү ҡағиҙәләре нормаһын боҙған өсөн Башҡортостан Республикаһының Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексының 6.3 статьяһы буйынса штраф ҡаралған. Граждандарға ул 2-3 мең һум, етәкселәргә - 10-15 мең һум, ойошма-предприятиеларға - 50-100 мең һум; 6.8 статьяһы буйынса етәкселәргә 5-10 мең һум, ойошма-предприятиеларға - 15-20 мең һум.

*ҠЫҪҠАСА*

# ЯҢЫ ҺӘМ ЯҢЫСА...

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң 450 йыллығына арналған эш күләмен "ғәйәт ҙур" тип атаны.** Республика етәксеһе ҡушыуы буйынса, төҙөүселәр майҙансыҡтарға ваҡытында сыға алһын, өфөләр бөтә нәмә хаҡында хәбәрҙар булһын өсөн һәммәһе лә яҡшы эшләргә тейеш. Быйыл уҡ баш ҡалала йәмәғәт биләмәләре төҙөкләндерелә башлай. Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Алан Марзаев һүҙҙәренсә, бер юлы 16 скверҙа һәм паркта эштәр башлана. "Өфөнөң Дим паркын, Черниковкалағы Нефтехимиктар паркын, Инорстағы Йылы күлен төҙөкләндереү планлаштырыла. Бер нисә объектты яңыртыу эштәре аҙағына яҡынлаша. Улар иҫәбендә - Дан бульварындағы сквер, ул "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проекты буйынса федераль аҡса иҫәбенә төҙөкләндерелә", - тине ведомство етәксеһе Өфөнөң 450 йыллығына әҙерлек буйынса кәңәшмәлә. Июндә Ҡала көнөнә Сипайлово биҫтәһендә яңыртылған "Ҡашҡаҙан" паркы асыла. Киләһе йылда Аксаков исемендәге баҡсала, Ғафури һәм Ленин парктарында эштәр башлана.

✓ **Ҡала Советы депутаттары ҡабул иткән ҡарарға ярашлы, 16 мартта ҡала хакимиәте башлығы вазифаһына конкурс уҙасаҡ.** Кандидаттарҙан документтар ҡабул ителде лә инде. Һуңынан мэр вазифаһына дәғүә итеүселәр тураһында ҡала Советының рәсми сайтында мәғлүмәт буласаҡ. Конкурс комиссияһы составына алты кеше инә, уларҙың өсөһө - БР Башлығы, өсөһө ҡала Советы тарафынан билдәләнә. БР Башлығы Указы менән конкурс комиссияһына БР Башлығы хакимиәте вазифаһын башҡарыусы Урал Килсенбаев, БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Азат Бадранов, БР Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитеты рәйесе Владимир Спеле инә. Ҡала Советынан комиссия составына Александр Мельников (ҡала Советы рәйесенең беренсе урынбаҫары), йәмәғәтселек менән бәйләнеш, Граждандарҙың хоҡуҡтарын һәм азатлығын һаҡлау, хоҡуҡи мәсьәләләр комиссияһы рәйесе Руслан Зәйнуллин, Совет секретары Татьяна Коротеева инә. 4 мартта комиссия ултырышы кандидаттарҙы конкурсҡа үткәреү-үткәрмәү мәсьәләһен ҡарай, 16 мартта иһә Ҡала Советы ултырышында яңы мэр һайланасаҡ. Билдәле булыуынса, 14 февралдән Өфө ҡала хакимиәте башлығы вазифаһын Нефтекама ҡалаһының элекке мэры Ратмир Мәүлиев башҡара.

✓ **Баш ҡалала көмбәҙле күперҙе капиталь ремонтлауға әҙерлек эштәре башланды. 1 марттан ул ябыласаҡ һәм уның эргәһендәге күперҙәрҙә хәрәкәт тәртибе үҙгәрәсәк.** 14 февралдән яңы күпер дүрт һыҙатлыға әйләнде, шуға күрә водителдәрҙең һыҙаттар буйынса йүнәлеште күрһәткән юл билдәләренә иғтибар итеүҙәре һорала. Бынан тыш, Салауат Юлаев проспектынан көмбәҙле күпергә менеү ябылған. 1991 йылда эшләнгән күперҙә 1 марттан ҡалаға инеү йүнәлешендә - 4, сығыу яғына - бер, шулай уҡ бер реверсив һыҙат эшләйәсәк һәм ул көсөргәнешкә ҡарап инеү йә сығыу һыҙаты итеп көйләнәсәк. Көйләү светофор ярҙамында башҡарыласаҡ. Быңдай схема автомобилселәргә ҡатмарлыҡтар тыуҙырмаҫҡа тейеш.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Матдәләр алмашыныуы

❖ Матдәләр алмашыныуын яҡшыртыу өсөн 1-әр өлөш күгүлән (горец птичий), ҡыҙыл көртмәле һәм бөтнөк (мята перечная) япрағы, цикорий үләне, етен (лен посевной) орлоғо кәрәк. Йыйылманың 2 ҡалағына ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, ябырға һәм һыуығансы төнәтеп һөҙөргә. Килеп сыҡҡан төнәтмәне 3-кә бүлеп, көн дауамында ашарҙан ярты сәғәт алда йылытып эсергә. Был рәүешле 1 ай дауаланырға.

❖ Һалбыр ҡайын япрағы, меңъяпраҡ, тиле кишер (дымянка лекарственная), һары мәтрүшкә, шифалы ромашка үләндәрен тигеҙ өлөштә алырға һәм беренсе ысулдағы кеүек төнәтмә әҙерләп эсергә.

## Тубыҡ быуыны

❖ Тубыҡ быуындары һыҙлаһа, халыҡ дауаһында тубыҡланып йөрөргә кәңәш ителә. Мәҫәлән, тубыҡланған көйөнсә иҙән йыуырға, баҡса утарға мөмкин. Шулай уҡ көнөнә 400 аҙым яһарға кәрәк. Бынан тыш, һоло ҡайнатмаһын эсеү ҙә файҙалы. Уның өсөн 1 ҡалаҡ һолоға 1 стакан һыу иҫәбенән кәрәккән күләмдә алынған әҙерләмәне 1 сәғәт ҡайнатырға.

❖ Шулай уҡ лавр япрағынан яһалған төнәтмә лә ярҙам итә. 5 грамм лавр япрағына 300 мл һыу ҡойорға, талғын утта 5 минут ҡайнатырға һәм термосҡа ҡойоп, 4 сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көн дауамында уртлап-уртлап эсеп бөтөргә. Был рәүешле 3 көн рәттән дауаланғас, туҡтап торорға.

❖ Тубыҡ быуындары һыҙлағанда ҡойҡа ла яҡшы ярҙам итә. Әммә уны әҙерләүе мәшәҡәтле булһа, желатиндан кеҫәл эшләргә мөмкин. Быны өсөн 1 балғалаҡ желатинға 1 стакан һыу ҡойоп алдан ебетеп ҡуйырға һәм ҡайнар һыу өҫтәргә. Был кеҫәлде көнөнә 1 тапҡыр 1 ай дауамында эсергә, шунан 1 айға дауаланыуҙы туҡтатып торорға. Дауаланыу курсы 1 йыл.

## Ангина

❖ 1-2 ҡалаҡ киптерелгән шифалы ромашка сәскәһенә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10-15 минут парҙа ҡайнатырға, һыуытырға һәм һөҙөргә. 1-2 балғалаҡ бал ҡушырға. Йылы төнәтмә менән көнөнә бер нисә тапҡыр тамаҡ сайҡарға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Былтыр Бөрйән районында ғәрәсәттән һуң 500 кубометр самаһы ағас ҡолай һәм ауыл халҡы уларҙы йыйып, биләмәлә спорт комплексы төҙөргә уйлай, әммә урындағы урман хужалығы ойошмаһы быға ҡаршы сыға.*



ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Өҫтәлдәрҙәге биҙәктәр үтә стилләштерелгән. Ҡайсыға оҡшаш асалы биҙәк уртаһына эшләнгән һигеҙ тажлы оя биҙәк тәпәш өҫтәлдә ике рәткә һуҙылған. Был биҙәктәрҙе ентекләберәк ҡарап өйрәнгәндә, уларҙы суҡыштарын асып торған ҡоштарға оҡшатырға була. Бейегерәк өҫтәлдә оя биҙәк урынына өҫтән һәм аҫтан йәйәләр менән уратылған түңәрәктәр һырланған, композиция күҙҙе хәтерләтә. Ике өҫтәлдә лә ваҡ ҡына көмбәҙҙәр теҙмәһенән торған ҡайма эшләнгән. Өҫтәл аҫтындағы таҡтаның ҡырҙарына конус, ярым түңәрәк һәм түңәрәктәрҙән бәләкәй пирамидалар һырланған. Бынан тыш, тәпәш өҫтәлдә ике яҡлы ырғаҡ (интеграл) формаһындағы ҙур биҙәктәр уйылған. Өҫтәлдәрҙең тояҡтары ҡырып яһалған, төрлө деталдәрҙән ҡоролған кеүек. Шулай итеп, өҫтәлдәрҙе семәрләгәндә боронғо һайланма һырлау һәм ҡырыу станогы ярҙамында яһалған үтәнән-үтә һырлау ысулдары бергә ҡулланылған.

Күсмәндәрҙең көнкүрешен үтә ябайлаштырып күҙ алдына килтереү дөрөҫ түгел, бигерәк тә йорт йыһаздары игенселеккә нигеҙләнгән ултыраҡ тормошҡа бәйле барлыҡҡа килгән тип фаразлау дөрөҫкә тап килмәй. Кеше ниндәй генә шарттарҙа йәшәһә лә һәр саҡ көнкүрешендә уңайлыҡтар булдырырға ынтылған. Үрҙәрәк һикеләр, өҫтәлдәр, урын аяҡтары һәм тирмә эсендәге башҡа йыһаздар тураһында һөйләп киттек. Мебель йорттоң ҙурлығына ҡарап, айырым йәшәү рәүешенә тап килтереп эшләнгән. Борондан уҡ халыҡтар араһында мәҙәни бәйләнештәр булдырылған һәм бербереһенән үҙләштереү ҙә булған. Көнсығыш славяндар торлағын өйрәнгән этнограф Е.Э. Бломквист Украинаның ҡайһы бер ауылдарында, Кубань һәм Дон станицаларында йорт эргәһендәге үләндә 25-35 сантиметр ғына бейеклектәге өҫтәлдәр артына ултырып ризыҡланыуҙары тураһында телгә ала. Ул славяндарҙың көньяҡ ауылдарында бындай өҫтәлдәр "боронғо күскенселәр мәҙәниәтенән" барлыҡҡа килеүе ихтималлығын фаразлай, сөнки шундай өҫтәлдәр ҡырым татарҙарында, элек скифтарҙа булған.

Ә инде ултыраҡ тормошҡа күсә барған төрки халыҡтар үҙ сиратында өйгә яраҡлаштырылған йыһаздар эшләүҙә славян һәм фин-уғыр халыҡтары тәжрибәһен ҡулланған. Башҡорт оҫталары яңы төр әйберҙәрҙе эшләргә өйрәнгән, һырлау алымдарын камиллаштырған. Заказға эшләгән ағас оҫталары булған.

Башҡортостанда, бигерәк тә урындыҡ күп урынды биләп торған көньяҡ райондарҙағы өйҙәрҙә, ҙур булмаған тура дүртмөйөш формаһындағы өҫтәлдәргә өҫтөнлөк биргәндәр. Уларҙы аш-һыу бүлмәһенә йәки урындыҡтың "таҙа" өлөшөнә яҡын ҡуйғандар һәм ҡулдан һуғылған туҡыма, йә ҡайылған ябыу япҡандар. XIX быуат аҙағы - XX быуаттың тәүге яртыһында ҡырып йә һырлап яһалған фигуралы тояҡлы өҫтәлдәр модала булған. Уларҙың ҡыҫандары ауыр булған (йыш ҡына тартма эшләп ҡуйылған) һәм татаһы бигерәк аҫта урынлашҡан. Ҡайһы осраҡта тояҡтарҙың өҫкө өлөшөндә (тура мөйөшлө) һәм ҡыҫандың йөҙлөгөндә ҡабарынҡы биҙәк һырланған.



*Һырланған өҫтәл. Татарстандың Мөслим районы Тамъян ауылы, 1960 йыл. Г.И. Мөхәмәтшин фотоһы*



**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

ДЕПУТАТ ҺҮҘЕ

# ЗАКОНДАР...

## халыҡ ихтыяжынан сығып тыуа



**Финансистарҙың беренсе кварталда отчет биреүенә күнегеп бөткәнбеҙ инде, ә бына депутаттарҙың социаль селтәрҙә генә түгел, рәсми рәүештә киң мәғлүмәт сараларын йыйып, үҙ һайлаусылары алдында отчет тотоуына һаман күнегеп китеп булмай, сөнки ундайҙар бик һирәк. Был бигерәк тә Башҡортостандан РФ Дәүләт Думаһына һайланған депутаттарға ҡағыла. Зариф Байғусҡаров иһә бер нисә йыл рәттән инде яңы йылды отчет биреүҙән һәм киләсәккә пландары менән таныштырыуҙан башлай. Ошо көндәрҙә ул тағы ла "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына журналистарҙы йыйҙы.**

Тәү сиратта Зариф Закир улы үҙенең эшмәкәрлегенә байҡау яһаны, закон проекттарының тап халыҡ менән осрашыуҙарҙан һуң, уларҙың ихтыяжынан сығып тыуыуын билдәләне. Ҡайһы берҙә урындарҙа ҡануниәтте тейешенсә аңламауҙарын һәм еренә еткереп үтәмәүҙәрен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ҡабатлағандан доға иҫкермәй, шуға был законды һәм башҡаларын тағы бер ҡат иҫкә төшөрөп үтәйек.

Мәҫәлән, лапы (валежник) тураһындағы ҡануниәт буйынса, тәбиғәт ғәрәсәтенән һуң ҡолаған ағастар ҙа ошо ҡанунға тап килә һәм уларҙы ауыл халҡы бер ниндәй түләүҙәрһеҙ, ҡаршылыҡһыҙ үҙ мәнфәғәте өсөн алып ҡайта ала. Әммә ҡайһы бер урындарҙа урман хужалығы ойошмалары ундай ағастарҙы халыҡҡа биреүгә ҡаршы. Ләкин был закон менән нығытылған һәм халыҡ мәнфәғәтен төп урынға ҡуя. Зариф Закир улы был темаға бәйле бер миҫал килтереп үтте: былтыр Бөрйән районында ғәрәсәттән һуң 500 кубометр самаһы ағас ҡолай һәм ауыл халҡы уларҙы йыйып, биләмәлә спорт комплексы төҙөргә уйлай, әммә урындағы урман хужалығы ойошмаһы быға ҡаршы сыға, йәнәһе лә, был ағастар лапы түгел һәм уларҙы хужалыҡ мәнфәғәтендә ҡулланырға ярамай йәки түләп алырға кәрәк. Халыҡ Зариф Закир улына мөрәжәғәт иткәндән һуң мәсьәлә законға ярашлы, уларҙың файҙаһына хәл ителә. Ахырҙа шундай фекер тыуа: закондар халыҡ мәнфәғәтен күҙаллаһа ла, урындағы бәләкәй һәм ҙур "тәхеттә" ултырыусылар улар менән ныҡлап танышмай, йә халыҡ мәнфәғәтендә эшләргә теләмәй. Һәм бындай күренеш менән аҙым һайын осрашырға мөмкин. Ярай ҙа һәр ерҙә үҙ депутаттарын белеп, уға мөрәжәғәт итһәләр, ҡайһы төбәктәрҙә хатта уларҙы һайлау ваҡытында ғына күрәләр бит...

Зариф Байғусҡаров белдереүенсә, уҙған саҡырылышта ул инглән комитет барлығы 35 закон проектын тәҡдим иткән, шуларҙың 26-һы ҡабул ителгән һәм ғәмәлдә. Быйыл 1 ғинуарҙан иһә алимент түләүҙән ҡасып йөрөгән "кәкүк" атайҙар һәм әсәйҙәргә талаптар ҡәтғиләштерелә. Шулай уҡ балаларға, пенсионерҙарға, курсанттарға бер тапҡыр бирелә торған пособиелар түләү тураһында закон көсөнә инде. Улар арест һалыныуҙан азат. Һәм тағы. Әгәр суд ҡарары булһа, коммуналь түләүҙәргә сығымдарға субсидия биреләсәк.

1 февралдән кредит түләү өсөн эш хаҡынан һәм пенсиянан минималь йәшәү кимәле күләмендәге сумманы (13793 һум), хатта суд ҡарары булған осраҡта ла, тотоп ҡалыу тыйыла. Был тыйыу алимент түләүҙәренә, милеккә зыян килтереү осраҡтарында ҡулланылмай. Минималь йәшәү кимәле суммаһын һаҡлап ҡалыу өсөн суд приставтарына йәки туранан-тура банкка мөрәжәғәт итергә кәрәк. Әгәр ғаиләлә балиғ булмаған йә инвалид бала бар икән, тейелгеһеҙ сумма күләмен шулай уҡ суд приставтарына һәм банкка мөрәжәғәт итеп арттырырға мөмкин. Суд приставтары ғаризаға ярашлы ҡарар сығара. Ғаризаны шәхсән үҙең барып түгел, ә электрон рәүештә йәки "Госуслуги" порталы аша ебәрергә мөмкин.

Шулай уҡ 1 ғинуарҙан пенсиялар 8,6 процентҡа артты, әммә ғинуарҙа пенсионерҙар 5,9 процентҡа индексацияланған пенсия алғас, февралдә улар 5,9 һәм 8,6 процент араһындағы айырманы ла өҫтәп аласаҡ. Быйыл уртаса пенсия 18984 һум тәшкил итә. Артабан, ил Конституцияһына ярашлы, пенсия күләме йыл һайын инфляция күләменә ҡарап индексацияланасаҡ.

Зариф Закир улы белдереүенсә, быйыл 18 йәшкә тиклемге ике йәки унан күберәк үҫмерҙе мыҫҡыл иткән, уларға ҡарата енси ғәмәл ҡылғандан һуң үлтергән йәки уның сәләмәтлегенә зыян килтергән педофилдарҙы ғүмерлеккә иркенән мәхрүм итеү тураһында закон проекты ҡарала. Шулай уҡ һуғыш суҡмарҙарын ҡәтғи яуаплылыҡҡа тарттырыу өсөн РФ Енәйәт кодексының 116-сы статьяһына үҙгәрештәр индерергә тәҡдим ителгән. Сөнки бер тапҡыр кеше туҡмап, административ яуаплылыҡҡа тарттырылғандар һуңынан енәйәт яуаплылығына тарттырылып, аҙаҡ тағы ла ҡулына ирек бирһә, уға ҡабаттан административ яуаплылыҡ ҡына ҡаралған. Үҙгәрештәр ҡабул ителһә, һуғыш суҡмарҙарына яза ҡатыраҡ буласаҡ.

Хәҙер төҫлө һәм ҡара металды йыйыусыларға ла айырым тәртипкә буйһонорға тура киләсәк, сөнки ауылдарҙа ғына түгел, ҡалаларҙа ла шәхси хужалыҡтарҙан, баҡсаларҙан металл урлау осраҡтары йышайҙы. Әммә бурҙарҙы тотоуы еңел түгел, сөнки металл ҡабул итеү пункттарында улар менән берәү ҙә яҙма килешеү төҙөмәй, иҫәп алып бармай һәм ҡулаҡса менән иҫәпләшә. Полиция хеҙмәткәрҙәре урланған әйберҙәрҙе металл ҡабул итеү пункттарында тапһа ла, уғрыларҙы таба алмай. Әгәр металл ҡабул итеүҙе килешеү нигеҙендә һәм иҫәп-хисапты ҡулаҡсаһыҙ башҡарыу тәҡдиме закон проектына индерелһә, бурҙарҙы табыуы еңелләшәсәк.

Башҡортостан өсөн тағы бер мөһим яңылыҡ: әгәр Зариф Закир улы тәҡдим иткән закон проекты ҡабул ителһә, Рәсәйҙә ер аҫты байлыҡтары менән файҙаланыусыларға эшкәртелгән ерҙәрҙе рекультивациялау өсөн махсус иҫәп асырға тура киләсәк. Йәғни лицензия ерҙәрҙе рекультивациялау сығымдарын ҡапларлыҡ күләмдә аҡса һалынған махсус иҫәп асылған осраҡта ғына биреләсәк. Әгәр ер аҫты байлыҡтарын сығарыусы һуңынан рекультивация эштәрен башҡарһа, уға иҫәптәге аҡса кире ҡайтарыла. Шулай уҡ рекультивация эштәрен мотлаҡ страховкалау варианты ла тәҡдим ителә. Ер аҫты байлыҡтарын сығарыусы ниндәй район территорияһында эшләй, шул муниципалитеттың ғына түгел, ауыл биләмәһенең дә бюджетын тулыландырыу, йәғни һалым түләү мәсьәләһе лә көн үҙәгендә тора.

Матбуғат конференцияһы һуңында Зариф Байғусҡаров журналистарҙың һорауҙарына яуап бирҙе һәм, йылдағыса, иң әүҙем хеҙмәттәшлек иткән ҡәләм оҫталарын бүләкләне.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.**

✓ *Тәжрибәле боевой офицер булараҡ, М.М. Шайморатов иҫерек баш, тупаҫ комкор Борисовтың, алды-артты ҡарамай, һуҡырҙарса алға барырға бойороуының ни тиклем хәүефле икәнен белгәндәр.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# КҮБӘЛӘКТӘР, ТИЛӘҮҘӘР, ҠЫУАҠАНДАР -

## көнсығыш башҡорттары булабыҙ

Күренеүенсә, боронғо Ҡытай хроникаһында төрлө атамалар менән нарыҡланған 3 тиҫтәнән ашыу ҡәүемдең бер үк телес берләшмәһенә ҡарауы әүәл ошо уртаҡ атама624ның этноним түгел, ә политоним булыуын раҫлай: тимәк, заманына күрә бик ҙур ғәскәр йыя алыусы ил телес, тип аталған. Ошо ил составында төрки теллеләрҙән башҡа иранлылар ҙа була: мәсәлән, алань, йәғни алан ҡәүеме фарсы теллеләр иҫәбенә инә. Тарихсы С.Г. Кляшторный ошо хаҡта былай тип яҙа: "...слово теле является китайской транскрипцией древнемонгольского слова tegreg, вошедшего и в тюркские языки, с первоначальным значением "обод, колесо", а также телега, тележник". Иными словами, китайцы позаимствовали из монгольской (сяньбийской или жуаньжуаньской) среды тот термин, который в этой среде использовался, но уже не в переводе, а в оригинальном звучании".



Ҡытайҙар телестарҙы үҙ телдәрендә башҡа бер исем менән - гаогюй (гаоцзюй), тип атай, ул ҡытайсанан "бейек арбалар", тип тәржемә ителә. С.Г. Кляшторный бер үк сәйәси-этник берләшмәнең төрлөсә аталыуын ошолай аңлата: "Другие названия дили, чиле и тиле также не оригинальны, это лишь иные варианты передачи слова теле/tegreg. И теперь позволительно сделать вывод - племенной союз гаоцзюй/теле имел самоназвание. Этим самоназванием оказалось имя огуз, происходившее, согласно древнеогузским легендам, из имени героя-эпонима Огуз-кагана".

Ошо яҙмаларҙан күренеүенсә, теле-тиләүҙәрҙең боронғо ата-бабаларын тегреклe, йәғни арбалылар, тип атағандар. Хәҙерге башҡорт телендә лә тәгәрмәс, диалекттарҙа тәгәрсәк һүҙҙәре ҡулланыла. Күрәһең, боронораҡ төркисә тәгәрәк һүҙе лә булғандыр; түңәрәк (диалектта - түгәрәк) һүҙенең семантикаһы буйынса шул уҡ тәгәрәк һүҙенә яҡын булыуын тоҫмалларға була. Тимәк, телес-тиләүҙәрҙең боронғо төрки ҡәүемдәренән булыуына шик юҡ. С. Г. Кляшторныйҙың фаразы ла ысынбарлыҡҡа яҡын: боронғо төрки донъяһына уғыҙ атамаһы менән килеп ингән ҡәүемдәр ҙә күп халыҡлы, төрлө ырыулы сәйәси-этник берләшмә булған. Тап шуның өсөн Урта Азияла, Көньяҡ Себерҙә шул уҡ теле тамырлы ҡәбиләләр йәшәгән, уларҙың атамалары хәҙерге заманға тиклем килеп еткән: телеуттар, теленгиттар, телестар, телеуҙар, телеукусшиҙар, тиләүҙәр.

Икенсе бер Ҡытай хроникаһы - "Тан-шу"ла Гаогюй (телес) биләмәләрендә түбәндә һаналып үткән ҡәбиләләр йәшәүе хаҡында мәғлүмәт бирелә: юаньгэ, сйеяньто, кибиюй, дубо, гулигань, доланьгэ, пугу, байегу, тунло, хунь, сыгйе, хусйе, хигйе, адйе, байси. Боронғо Орхон-Енисей ташъяҙмаларында теркәлгән ҡайһы бер төрки ҡәүемдәренең атамалары ҡытай телендәгеләренә тап килә: юаньгэ - уйғыр, сйеяньто - сир-ямтар (сирҙәр - ҡыпсаҡтарҙың боронғо атамаһы, турк-сир будун - төрки-сир халҡы), дубо - туба (тува), гулигань - курыкан, доланьгэ - теленгит (алтайҙарҙың этник төркөмө), пугу - буку (ҡырғыҙҙарҙың ырыу атамаһы), байегу - байырку (Орхон яҙмаһында), тунло - тонгра (Енисей яҙмаһында), хунь - кун (ғәрәп һәм Европа текстарында осрай), адйе - эдиз (Орхон яҙмаһында).

Ҡайһы бер тарихи документтар Ҡытай яҙмаларындағы гаоцзюй/теле ҡәүемдәренең үҙ сиратында тағы ла боронғораҡ Хань династияһы замандарында иҫкә алынған динлин ҡәбиләләренең вариҫтары булыуын фаразларға мөмкинлек бирә. Мәсәлән, ошо сығанаҡтарҙың береһендә беҙҙең эраға тиклем III быуат аҙаҡтарында гун шаньюйы (батшаһы) Маодунь һәм цзянькунь-ҡырғыҙҙар буйһондорған ҡәбиләләр араһында динлиндар ҙа аталып үтелә.

Этногенетик тикшеренеүҙәр барышында тиләү ырыуы башҡорттарының ике гаплотөркөмгә ҡарауы асыҡланды: R1a-M198 һәм R1b-M73. Беренсеһе Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш һәм көнсығыш зоналарында йәшәүсе башҡорттарға (шул иҫәптән табындарға ла), шулай уҡ ҡыпсаҡтарға хас. Ошо гаплотөркөмгә ҡараған кешеләрҙең ата-бабалары боронғо һинд-европа затынан булып, тәү төркиҙәрҙең тиеле/ тиләү/угыҙ ҡәбиләләре формалашыуында ҡатнашҡан. R1b-M73 гаплотөркөмө иһә алтайҙарҙың ҡуманды ҡәбиләһендә, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, башҡорт ҡыпсаҡтарында ла бар. Бачат телеуттарының яртыһы тиерлек ошо уҡ гаплотөркөмдөң икенсе бер тармағына ҡарай.

Тиләү ырыуы башҡорттары нигеҙләгән ауылдар Учалы районында урынлашҡан. Бына уларҙың исемлеге: Әбләҙ (Ҡарағай) - был ауыл хәҙерге көндә бөткән, Әбсәләм (Этимгән) - 2010 йылда 89 кеше иҫәптә булған, әлеге көндә был ауыл да юҡ, Алтаяҡ (Килмәк) - бөткән ауыл, Амангилде, Байрамғол (Яңы Байрамғол), Ғәҙелша (Хәлит), Ғәлиәхмәр, Ҡаҙаҡкүл - был ауыл юҡ, Яңы Ҡаҙаҡкүл, Ҡәйепкүл, Ҡалуй, Көсөк, Мәскәү, Мишкә (Яңы Мәскәү), Муса, Науруз, Рафиҡ (Миндәк ауылы составында), Сураман, Йәһүҙә.

Тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш зонаһында һәм көнсығышында заманында ҡыуаҡан башҡорттарының да ярайһы уҡ киң биләмәләре булған. Ҡыуаҡандарҙың килеп сығышы хаҡында ғилми әҙәбиәттә әлегә тиклем аҙмыкүпме аныҡ булырҙай ҡараш формалашмаған. Фольклор материалдарына айырым иғтибар биргән ғалим Р.Ғ. Кузеев та ҡыуаҡандарҙың атабабалары хаҡындағы риүәйәтен генә иҫкә ала: мәғлүмәт биреүселәр төп бабаларының Алтайҙан, Байкал күле тарафтарынан, йәиһә Монголиянан килеүҙәре турала624һында һөйләй. Билдәле ғалим, заманында ҡыуаҡан ырыуынан айырымланып китеп, түбәләҫ исеме менән атала башлаған башҡорттарҙың үҙҙәренең сығышын һундар менән бәйләүенә иғтибар иткән: "Беҙҙең ырыуыбыҙ һундарҙан", - тип һөйләй улар.

Тарихсы С.И. Хәмиҙуллин фекеренсә, ҡыуаҡан атамаһының көнсығыш сығышлы булыуын Пекинда 1744 йылда баҫылып сыҡҡан "Общее обозрение маньчжурских родов, находящихся в составе восьми знамен" исемле хеҙмәттә Цин династияһына буйһонған 233 монгол һәм маньчжур ҡәбиләләре исемлегендәге Кэокэн тигән атама ла раҫлай. Тикшеренеүсе ошо атаманың беҙҙең ҡыуаҡанға тура килеүен иғтибарға алған.

Ҡыуаҡандар составына ингән түбәләҫтәрҙе лә боронғо монголдар менән бәйләп була. XV быуатта фарсы тарихсыһы Рашид ад-Дин Байкал аръяғындағы ҡәбиләләр тураһында яҙғанда тулас/туаластарҙы ла иҫкә ала. Сынғыҙ хан походтары заманында тувалас-түбәләҫтәр элегәрәк йәшәгән төйәктәрен ҡалдырып китеп, көнбайышҡараҡ күсеп китә. Алтын Урҙа дәүләтендә улар Бату хандың энеһе Шибан биләмәләрендә йәшәй, уларҙың Шибан олоҫо ҡәбиләләре составында булыуы тарихи сығанаҡтарҙа сағылыш тапҡан. Улай ғына ла түгел, түбәләҫтәр хандарға яҡын булған клан итеп ҡарала: шибанидтар нәҫеленән булған Убайдуллах хандың (1533 - 1540) әсәһе түбәләҫ бәгенең ҡыҙы була.

Йәнә шуныһы ҡыҙыҡлы: XVIII быуатта Ҡыуаҡан улусы составына ҡуңрат ырыуы инә. Ә был ырыу Алтын Урҙала аристократик ырыуҙар иҫәбенә ингән була. Артабан Ҡуңрат олоҫо айырымланып, ұҙаллы олоҫ булып китә: 1737-1738 йылдарҙа Себер даруғаһында ошо олоҫ Конгратская йәиһә Конратская, тип теркәлә. Ҡыуаҡандар составынан сыҡҡандан һуң улар менән яҡын ҡәрҙәшлектә булған түбәләҫтәр ҙә айырым олоҫ хасил итә.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 6-сы һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Бына ошо беҙҙән инде бик алыҫта, тарих төпкөлөндә тороп ҡалған ваҡиғалар хәҙерге заманда асыҡлана биргәндәй тойола. Ҡайһы бер мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 1942 йылдың ноябрь аҙаҡтарында комкор М.Д. Борисовҡа юғарылағы хәрби командованиенан генерал-майор Миңлеғәли Минһаж улы Шайморатовты корпус командиры урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләү хаҡында бойороҡ килә. Әммә Борисов ошо бойороҡто үтәргә теләмәй, йәшереп йөрөй. Комкор урынбаҫары вазифаһын генерал-майор Степан Иванович Дудко биләй (ул да 1943 йылдың 23 февралендә рейдтан сыҡҡан саҡта, корпус штабы офицерҙары менән бергә барғанда, немец һалдаттары уты аҫтына эләгеп, һәлāк була). Әйтергә кәрәк, беҙҙең дивизия яугирҙары Штеровка ауылы йүнәлешендә, юлһыҙ-ниһеҙ ерҙән тәрән ҡар ярып барғанда, генерал Дудко улар менән булмай.

Тәжрибәле боевой офицер булараҡ, М.М. Шайморатов иҫерек баш, тупаҫ комкор Борисовтың, алды-артты ҡарамай, һуҡырҙарса алға барырға бойороуының ни тиклем хәүефле икәнен белгәндәр. Борисовтың алда, фронт һыҙығында, немецтарҙың йүнле оборонаһы булмауы хаҡындағы фекеренең дә хата икәнен аңлағандар. Бәлки, тап шул сәбәпле, ул бер нисә офицеры һәм һаҡсылар взводы менән юл ярып, иң алдан барғандыр. Тимәк, ул, батыр яугирҙарын ҡурсалап, дошман уты аҫтына үҙ теләге менән барып ингәндер. Тик шулай итеп кенә фараз итергә ҡала, бит уны комкор Борисов башҡа офицерҙар алдында бер сәбәпһеҙ ҡурҡаҡлыҡта ғәйепләй.

Ваҡиғалар барышына кире ҡайтайыҡ. Корпус көстәре дошман тылында, ҡамауҙа: тирә-яҡтағы барса ауыл-ҡасабалар немецтар ҡулында, улар баштан-аяҡ ҡоралланған. Ни эшләп шулай булмаһын инде: был фронт һыҙығынан 4-5 саҡрым ғына арттараҡ урын, бында немецтарҙың көсәйтелгән яҡын тылы. Ә беҙҙең яугирҙарыбыҙҙың мылтыҡ-автоматтарының патрондары ла, орудиеларҙың снарядтары ла һанаулы ғына ҡалған.

Борисов янынан сығыу менән, комдив тиҙ арала иң ҡыйыу, иң булдыҡлы боевой офицерҙарына күрһәтмәләр бирә. Хәрби ситуация үтә көсөргәнешле була. Унда, Ивановка ауылында ла, һулда - Штеровкала ла, аргта ла, алда ла - дошман көстәре: уларҙа танкылар, орудиелар, миномёттар...

Рейд барышындағы юғалтыуҙар арҡаһында дивизия яугирҙарының сафтары ныҡ һирәгәйеп, иҫән ҡалғандарҙан йыйылма отряд тупланған була. Комдив ошо отрядты ике төркөмгә бүлеп, айырымыраҡ йүнәлештәрҙә хәрәкәт итергә ҡарар итә. Күрәһең, дивизия штабы, штаб подразделениелары ла, Штеровка ауылынан саҡрым ярым көньяҡтараҡ булған тәрән һәм киң йырын (Романов балкаһы) буйлап барып, фронт һыҙығына сығырға була. Фронт һыҙығы артындағы беҙҙең частарға тиклем ни барыһы дүрт-биш саҡрымлап ара ҡала.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Беҙ ҡабул иткән программа "Мәҙәниәт - киләсәк образы" тип атала. Мәҙәниәт - ул иртәгә була торған күренеш. Бөгөн яҙылған китаптар, төшөрөлгән фильмдар, күрһәтелгән спектаклдәр иртәгә ысынбарлыҡҡа әүереләсәк.*



# МӘҘӘНИӘТ ЙОРТТАР ТӨҘӨМӘЙ,

**Илебеҙҙә 2022 йыл Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫ йылы тип иғлан ителде. Ә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы иһә ағымдағы йылды Башҡорт мәҙәниәте һәм рухиәт йылы тип нарыҡланы. Һәр нәмә аҡса күҙлегенән ҡарап баһаланған прагматик заманда мәҙәниәткә быңдай иғтибарҙың барлыҡҡа килеүен нисек баһаларға була? Билдәле кинорежиссер, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы, Башҡортостан Республикаһының Шәйехзада Бабич исемендәге йәштәр дәүләт премияһы лауреаты, Рәсәй Федерацияһы Кинематографсылар союзы ағзаһы, Рәсәй Федерацияһы кинорежиссерҙар Гильдияһы ағзаһы Булат Тимербай улы ЙОСОПОВ менән әңгәмәбеҙ тап шул хаҡта бара.**

**Булат Тимербай улы, иҫеңдә булһа, үткән быуаттың 90-сы йылдарында Рәсәй Федерацияһы Президенты Борис Ельцин "Культура подождет!" тигән һүҙҙәр әйткәйне һәм ысынлап та мәҙәниәткә башҡа өлкәләге реформаларҙы атҡарыуҙарын "көтөп торорға" тура килгәйне. Һәм бына 2022 йыл илебеҙҙә Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫ йылы тип иғлан ителде. Мәҙәниәттең мөһимлеген аңлар өсөн шунсама йылдар кәрәк инеме? Ғөмүмән, һинең өсөн нимә ул мәҙәниәт?**

- Һәр нәмә мәҙәниәттән башлана, тигән аңлау, ниһайәт, беҙҙең аңға ла килеп етте. Сөнки быға тиклем мәҙәниәтте күңел асыу, ҡыланыу, кемделер эләкләү, шоу ойоштороу тигән аңлау йәшәп килде. Ә бит юғары мәҙәниәт ҡиммәттәр моделен һәм стандарттарын барлыҡҡа килтерә. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ултырышында ла мин ошо хаҡта әйткәнем булды: мәҙәниәт автомобилдәр яһамай, юлдар төҙөмәй, йорттар һалмай, ул киләсәгебеҙҙең моделен формалаштыра. Әгәр ҙә беҙ мәҙәниәткә эйә булмаһаҡ, граната тотҡан маймыл хәлендә ҡалырға мөмкинбеҙ. Ҡоролтайҙа беҙ ҡабул иткән программа "Мәҙәниәт - киләсәк образы" тип атала. Мәҙәниәт - ул иртәгә була торған күренеш. Бөгөн яҙылған китаптар, төшөрөлгән фильмдар, күрһәтелгән спектаклдәр иртәгә ысынбарлыҡҡа әүереләсәк. Мәҙәниәт кешегә кеше булырға, хайуандарса түгел, кешеләрсә йәшәргә булышлыҡ итә.

Беҙ бөгөн барыбыҙ ҙа еңел булмаған финанс, иҡтисад проблемалары кисерәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта "Башҡорттар китте һуғышҡа" йырын ҡыуанып йырлайбыҙ. Ә ысынында башҡорттар ҡатнашҡан ул һуғыш беҙҙең өсөн оло фажиғәгә әүерелгән. Ул һуғышҡа киткән башҡорттарҙың күбеһе ситтә ятып ҡалған. Хәҙерге заман башҡорттары һуғышҡа барырға тейеш түгел, улар ғаилә ҡорорға, балалар үҫтерергә, ижад итергә, кино төшөрөргә, үҙ эшен асырға, донъя көтөргә тейеш.

Иҡтисад та, сәнғәт тә иҡтисад һәм сәнғәт булараҡ ҡына барлыҡҡа килмәй. Барыһының да нигеҙендә ижади хеҙмәт ятыуы шарт. Ә ижад кешеләр араһындағы һуғыш түгел, ә нормаль мөнәсәбәт булғанда ғына барлыҡҡа килә. Башҡорттар яугир халыҡ, был яҡшы, шул уҡ ваҡытта хәҙерге заманда яугир ғына булыу ҙа насар. Сөнки беҙ яугирлығыбыҙҙы бер-беребеҙгә ҡарата йүнәлтәбеҙ. Әгәр ҙә кемдер беҙҙең фекер менән риза булмаһа, уға ҡаршы көрәшә башлайбыҙ. Эйе, беҙ яугир халыҡ, был яҡшы, сөнки беҙ һәр ваҡыт тыныс тормош өсөн көрәшкәнбеҙ, тап шул сифатыбыҙ ярҙамында һаҡланып ҡалғанбыҙ, ғәскәр төҙөгәнбеҙ, оҫта һуғышҡанбыҙ, был да үҙенә күрә ижад.

Яугирлығыбыҙға донъяның ниндәй генә ғалимдары, ғәскәр башлыҡтары һоҡланмаған! Әммә беҙгә бөгөн бар донъя уҡыусыһын һоҡландырырлыҡ китаптар яҙырға, йорттар һалырға, заводтар төҙөргә, фильмдар төшөрөргә кәрәк.

**Һинең әйткәндәреңдән сығып, шундай һығымта яһап буламы: иҡтисад - ул кешеләр араһында дөрөҫ итеп төҙөлгән мөнәсәбәт?**

- Тап шулай, ә дөрөҫ итеп төҙөлгән мөнәсәбәт нигеҙендә юғары мәҙәниәт ята. Кешене сабыр ғына тыңлай белеү, уны бүлдермәү ҙә мөһим мәҙәниәт өсөн.

**Ә бына "Мәҙәниәт - киләсәк образы" программаһы үҙ эсенә ниндәй сараларҙы ала?**

- Мин бында 4 йүнәлеште билдәләп үтер инем:

1. Мәҙәниәт айырым төркөмгә генә хеҙмәт итергә тейеш түгел. Ысынында, республика халҡы һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә, сит илдәрҙә йәшәүселәр араһында барыбер ҙә башҡорт мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныу бар. Мәҫәлән, мин ни өсөн кино төшөрәм? Киноны һәр кем ҡарай ала. Шул уҡ ваҡытта теләгән һәр кеше сценарий яҙа, режиссер була ала. Кино шул уҡ ваҡытта популяр булырға, модаға әүерелергә тейеш.

2. Кадрҙар мәсьәләһе. Сөнки иртәгә бөгөн башлана, һәм беҙ кадрҙар мәсьәләһен бөгөн хәл итмәһәк, иртәгәбеҙ ҙә юҡ.

3. Профессиональ сәнғәт. Һәр тармаҡ буйынса күп һандағы сифатлы профессиональ сәнғәт өлгөләре тыуҙырыу мөһим. Был өлгөләр күп һанда булыуы ла шарт.

4. Профессиональ әҙәбиәт, сәнғәт, мәҙәниәт өлгөләрен үҙебеҙҙә генә түгел, бар донъяға рекламаларға, күрһәтергә кәрәк. Был йәһәттән шуны ла әйтеп үтеү мөһим: әгәр ҙә башҡорт әҙәбиәте, сәнғәте һәм мәҙәниәте өлгөләре донъя кимәленә сыҡһа, конкурс-фестивалдәрҙә һәр ваҡыт оло еңеүҙәр яулай. Тимәк, беҙ, башҡорттар, бар донъяға ҡыҙыҡлы булырлыҡ милләт.

Беҙ был программа менән республика етәкселеге, төрлө ижади союздар, сәнғәт учреждениелары, театрҙар алдында сығыш яһаныҡ һәм шуға шаһит булдыҡ: күптәрҙең был йәһәттән үҙ идеялары барлыҡҡа килде. Беҙҙең һәр ҡайһыбыҙ төрлөсә, ә мәҙәниәт беҙҙе бер урынға тупланыу мөмкинлеге бирә.

**Һин "Башҡорттар китте һуғышҡа" тигән йыр һүҙҙәренә иғтибар иттең. Һәр бер һуғышта иң төп антагонист - ул дошман. Ул булмаһа, һуғыш та юҡ. Шул уҡ ваҡытта һәр төрлө ижади өлгө, ул әҙәби әҫәрме, спектаклме, киномы, антагонист булыуы менән ҡыҙыҡлы. Әгәр ҙә ҡапма-ҡаршылыҡ булмаһа, ижадта ла үҫеш юҡ. Һинең ҡарамаҡҡа хәҙерге башҡорт киноһы, спектакле, әҙәби әҫәре өсөн төп антагонист кем ул?**

- Бында антагонистың өс тибын билдәләргә булалыр. Беренсеһе, геройҙы үҙ-үҙенә ҡаршы ҡуйған эске сифаттары, комплекстары; икенсеһе - тышҡы фактор, тәбиғәт катаклизмдары, һуғыштар; өсөнсөһө - геройға төп маҡсатына өлгәшеү юлында ҡамасаулаусы кеше. Антагонист герой булғанда ғына тыуа. Геройҙың тарихы, маҡсаты асыҡланғас, антагонист та үҙенең тештәрен күрһәтә башлай. Йәғни геройҙы антагонист тыуҙырмай, шул уҡ ваҡытта ул булмаһа, герой - герой түгел. Мәҫәлән, Рәми Ғарипов өсөн антагонист ул йәшәгән дәүерҙәге хәл-күренештәр, көнкүрешендәге проблемалары.

**Беҙ һинең "Визит", "Беренсе Республика", "Бабич", "Рәми" фильмдарын, асылда, энтузиазм ярҙамында төшөргәнеңде беләбеҙ. Нисек уйлайһың, кино сәнғәте тик энтузиазмға таянып ҡына үҫешә аламы?**

- Был һорауға философик юҫыҡта яуап бирер инем. Мәҫәлән, мин ни өсөн Мәскәүҙә эшләмәйем? Мәскәүҙә мин кемдеңдер заказын үтәүсе һөнәрсе, ялсы ғына булып эшләй алам. Унда мин үҙемә бирелгән сценарий, смета буйынса конструкциялар төҙөп, кемделер хеҙмәтләндерер инем. Ә мин шундай эгоист кешемен: тик үҙем теләгәнсә генә нимәлер эшләргә яратам. Тик аҡса өсөн генә кино төшөрөү - минең идеям түгел. Аҡса өсөн мин, мәҫәлән, үҙем туплаған белемде башҡаларға тапшырып, үҙ лабораториямда ғына шөғөлләнә алам. Мин хатта кино төшөрөргә шарттар булмаған хәлдә лә, үҙем теләгәнде эшләүем менән бәхетлемен. Шуға күрә мин ошо фильмдарым уңышлы килеп сыҡҡаны өсөн яҙмышыма рәхмәтлемен.

**"Бабич" фильмын төшөрөү өсөн тап шағир йәшәгән замандың интерьерын хәтерләткән павильонды ҡайҙан таптың?**

- Күптәр был хаҡта белмәй, мин ул павильонды "Ағиҙел" ағас эшкәртеү комбинатында таптым. Был урын Өфөнөң төньяҡ автовокзалы артында, йылға буйында. Өсөнсө мәртәбәһендә генә "Бабич" фильмы грантын отҡандан һуң комбинаттың 500 метр квадрат майҙанын арендаға алдым һәм унда фильм төшөрөү өсөн кәрәкле булған барлыҡ ҡоролмаларҙы эшләнем. Бының өсөн мин бер кемгә лә ҡаршы һуғыш та асманым, көнө-төнө фильм өҫтөндә эшләнем. "Беренсе Республика" фильмын да төрлө мажаралар менән төшөрҙөм, әммә бер кемгә лә зарланманым, әсәйем әйткәнсә, "кеше менән булманым". Әле эшләгән "Шағир көндәлеге" фильмы ла ундай хәлдәрҙән азат түгел.

**Режиссер булараҡ, атайыңдың образын нисек күҙаллайһың?**

- Көтөлмәгән һорау бирҙең, Әхмәр ағай. Ҡыҙыҡлы бер сағыштырыу. Мин Рәми Ғариповтың көндәлектәрен уҡығандан һуң тыуған фекерҙәремде шағирҙың улы Азаматҡа һөйләһәм, ул ғәжәпләнеп тыңлай. Сөнки ул атаһын бөтөнләй икенсе күҙлектән ҡарап фекер йөрөтә бит инде. Тап шуның һымаҡ, мин дә атайыма икенсе күҙлектән сығып ҡарай алмайымдыр. Бәлки, шуның өсөн дә атайымдың образы минең өсөн формалашып та бөтмәгәндер. Вафатына 6 йыл үтте, бәлки, уның һыны образ булып тулыланһын өсөн ваҡыт арауығы ла кәрәктер. Һәр шәхескә баһаны ваҡыт ҡуя, тиҙәр. Рәми Ғариповтың, мәҫәлән, үҙ юлы, үҙ образы. Атайым Тимер Йосопов минең өсөн Рәми Ғариповтың дауамы, һығымтаһы булып тойола. Был хаҡта Азаматҡа ла: "Атайың минең атайымды тәрбиәләгән, ә мине атайым тәрбиәләне, шулай булғас, атайың мине лә тәрбиәләй", тип әйткәнем бар. Шул уҡ ваҡытта Рәми Ғариповтың формалашыуында уның уҡыусылары ла ҡатнашҡан. Был күренеш башҡорт мәҙәниәтенең һоҡланғыс тарихы. Рәми Ғарипов башҡорт тарихы цивилизаторы!

## Ул киләсәктең моделен

Ул донъя мәҙәниәтен системалы аңлаусы Әҙәбиәт институтында уҡыған беренсе башҡорт шағиры. Ул үҙен түгел, ә үҙе тирәһендә система төҙөүсе. Рәми Ғарипов башҡаларға оҡшамауы менән ҡыҙыҡлы. Ул үҙ системаһын шул тиклем итеп төҙөй һәм мотлаҡ рәүештә система менән бәрелешкә инә.

Мин унда шағирҙың образын күрҙем. Уны күреп аралашып йәшәүселәр ниндәй булыуы хаҡында һөйләргә ярата. Әгәр ҙә мин уны нисек бар, шулай төшөрһәм, ул сағында документаль фильм килеп сығыр ине. Ә мин уны барыһы ла күрерлек итеп төшөрәм.

**Атайыңды мин һәр ваҡыт ихласлыҡтың образы итеп беләм. Ул сабыйҙарса ихлас булып ҡалды. Әйткәндәй, был бер минең генә фекерем түгел.**

- Рәхмәт, Әхмәр ағай! Миңә атайым хаҡындағы һәр бер фекер ҙә ҡәҙерле.

**Рәми Ғарипов 45 йәшендә донъя ҡуйған, унан һуң тағы ла 45 йыл үтте. Уның хаҡында замандаштары, дуҫтары, шәкерттәре тарафынан бик күп яҙылды, һөйләнелде, ә һин уның хаҡындағы фильмың менән шағир тураһында ниндәй яңы фекер әйтәһең?**

- Әгәр ҙә фән, ғилем кешенең аҡылына тәьҫир итһә, сәнғәт ул тойғоға, эмоцияларға йоғонто яһай. Рәми Ғариповта кешелеклек сифаттары бик көслө булған һәм бөгөн беҙ ундай кешеләргә ҡытлыҡ кисерәбеҙ. Ундай кешеләр күп булһа, тормошобоҙҙағы күп кенә проблемаларҙан ҡотолор инек. Сөнки Рәми Ғарипов

*✓ Ул шиғриәтте һайламай, ә шиғриәт уны һайлай. Мине шағирҙың кисерештәре нығыраҡ борсой. Бер яҙмаһында ул "мине бығауларға ярамай" тип әйтә. Ошо һүҙҙәре менән үҙен трагик персонаж итеп раҫлай.*

# ЮЛДАР ҺАЛМАЙ...

## формалаштыра

һәр ваҡыт үҙен кешеләргә бағышлап йәшәгән, үҙе хаҡында бөтөнләй ҡайғыртмаған. Ул бер туҡтауһыҙ ижад итә һәм бер туҡтауһыҙ беҙҙе кеше булырға өйрәтә. Өфө ҡалаһында тәүге 20-се башҡорт мәктәбен асыуҙа ла ул алдынғы сафта була, киләсәгебеҙ өсөн тырыша. Мин дә шул мәктәптә уҡыным һәм Рәми Ғарипов бының менән хәҙерге мине барлыҡҡа килтереүсе.

Рәми Ғарипов һәр ваҡыт беҙҙең ғаиләлә 5-се персонаж булды. Атайым, әсәйем көн һайын уны ниндәйҙер сәбәп менән иҫенә төшөрҙө. Беҙгә Рауил Бикбаев, Ирек Кинйәбулатов йыш килеп йөрөнө. Улар килгәндә лә һәр береһенең телендә Рәми Ғарипов исеме яңғыраны. Атайымды аңлар өсөн иң тәүҙә Рәми Ғариповты аңлау талап ителде миңә.

Фильм өҫтөндә эшләгәндә миңә шағирҙың формалашыу мәсьәләһе бик ҡыҙыҡ булды. Был тәңгәлдә миңә уның шиғырҙары түгел, ә көндәлектәре ныҡ ярҙам итте. Рәми Ғарипов үҙен формалашырыусы бер сәбәп итеп Бөйөк Ватан һуғышын килтерә. Ул шиғриәтте һайламай, ә шиғриәт уны һайлай. Мине шағирҙың кисерештәре нығыраҡ борсой. Бер яҙмаһында ул "мине бығауларға ярамай" тип әйтә. Ошо һүҙҙәре менән үҙен трагик персонаж итеп раҫлай. Совет осоронда бындай образдар күп булған, шул уҡ Вавиловты, Королевты алырға була. Рәми Ғарипов шиғри образдары аша тотош быуындарҙы барлыҡҡа килтергән.

**Рәми Ғарипов Бабичтан ҡайһы яғы менән айырылып тора?**

- Шәйехзада Бабич үҙ заманында йәшәгән шағир булараҡ, үҙенең миссияһын үтәй, Башҡортостан автономияһы нигеҙҙәрен һалыуҙа ҡатнаша: иң кәрәкле мәлдә, иң кәрәкле урында халҡының киләсәге өсөн йәнен фиҙа ҡыла. Рәми Ғарипов иһә, әйткәнемсә, цивилизатор. Ул донъя мәҙәниәте өлгөләрен үҙ халҡының мәҙәниәте аша яҡтыртыуға, синтезлаштырыуға өлгәшеүсе. Хәҙерге быуындар ҙа тап уның һымаҡ донъя мәҙәниәте өлгөләрен синтезлау аша тормошон яҡшыртыуға ынтыла.

**Владимир Лениндың "Барлыҡ сәнғәт араһынан иң мөһиме кино" тигән һүҙҙәре бөгөн ниндәй кимәлдә актуаль һәм кино ярҙамында донъяны үҙгәртеп буламы?**

- Мәҫәлән, Америка киноиндустрияһы был дәүләттең мәҙәни кодтарын формалаштыра. Әгәр ҙә шиғырҙы, романды уҡып, ундағы ваҡиғаларҙы күҙ алдына килтереү талап ителһә, кинола барыһы ла тамашасыға "сәйнәп ҡаптырыла", әҙер килеш тәҡдим ителә. Кино демократик сәнғәт төрө. Ул арзан, тиҙ, тамашасы ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә тотош быуындарҙың, айырым шәхестәрҙең тарихына шаһит булып, үҙенә һабаҡ ала. Мин романды уҡыр алдынан иң тәүҙә шул роман буйынса төшөрөлгән киноны ҡарарға тәҡдим итер инем.

**"Салауат Юлаев" фильмы Бөйөк Ватан һуғышы алдынан төшөрөлөп, ул халҡыбыҙҙың рухи донъяһында эволюцион роль уйнаған, һаман да уның йоғонтоһо бар. Әгәр ҙә һиңә барлыҡ мөмкинлектәр тыуҙырылһа, финанс та булһа, ниндәй кино төшөрөр инең һәм ул фильм нимә йә кем тураһында булыр ине?**

- Мин хатта Салауат Юлаев, Шайморатов генерал хаҡында фильм төшөрһәм дә, ул һуғышҡа ҡаршы фильм булыр ине. Унда кеше үлтереү героизацияһы һәм романтизацияһы булмаҫ ине. Һуғыш - ул кешеләр мөнәсәбәтенең иң һуңғы сараһы. Беҙ, башҡорттар, тарихта күп һуғышҡанбыҙ, етер! Минең фильмды ҡараусылар кемделер еңеүҙе түгел, йәшәүҙең ҡиммәтен аңлай алһалар, маҡсатыма ирешер инем. Сөнки һуғышта йәшәүҙең хаҡы юҡҡа сыға. Үлемдең романтикаһы юҡ һуғышта. Ә күп кенә фильмдарҙа тап үлемдән романтика эҙләйҙәр.

Күп кенә режиссерҙар: "Миңә шунсама аҡса бирһәгеҙ, фильм буласаҡ", - тиҙәр. Минең өсөн иң беренсе урында идея, сценарий тора. Нимә генә тимә, арбаны аттың алдына ҡуйып екмәйҙәр. Ундай фильмдар тәүге кадрҙарҙан уҡ күренеп тора, күңел биреп ижади эшләгән эшкә бер нәмә лә етмәй.

**Мин тарихи планда төшөрөлгән Төркиә фильмдарын яратып ҡарайым. Уларҙы хәҙерге заманда бөтә донъяның миллионлаған тамашасыһы үҙ итә. Ә бит, уйлап ҡараһаң, беҙҙең халыҡтың тарихы хаҡында ла уларҙан һис ҡайтыш булмаған фильмдар төшөрөп булыр ине. Улай тиһәң, беҙҙең ундай техник һәм интеллектуаль мөмкинлектәр юҡмы?**

- Был фекерең менән килешмәйем, Әхмәр ағай. Беҙҙең ундай мөмкинлектәребеҙ, кирәкһенсә, бар. Һәр бер ижади идеяның иң тәүҙә дөрөҫ итеп планын төҙөү кәрәк. Әгәр ҙә башҡорт яҙыусылары үҙҙәренең ижади идеяларын дөрөҫ итеп драматургия формаларына ярашлы планлаштырырға өйрәнһә, беҙ ҙә төрөктәр һымаҡ, уларҙан да яҡшыраҡ итеп фильмдар төшөрөр инек. Тәүге документ төҙөлһә, режиссер табыла, режиссерҙың янында продюсер пәйҙә була. Продюсер смета төҙөй. Сметаға ярашлы режиссер проекты барлыҡҡа килә. Артабан ресурстар эҙләү башлана. Беҙ проектҡа тиклем был эш этаптарын урап үтә алмайбыҙ. Беҙ әле башҡорт китаптары һаҡланған китапханаларҙа ултырабыҙ, әммә һаман да уларҙы кинодраматургия рәүешендә планлаштыра алмайбыҙ. Хәҙерге заманда сценарийҙар етешмәй. Мөмкинлектәр булһын өсөн авторҙар яңы шарттарға яраҡлашырға тейеш. Әгәр ҙә башҡорт әҙәбиәте кино аша модернизация үтмәһә, ул тарихи факт ҡына булып ҡалыуы бар.



*Иҡтисад та, сәнәғәт тә иҡтисад һәм сәнәғәт булараҡ ҡына барлыҡҡа килмәй. Барыһының да нигеҙендә ижади хеҙмәт ятыуы шарт. Ә ижад кешеләр араһындағы һуғыш түгел, ә нормаль мөнәсәбәт булғанда ғына барлыҡҡа килә. Башҡорттар яугир халыҡ, был яҡшы, шул уҡ ваҡытта хәҙерге заманда яугир ғына булыу ҙа насар. Сөнки беҙ яугирлығыбыҙҙы бер-беребеҙгә ҡарата йүнәлтәбеҙ. Әгәр ҙә кемдер беҙҙең фекер менән риза булмаһа, уға ҡаршы көрәшә башлайбыҙ. Эйе, беҙ яугир халыҡ, был яҡшы, сөнки беҙ һәр ваҡыт тыныс тормош өсөн көрәшкәнбеҙ, тап шул сифатыбыҙ ярҙамында һаҡланып ҡалғанбыҙ, ғәскәр төҙөгәнбеҙ, оҫта һуғышҡанбыҙ, был да үҙенә күрә ижад.*

**Сценарий яҙыусы авторҙарҙың төп хатаһы нимәгә ҡайтып ҡала, тип уйлайһың?**

- Киносценарий бизнес план һымаҡ төҙөлөргә тейеш. Иң тәүҙә сценарий өсөн кәрәкле булған барлыҡ элементтарҙы индереп, конструкция төҙөлә, сценарий шунан һуң ғына яҙыла. Әйткәндәй, был осраҡта сценарий тиҙ яҙыла. Әгәр ҙә сценарийҙы йорт менән сағыштырһаҡ, сценарий яҙыусы бер үк ваҡытта рәссам да, архитектор ҙа, конструктор ҙа булыуы мөһим. Сценарий яҙыр өсөн илһамдан бигерәк технологияны белеү кәрәк. Әгәр ҙә йортҡа ремонт кәрәк булһа, мастер был эштең барышын этаплап яҙып сыға, план төҙөй һәм ул ремонт эшен ҡыҫҡа ваҡыт эсендә сифатлы итеп башҡарып сыға. Сөнки ул ремонт эшен билдәле план, технология буйынса башҡара. Әгәр ҙә ремонт технологияһы дөрөҫ үтәлмәһә, әйтәйек, обойҙар йәбештерелгәндән һуң түбә таҡтаһы буялһа, был эш бик оҙаҡҡа һуҙыла. Шуға күрә мин үҙемдең уҡыусыларымды сценарий яҙыу технологияһына өйрәтәм. Мин уларҙы ижад итергә өйрәтмәйем. Улар былай ҙа ижадсы. "Ижад" тигән ҡойманың эсенә мин инмәйем. Әммә уҡыусыларым араһында башҡорттар бик аҙ. Улар минең хаҡта, моғайын, шулай уйлайҙарҙыр: "Һей, ул теге шағир Тимер Йосоповтың малайы Булат бит. Ул беҙгә нимә генә өйрәтә ала инде ул? Беҙ уның өйрәткәндәрен былай ҙа беләбеҙ, күптән киптереп элгәнбеҙ..."

**Сценарий яҙғанда иң мөһиме нимә: темамы, идеямы, тигәндәй?**

- Иң мөһиме - һөҙөмтә. Һөҙөмтә сифат, һан үҙгәрешен талап итә. Әйтәйек, беҙ экология тураһында фильм төшөрөргә уйлаһаҡ, уны ҡараусылар тирә-яҡ мөхитте һаҡлау өсөн нимәләр эшләй башларға тейештәр. Фильмдың һөҙөмтәһе бына ошо. Был осраҡта минең фильмым донъяны яҡшы яҡҡа үҙгәртергә булышлыҡ итәсәк. Сценарийҙың икенсе өлөшөндә идея тора, артабан инде тема барлыҡҡа килә, теманы асыр өсөн тарихтар, сюжет кәрәк була. Яҡшы сценарий яҡшы булғаны өсөн яҡшы түгел, ә дөрөҫ булғаны өсөн яҡшы.

**Республика башлығы БР Премьер-министрына Кино фондын булдырыу өсөн финанслауҙы күҙ уңында тоторға ҡушты. Ошондай фонд булдырылһа, тарихи кинолар төшөрөү мөмкинлеге лә барлыҡҡа килер ине. Шулай бит?**

- Театр режиссерҙары яңы спектакль премьералары ҡуя. Кинола инде бындай ваҡиғалар ситуацияға ҡарап, айырым осраҡтарҙа ғына була. Айырым осраҡтарҙа киностудия дәүләт заказдарын үтәп, документаль фильмдар төшөрә, ә системалы программа юҡ. Мин, мәҫәлән, дәүләт заказы буйынса йылына өс фильм төшөрөргә тәҡдим иттем. Бер фильм тарихи темаға, тағы береһе балалар өсөн фильм, өсөнсөһө - хәҙерге заман темаһына. Тарихи тема - ул үткән заман, заман фильмы - хәҙерге көн, балалар өсөн фильм киләсәк тураһында. Әгәр ҙә был тәҡдим үтһә, бик ҙур алға китеш булыр ине, сөнки бығаса бындай хәл булманы. Шуға күрә Радий Фәрит улының был идеяһы бик ваҡытлы һәм мөһим аҙым. Киләсәктә Фонд үҫешһә, күберәк фильмдар ҙа төшөрөү мөмкинлеге барлыҡҡа киләсәк.

**Һин XXI быуат башҡорто образын нисек итеп күрәһең?**

- Ул бар донъяға асыҡ булырға тейеш, ул үҙ-үҙенә бикләнергә тейеш түгел;

- ул ижадсы, үҙенән һуң киләсәк быуындарға мәҙәни артефакттар ҡалдырыусы;

- ул зарлана белмәүсе, күңелле, оптимист кеше;

- ул күп телдәр белә, башҡорт, рус, инглиз телдәрендә иркен, еңел аралаша, уның үҙ эше, бизнесы бар;

- ул халыҡ йырҙарын, ҡурай моңон ярата. Был ни өсөн мөһим? Татарстанда бер кинорежиссер һөйләгәйне, ул башҡорт халыҡ йырҙарын тыңлағандан һуң ғына үҙенең башҡортлоғон аңлаған;

- ул үҙ халҡының тарихын яҡшы белә, әммә киләсәккә ҡарай, йолаларҙы үтәй;

һәм башҡалар.

**Фәһемле әңгәмәң өсөн оло рәхмәт, Булат Тимербай улы!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*✓ Мәғариф бүлеге начальнигы вазифаһында эшләүенә ярты йыл үтеүгә, ул бөтөнләй икенсе кешегә, ысын түрәгә әүерелде. Һауаланып уҡ китмәһә лә, йөрөшөндә, һөйләшендә, беленер-беленмәҫ тәкәбберлек хасил булды.*





Рәсүл БАЙГИЛДИН

# ДАН ЮЛЫНЫҢ ТУҘАНЫ

Повесть

* * *

Мәғариф бүлеге начальнигы хакимиәт башлығының урынбаҫары булып китте, Идеал Салют улы уның урынына тәғәйенләнде. Идеалға әле ҡырҡ йәш тә юҡ. Ике ҡыҙ атаһы, үҙенең фатирында йәшәй. Машина алырлыҡ аҡса йыйнаған. Ғөмүмән, тормошо түп-түңәрәк. Шуларға өҫтәп, хәҙер ҙур урынға үрләттеләр. Хөбөтдинов бәхетлеләр рәтенә индерҙе үҙен шуға. Ҡулы аҫтында бер мең ярымдан ашыу кеше - ярайһы ҙур көс. Мәктәпте етәкләү ауыр булманы уға: барыһы ла күҙ алдында, һәр кем үҙ бурысын анығ белә һәм үтәй. Директорға, малын өйөрөп, уға күҙ-ҡолаҡ булып йөрөгән, ситкә ынтылған мөстәндәре алдында сыбыртҡы шартлатып алған, ә күндәмдәренә икмәк һыныңы ҡаптырған көтөүселәй, уяу һәм һәр саҡ үҙ урынында - ҡалҡыу түмәләстә - булыу ғына кәрәк ине.

- Идеал Салютович, "Миләш" балалар баҡсаһында өс бала ҡапыл ҡоҫоп ауырып киткән, - тип ҡаршылаһы төшкөлөгөнә ашап килгән хужаны мәктәпкәсә балалар учреждениелары буйынса бүлексә мөдире. "Бысағыма миңә һөйләп тораһың быларҙы. Ата-әсәләре юҡмәллә ул балаларҙың?" - мәғариф бүлеге начальнигының ауыҙынан абайламаҫтан ошо һүҙҙәр ысҡына яҙҙы. Хөбөтдинов хәҙер балалар баҡсаһы өсөн дә яуаплы, имеш. Ҡайҙа сөскөргәндәр, ҡайҙа ут һүнеп, балаларҙы һуңлап ашатҡандар, ҡайҙа көслө ямғырҙан һуң түбәнән һыу тамсылай - көн һайын иҫәпһеҙ-һанһыҙ мәсьәләне хәл итергә кәрәк икән. Бер кем дә үҙенә яуаплылыҡты алғыһы килмәй - үргә еткерергә, атты начальниктың кабинетында туғарырға ашығалар. Идеал элек үҙе лә шулай ҡыланды. Яңы урында йәшен ҡайтарғыс сифатында үҙе ҡалыуын ҡапылғарай аңғармай йөрөнө. Шуға теләһә ҡайһы хәбәргә: "Минең бында ни ҡыҫылышым бар?" - тигән һымағыраҡ ҡуҙғыны.

- Врач саҡырттығыҙмы? Сәбәбе ниҙә? - үҙен тиҙ ҡулға алды Хөбөтдинов. Әллә ҡасан табиптарҙы саҡыртҡандар, балаларҙы ата-әсәләренә тапшырғандар, мәсьәләне хәл иткәндәр икән.

Идеал үҙен йылғыр, үткер директорҙар иҫәбенә ҡуя торғайны. Мәғариф бүлегендә ваҡ-ваҡ хужалар бихисап, улар һәр ҡайһыһы үҙен үҙ урынында ер кендегеләй тоя, баҡһаң. Мәктәптә иһә - директор һәм уға буйһонған уҡытыусылар ғына, башҡаса эшем эйәләре юҡ. Ә бында берәүҙәр - балалар баҡсаларына, икенселәр - тел уҡытыусыларына, өсөнсөләр китапханасыларға хужа... Хужа өҫтөндә хужа - һин дә мулла, мин дә мулла, атҡа бесән кем һала, тигәндәй, улар күберәк баштарынан себен осороу менән мәшғүл. Һүҙ йөрөтәләр, интригалар ҡоралар. Идеалдың тыныс холҡон мәшәүлеккә һанап, уғата ҡотороп киттеләр бер мәл.

Хәйер, яңылышмағайнылар шул мәғариф бүлеге хеҙмәткәрҙәре үҙҙәренең һиҙемләүендә. Идеалдың ҡурҡаҡ асылы яңы мөхиттә аҙ ғына мәлгә кире ҡайтҡайны. Өс ай бигәләшләнеп, тыны ҡыҫылып йөрөнө. Үкенгәндәй ҙә итте бында күскәненә. Вазифа биләү татлы тойғоларға сорнаһа ла, көндәлек тормошо ғазаптарға күмелгәйне.

- Мөмкинме? - ишектә баш инспектор Алһыу Ғайнан ҡыҙы күренде.

- Рәхим итегеҙ. Инде һуң бит, нишләп ҡайтмайһығыҙ? - тип хәстәрлек күрһәтте хужа.

- Һеҙ ҙә эш ҡағыҙҙарынан айырыла алмай ултыраһығыҙ бит.

- Миңә тейеш. Хужа булғас ней.

Алһыу Ғайнан ҡыҙы - ғаилә ҡороп ҡарамаған, эш өҫтөндә ғүмерен заяға үткәргән, эре һөйәкле, буйсан, шулай булһа ла һөйкөмлө, ихтыяр көсө ташып торған урта йәштәрҙәге ҡатын. Уны бүлектә барыһы ла бер һүҙһеҙ тыңлай, уҫаллығынан шөрләйҙәр ҙә.

- Ҡарап йөрөйөм дә, Идеал Салютович, эшкә ауыр егеләһегеҙ кеүек, миңә ҡалһа. Бисәләр башығыҙға менеп килә бит, әстәғәфирулла. Мине дөрөҫ аңлағыҙ берүк. Кәмһетергә теләгәндән, йә көлгәндән әйтмәйем быны. Ниәтем изге: ярҙам иткем килә һеҙгә. Интеллигент асылығыҙҙы башҡалар мәшәүлек тип һанай. Ул - атаны, ҡыҙ әсәне танымаған был заманда йомшаҡ һәм ипле булыу кәмселек шул. Характер күрһәтеп алыу кәрәк ине һеҙгә. Ун йыл эшләйем бында, кемдең-кем икәнен беләм, ниндәй хөсөт уйлап йөрөгәндәрен дә күрәм. Миңә бөтә эштәрҙә лә таяна алаһығыҙ. Ҡойроҡтарына бик тиҙ баҫырмын мин ҡотҡосоларҙың. Шуны әйтергә тигәйнем.

- Рәхмәт, Алһыу Ғайнановна, - киске ҡунаҡтың көтөлмәгән был һүҙҙәренән Идеал баҙап ҡалды. Бераууҡ тын ултырғандан һуң һүҙгә килде.

- Былай, ней, ярҙамға мохтажлығым юҡ... Барыбер рәхмәт хәстәрегеҙ өсөн. Яңы вазифаның нюанстары сығып ҡына тора шул. Ун ҡул да етмәҫ... Ярҙамығыҙ, ысынлап та, бик ярап та ҡуйыр... Бәлки... Эйе, артыҡ булмаҫ... Әтеү, килешәйек шулай... - Тотлоғоп, бик уңайһыҙланып, ҡаршыһында ултырған ҡатынға ҡарамаҫҡа тырышып, күҙҙәре осрашып ҡуйыуҙан ҡурҡып, саҡ һүҙен ослап ҡуйҙы.

- Шуны өҫтәйем тигәйнем: кем әйтмешләй, бүлгелә лә - хакимлыҡ ит. Дөйөм оперативкаларҙан тыш, айырым-айырым саҡыртып эш ҡуширға кәрәк уларға. Ҡатыраҡ, ҡәтғиерәк тонда. Икәү-өсәүһен йыйып алыу ҙа килешер. Мин үҙ яғымдан гайканы нығытып бора барырмын. Аҙнаун көн эсендә ебәктәй шыма булып китерҙәр бөгөн әллә кем булып йөрөгән эшем эйәләре.

Начальниктың ҡапыл үҙгәреүен икенсе көндә үк һиҙҙе бүлек хеҙмәткәрҙәре. Буйы - ҡалҡыуыраҡ, тауышы - көрөрәк, хәрәкәттәре - киҫкенерәк, үҙен тотоуы ышаныслыраҡ күренде уларға. Идеал менән Алһыу Ғайнан ҡыҙының ҡараштары бер нисә тапҡыр осраштьы. Хатта әҙәп талап иткәндән оҙағыраҡ текләшеп тә киттеләр, буғай. Үткән эш көнөнә йомғаҡ яһау ғәҙәттәренә инде. Һәм, әлбиттә, һүҙ таралды. Имештер, улар ғишыҡ тота.

Идеал Салют улын алмаштырып ҡуйҙылармы ни. Мәғариф бүлеге начальнигы вазифаһында эшләүенә ярты йыл үтеүгә, ул бөтөнләй икенсе кешегә, ысын түрәгә әүерелде. Һауаланып уҡ китмәһә лә, йөрөшөндә, һөйләшендә, башҡалар менән үҙен тотоуында затлылыҡ, беленер-беленмәҫ тәкәбберлек хасил булды. Барыһы ла саманан артып китмәгәс, күҙгә көйөк булып төшмәне был үҙгәрештәре, уның ҡарауы, бәҫ өҫтәне. Хужа ябай уҡытыусынан айырылып торорға тейеш, шунһыҙ, уның ниндәй абруйы булһын...

* * *

Кемдер Хөбөтдиновҡа, Алһыу Ғайнан ҡыҙы һинән ысын түрә яһаны, тиһә, ул ғәрләнер ине. "Ҡайҙан был урынға күсергә риза булдым... Кире мәктәбемә ҡайтҡандаһы?" - тип өс ай яфаланғанын ул әллә ҡасан онотоп, нәҡ ошо урында ултырыр өсөн тыуғанына инанғайны.

Алһыу Ғайнан ҡыҙын ситкә типмәне, әлбиттә. Тибергә теләһә лә булдыра алмаҫ ине. Сөнки, ысынлап та, ул - һөйәркәһе. Мөнәсәбәттәренең ошо рәүешле нисек үҫеш алыуын Идеал Салют улы ла, Алһыу Ғайнан ҡыҙы ла аныҡ ҡына бер епкә теҙә алмай хәҙер.

Үткән эш көнөнә ғәҙәткә ингән сираттағы йомғаҡ яһау мәлендә осраҡлы ғына ҡулдары осрашты. Ҡайһыныһының башлап бармаҡтары ҡыҫылғандыр, шул ҡағылыу үҙҙәре лә танырға теләмәгән йәшерен тойғоларын урғылтып тышҡа сығарҙы, уларҙы фаш ҡылды ла ҡуйҙы.

Ирһеҙ Алһыу Ғайнан ҡыҙы тормош юлында осраған, танышырға насип булған һәр көслө затҡа күпмелер миҡдарҙа дәғүә итә. Был аҫҡы аң тарафынан атҡарыла, үҙе лә һиҙмәй ҡала. Идеал менән дә яҡын мөнәсәбәттәре эскерһеҙ, ҡайҙандыр килгән эске тауыш талабына буйһоноуҙан башланғайны. Ул бер ҡасан да бер кемдең дә һөйәркәһе булманы. Ғорурлығы тыя килде. Ләкин йәшенең үтеп барыуы, эстән һыҙып бошоноуы, ниҙер танһыҡлауы был кәртәне емерҙе, күрәһең. Ҡатын уяулығын юғалтты.

Идеал өсөн хәләленән башҡа икенсе бисәне һөйөү көтөлмәгән мажара ғына түгел, ә ир асылының тантанаһы булды. Быға тиклем зина ҡылмағас, тәүҙә уны шомланыу тойғоһо биләне. Үҙен бур, хыянатсы итеп тойҙо. Выжданы шулай ҡуҙғыны яңы халәтенә. Шул уҡ ваҡытта ир енесе тәбиғәте: "Был беҙҙең еңеү!" - тип семеткеләне аҫтыртын ғына. Тора-бара ул өҫкә сыҡты. Алһыу Ғайнан ҡыҙы менән икенсе-өсөнсө яҡынлыҡтан һуң, Идеал, һөйәркәле ир булараҡ, маһайыу кисерҙе.

Быуаһы йырылған йылға ише, Алһыу Ғайнан ҡыҙы шашып һөйҙө Идеалды. Мөнәсәбәттәре нығыраҡ тамырлана барған һайын дәғүәләре лә артты.

- Һөйәркә булып йәшәү намыҫыма тейә, түбәнһетә мине. Нимә уйлайһың беҙҙең киләсәгебеҙ тураһында? - тип нәһерен ҡоротто ирҙең.

- Мин бит ғаиләле кеше, ике ҡыҙым бар. Уларҙы бер ваҡытта ла ташламаясаҡмын, - был йәһәттән Идеал ныҡ торҙо.

- Намыҫымды алдың...

- Ҡыҙ түгел инең бит...

- Эскерһеҙ тәүге йәшлек мөхәббәтем... Саф мин шуға...

- Һуң, беҙ вәғәҙәләр бирешмәнек тә баһа... Йәшебеҙ ҙә аҡыл ултырғанға ишара. Булмағандайҙы талап итмә, - тәүге етди һөйләшеүҙәре шулай тамамланды.

Торараҡ тағы был хаҡта һүҙ сыҡты.

- Тәнем харам... Башҡаса миңә ҡағылма, - тине Алһыу Ғайнан ҡыҙы йөрәкһеп.

- Быға тиклемсе?..

- Аҙғын уйҙарымды ауыҙлыҡлай алмағанға ғәйепләмени мин? Мине лә аңла. Кеше бәхетенә лайыҡ түгелменме әллә? Төрлөсә уйлайым... Шәриғәт иргә дүрт ҡатын алырға рөхсәт итә... Бата уҡытһаҡ мулланан... Икенсе бисәң булырға ла ризамын... Йәшерен... Һин беләһең дә, мин беләм... Мулла ишшу... Аллаһы Тәғәлә тағы...

- Шәриғәт, тиһеңме?.. Риза булмаһамсы?

- Башҡаса яҡынлама улайһа!

- Ниндәй себен тешләне бөгөн һине? Юҡ хәбәр һөйләп тик тораһың, - Идеал уң ҡулын, ышаныслы ярҙамсыһын, берҙән-бер таянысын юғалтҡыһы килмәй ине.

Ошоға тиклем яңғыҙаҡ ҡатынды наҙлап, уға ҡарата оло миһырбанлыҡ ҡылам, тип уйлап йөрөгән Идеал аҙап ҡалды. Тимәк, һөйәркәһен генә юғалтмай, уң ҡанаты һына. Бындай ҡорбанға ул әҙер түгел. Сетерекле хәлдәрҙә баҙап, ажарыраҡ дәғүәсе алдында һүҙ таба алмай таяныс эҙләй башлай гел. Таянысы иһә, бына, сәбәпһеҙ сыпраңлай.

- Был етди аҙым, уйлашайыҡ, бәғерем, - тип ҡотолдо был юлы ла.

Беҙ тоҡта ятамы инде - Идеалдың ғишыҡ мажаралары хәләленә барып еткән.

- Мин барыһын да беләм, Идеал, - тине ғәйепле төҫ менән ҡатыны кистәрҙең береһендә.

- Нимә беләһең, ҡәҙерлем? - Идеал һағайҙы, етди һөйләшеүгә әҙерләнде.

- Алһыу Ғайнановна менән буталыуыңды...

- Ғәйбәт!

- Танма, кеше ысынды һөйләй...

- Бындай хәбәрҙе һин аҙ ишетмәҫһең. Түрә бисәләренең яҙмышы шулай. Аҡыллы, сабыр бул. Шуны ғына әйтә алам: аҡылыңды юйһаң, сабырыңды онотһаң, эштәр харап. Минең бит ҙур хужа булып ултырыуыма яңы ғына. Ҡул аҫтымда гел бисә-сәсә. Һүҙ күп сығыр. Түҙ... Һине лә, балаларҙы ла бер ҡасан да ташламаясаҡмын - шуны бел! - Идеал үҙен тыныс тотто, ышаныслы әйтте уйлап йөрөгәнен.

Күптән түгел өс бүлмәле фатир бирҙеләр, машинаһын яңыртты, өй һала башланы. Улмы ни ғаиләһен ҡарамай, балаларының киләсәген уйламай торған кеше? Уның кеүек ирҙе табырға кәрәк әле!

Өйҙә башҡаса был темаға һөйләшеү булманы. Ҡатыны, ысынлап та, аҡыллы, сабыр ине уның.

**(Дауамы. Башы 3-7-се һандарҙа).**

ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# ИҢ АЛДАН ЙҮГЕРӘ ТОРҒАН КЕШЕМЕН...



**Рәсәй һәм Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы, комсомол, партия органдары ветераны, публицист, йәмәғәт эшмәкәре ИЛЬЯСОВ Спартак Мөжәүир улы 1941 йылдың 7 ноябрендә Учалы районының Ыҫтамғол ауылында тыуған. Мәктәпте тамамлағас, "Поляковка" совхозында йылҡы көтөүсеһе була, Учалы районы комсомол комитетында инструктор булып эшләй. Әрме хеҙмәтенән һуң "Байрамғол" совхозының ВЛКСМ комитеты секретары була. 1964-1969 йылдарҙа Мәскәү ҡалаһында К.А.Тимирязев исемендәге Ауыл хужалығы академияһында уҡый. Уны тамамлағас, Учалы районындағы ауыл хужалығы предприятиеларында 29 ауылды берләштергән партия комитеты секретары, артабан колхоз рәйесе, райондың ауыл хужалығы идаралығы белгесе, совхоз директоры кеүек төрлө яуаплы вазифаларҙа эшләй. 1998-2001 йылдарҙа Силәбе дәүләт педагогия университетының Учалы филиалы уҡытыусыһы була. Хаҡлы ялға сыҡҡас, Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаҫары итеп һайлана һәм 75 йәше тулғансы шунда эшләй. Спартак Мөжәүир улы Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, М.Буранғолов исемендәге әҙәбиәт премияһы лауреаты. Китаптары: "Барын-Табын хәтере", "Яраһаҙ яралары", "Ҡолой кантон", "Бығылый", "Ҡағанат вариҫтары". Спартак Ильясов - "Көйөлдө", "Ирәмәлкәй", "Малбай", "Зарыҡай", "Бутис палкауник", "Хәжирә йыры", "Кәкүккәй", "Кинйәкәй", "Ҡасҡындар ҡобайыры", "Төхфәт кантон" кеүек көнсығыш башҡорт ырыуҙарының йырҙарын һаҡлаусы, терелтеүсе.**

➔ **Спартак ағай, оҙаҡ йылдар хужалыҡ етәксеһе, совхоз директоры булып эшләнегеҙ, ил төҙөлөшөнөң күп кенә ваҡиғаларының шаһиты булдығыҙ, үҙегеҙ ҙә уларҙа ҡатнаштығыҙ. Ике быуат, ике дәүер сатында совет власының емерелеүен нисек кисерҙегеҙ?**

- Оҙаҡ йылдар буйына бер ижтимағи ҡоролошта йәшәгәс, эшләгәс, шул заманда йәшәгән кешеләр менән минең рухи ҡарашым да, рухи булмышым да берегеп бөткән ине. Үҙем дә шул рухи мөхиттә ҡайнап йәшәгәс, мин башҡаса бер ниндәй ҙә идеологияға бирелеп, башҡа төрлөсә була алманым һәм була ла алмайым. Илебеҙ халыҡтарына тиңлек, яҡшы йәшәү шарттары булдырыу өсөн барлыҡҡа килгән ул ҡоролошто мин тулыһынса хупланым һәм үҙем дә шул маҡсатта фиҙакәрлек күрһәттем. Башҡаса йәшәй белмәнем. Илебеҙ халҡы был осорҙа үҙен совет халҡы тип танып, үҙҙәренең эшмәкәрлеген дә ошо йүнәлешкә ҡуйҙы. Оҙаҡ йылдар буйы был халыҡ капиталистик тормоштоң ҡамауында ҡалып, бирешмәй йәшәп килде. Тап шуның арҡаһында, халыҡтарҙың берҙәмлеге нигеҙендә совет халҡы Бөйөк Ватан һуғышында еңеүгә өлгәште. Барыһы менән бергә был Бөйөк Еңеү социализмдың да еңеүе ине.

Ары тайшанып, бире тайшанып йөрөй алмайым. Әле килеп кешеләрҙең яңыса ҡарашы, яңы формацияны барлыҡҡа килде, әммә ул минең ҡараштарыма, минең инаныуыма тура килмәй, сөнки ул айырым кешеләргә генә хәстәрләүгә ҡоролған. Совет власының емерелеүен мин оло илебеҙҙе юғалтыуға тиң һәләкәт тип баһалайым. Сөнки был илде тәҙөүҙә миллиондарса кешеләр үҙҙәренең ғүмерен бирҙе, яҡты киләсәк хаҡына ҡорбан булды.

➔ **80 йәшен тултырған ир-уҙаман, оло тәжрибә туплаған кеше булараҡ, хәҙерге тормош ысынбарлығын нисек баһалайһығыҙ?**

- Әлеге тормошто бер нисек тә хуплай алмайым. Мин бында мөһим бер нисә моментты билдәләп китер инем. Беренсенән, кешеләрҙең яҡшы тормош өсөн ойошҡан берҙәмлеге тарҡалды, тырыштырағайлыҡ китте. "Минең өйөм ауылдың ситендә" тигән принцип бар тулылығында үтәлә хәҙер.

Икенсенән, шәхес үҙе үк эстән тарҡалыу кисерә. Элек беҙ капиталистик дәүләттең йәшәү ҡануны тип белгән индивидуализм беҙгә лә үтеп инде.

Өсөнсөнән, халыҡтарҙы, шәхесте эстән тарҡатыуға иҡтисадыбыҙ үҙе үк булышлыҡ итә. Барыһы менән бергә намыҫлы хеҙмәт төшөнсәһе юҡҡа сыҡты. Урыҫ әкиәтендәгесә, "Суртан әмере буйынса..." тип мейес башында ятыусылар заманы килде. Һәр кем хәҙер иң тәүҙә үҙ кеҫәһен ҡарай, үҙ мәнфәғәтен ҡайғырта. Кеҫәһе таҡыр булыусыларҙы кеше итеп тә һанамайҙар.

Дүртенсенән, совет власы юҡҡа сыҡҡан ваҡытта бер кем дә уны һаҡлап урамға сыҡманы, үҙенең позицияһын еңел генә бирҙе - был феномен мине әле булһын оло аптырауға һала. Был - хилафлыҡ.

➔ **Әгәр ҙә һеҙгә тарихҡа ҡайтыу мөмкинлеге бирелһә, ҡайһы мәлгә ҡайтып, ниндәй тарихи ваҡиғаларҙа ҡатнашыр инегеҙ?**

- Әгәр ҙә миңә ундай мөмкинлек бирелһә, былдай мөмкинлектең башҡа кешеләргә лә тик бер тапҡыр ғына бирелеүен теләр инем. Сөнки мин, мәҫәлән, ике ҙур һуғышта ҡатнаша алмаҫ инем, беренсенән, мөғайын да, вафат булыр инем. Шул уҡ ваҡытта мин соҡорҙа ята торған кеше түгелмен, аяғыма баҫып, иң алдан йүгерә торған кешемен. Халҡым, илем, ерем, телем өсөн йәнен аямай көрәшә торған кешемен. Беренсенән, миңә Башҡорт автономияһы өсөн көрәшкән 1917 йылдар осоро ҡыҙыҡлы. Әхмәтзәки Вәлиди менән бергә булыр инем. Уның менән тарихи ваҡиғалар хаҡында фекер алышыу теләге әле лә йәшәй миндә. Әгәр ҙә инде башҡорт ихтилалдары осорона ҡайтыу мөмкинлеге бирелһә, ул ихтилалдарҙа ҡатнашҡан кеше мин булыр инем. "Тупраҡ алһаҡ, ҡалырбыҙ" тип яҙған Шәйехзада Бабич. Ер мәсьәләһе беҙҙең өсөн тарихта ла, хәҙер ҙә үтә мөһим. Шуға күрә ер мәсьәләләрен хәл итеүҙә лә мин актив ҡатнашыр инем. Шулай уҡ иҡтисад белгесе булараҡ, Рәсәй дәүләте эсендә иҡтисад мәсьәләләрен хәл итеүҙә лә үҙ өлөшөмдө индерергә теләр инем.

*Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.*

БАШҠОРТ ЮМОРЫ

# ЕҘНӘМ МӘҘӘКТӘРЕ

**Минең ғәйәт йомшаҡ күңелле бер еҙнәм бар. Уға ҡалһа, апайым - ифрат йор һүҙле, мәрәкәсел, шаян. Силәгенә күрә - ҡапҡасы, тиҙәр шундайыраҡ парҙар хаҡында. Икеһе лә һиҡһәндә ҡыуып барған был яҡындарым инде ярты быуаттан ашыу ҡулға-ҡул тотоношоп, татыу ғүмер итә. Балаларына, ейәнейәнсәрҙәренә шатланып, бәхетле ҡартлыҡ кисерә улар. Еҙнәм (башлыса уның хаҡында һүҙ барыр), нишләптер, әленән-әле мәҙәк хәлдәргә, ситуацияларға тарып ҡына тора. Апайыма ни, шул ғына кәрәк, гел генә уның ҡыҙыҡтарын һөйләп, беҙҙе көлдөрөп ала. Уның һөйләгәндәрен инде әллә нисә мәртәбә ишетһәк тә, беҙгә һәр саҡ - көлкө. Еҙнәм үҙе лә һис үпкәләмәй, киреһенсә, беҙҙең менән бергә көлә генә...**

## Еҙнәм - чемпион!

Апай менән йәшләй генә өйләнешеп, унан күп тә тормай, әрме хеҙмәтенә киткән ине еҙнәм. Танкист булып Грузияла хеҙмәт итте. Шул хеҙмәт дәүерендә уларҙың часында биш саҡрымға йүгереү буйынса һалдаттар араһында ярыш булған. Алыҫ араға йүгереү ярышын, ғәҙәттә, санитар автомобилендә фельдшер оҙатып йөрөй. "Старт"-тан башҡа һалдаттар менән бергә ҡуҙғалған еҙнәм (йыуаш булһа ла, хәйләкәр генә ул) әкренерәк барған әлеге машинаның артындағы таҡҡысына һағып киткән. Финишҡа етер алдынан ғына төшөп ҡалған да, ҡыуаҡ араһына боҫоп, үҙенең взвод һалдаттарын көтә башлаған. Һалдаттар барыһы ла хәле бөтөп, уның тапҡырына килеп етеү менән йәшеренеп ятҡан урынынан тора һалып, йән фарман финишҡа табан йүгергән еҙнәм һәм... дивизияла беренсе урынды алған! Эш уның менән генә бөтмәгән, чемпионлыҡ даны таралған был һалдатты "округной" ярышҡа тәғәйенләп тә ҡуйғандар! Әллә күпме хәйләләп, шул ярыштан саҡ ҡотолоп ҡалған еҙнәм...

## Еҙнәм - шпион?

СССР дәүерендә "Особый отдел" (КГБ) органдары бик шиксел булғанлығын барыбыҙ ҙа беләбеҙ. Ана шул осор минең иң өлкән ағайым (ул саҡта "секретный" тип һаналған) стратегик ракета частарының береһендә офицер булып хеҙмәт итте. Апайым менән еҙнәмде үҙе йәшәгән гарнизонға ҡунаҡҡа саҡырған. Ағайым көн дә иртән эшкә китә, ә ҡунаҡтар көн үткәрә алмай йонсой, күрәһең. Еҙнәм хәрби ҡаласыҡ урамына сығып, саф һауа һулап, офицерҙар клубы тирәһенә, хатта дивизия штабы янына ла яҡын барып урай икән. Әммә уны ниндәйҙер бер ҡатын һиҙҙермәй генә күҙәтеп йөрөгән дә, комендатураға хәбәр итә һалған. Хәрби ҡаласыҡтың матурлығы менән хозурланып йөрөгән еҙнәмдең артынан кинәт кенә патруль ҡыуып еткән. Беләгенә ҡыҙыл повязка таҡҡан офицер һәм ике һалдат был "подозрительный" кешене туҡтатып, документ һорап, бәйләнә башлаған. Паспорты ла кеҫәһендә булмағандыр, күрәһең, комендатураға алып та киткәндәр. "Мин фәлән офицерҙың бер туған һеңлекәшенең ире булам, уға ҡунаҡҡа килдем..." тип, өйҙән документтарын һоратып алып, ҡотолоп ҡалған еҙнәм. Апайымдың уға: "Һин үҙең, алан-йолан ҡаранып, былай ҙа ышпыйунға оҡшап тораһың бит..." - тип шаяртыуы беҙгә тағы мәҙәк булып тойола. Ә еҙнәмдең артынан күҙәтеп йөрөгән әлеге мәрйә бер "особистың" ҡатыны булып сыҡҡан. Уларҙың да ирҙәренә ярҙамлаша торған функциялары була икән...

## Әрмәнденән зыян күргән

Һис бер ваҡыт эшһеҙ тора алмай еҙнәм. Йорт-ҡурала мыштырҙап, ниҙер булһа ла эшләп йөрөргә тырыша. Бер мәл, яҙ көнө, ихатаһындағы картуф мөгәрәбен таҙартып йөрөй икән. Ҡыш буйы әлеге баҙ соҡорона әрмәнделәр тулып киткән булған. Шыҡкан картуф менән бергә ана шул баҡаларҙы ла тышҡа сығарып ташлап йөрөгән еҙнәм, нишләптер ҡыҙыҡһынып, бер әрмәнде яҡыныраҡтан күҙәтә башлаған. Шул саҡ әлеге баҡаның үҙһаҡлау рефлексы эшләп киткәнмелер, еҙнәмдең күҙенә туптура... зәһәр шыйыҡсаһын сапыртҡан! Асыттыуына сыҙай алмай, йүгереп өйгә инеп, битен йыуа башлаған еҙнәм. Шаян апайыма етә ҡалған, "күҙенә баҡа һейгән" хәләл ефетенең күҙен дә астырмай, бер талай мәрәкәләп йөрөнө. Баҡа тигәнең дә ҡайсаҡ хәүефле була икән, еҙнәмдең күҙе бер нисә көн ҡыҙарып, әрнеп йөрөгән...

## Кәзә майы

Еҙнәмдәрҙең ҙур мөгөҙлө бер дәү дебет кәзә тәкәһе бар ине. Мамыҡты күп бирә, әммә үҙе ифрат та һөҙгәк. Хатта йәшерәк һыйыр малын да һөҙөп ебәрә. Кеше-мешене лә тәкәгәләй. Апайым, аптырағас, еҙнәмә шул кәзәһен һуйырға ҡушҡан. Йомшаҡ күңелле еҙнәм, йәлләпмелер, һаман һуймай ҙа һуймай икән. Әлеге мөгөҙлө хайуан бер мәл хужабикәне лә һөҙөп алған, ахырыһы. Апайым, йәне көйөп, еҙнәмә: "Ошо кәзәңдең күтәнен ашатмаһаммы үҙеңә!.."- ти әйткән икән. Уның был һүҙҙәре еҙнәмдең бер ҡолағынан инеп, шунда уҡ икенсеһенән сығып та киткән... Алдына алғанын ҡуямы инде ҡатын-ҡыҙ, барыбер үҙенекен эшләткән: кәзә тәкәһен һуйғандар, суҡтеки. Эсәк-месәген эшкәртеп, тышта йөрөгән апайым еҙнәмә: "Ауыҙыңды ас, күҙеңде йом!" - ти икән. Тыңлаулы еҙнәм уны быны аңғармай, ауыҙын асып ҡына өлгөргән, шул арала алдан усына йомоп, әҙерләп торған әлеге тәкәнең тура эсәгенең бер киҫәк сеп-сей майын апайым еҙнәмә һоңондороп та ебәргән. Вәғәҙәһенә тоғро булған хәләл ефетенә, еҙнәм бахыр, әлбиттә, үпкәләп тә өлгөрмәгәндер...

## Памперс

Улдары өйләнгәс, иң тәүге ейәндәре тыуҙы. Ул саҡта "памперс", сникерс", "тампакс" тигән һымағыраҡ ят тауарҙарҙы телетапшырыуҙарҙа әле генә рекламалай башлаған осор. Олораҡтар әллә ни уларҙың тәғәйенләнешен аңлап та өлгөрмәгән ваҡыт булғандыр. Мин апаймдарҙа ҡунаҡта инем. Йәш килен, бала йоҡлаған арала, өй мөйөшөндә генә ултырып алып, марля, сепрәк-сапраҡ киҫкеләп, сабыйына ниҙер яһау менән мәшғүл. Тик торорға яратмаған әлеге еҙнәм, ҡулын артҡа ҡаушырып, иҙән буйлап унда-бында йөрөй. Һүҙ юҡта һүҙ булһын, тиепмелер, килененә: "Тампакс әҙерләп ултыраһыңмы, килен?"- тип һорап ҡуйҙы. Баштараҡ уны-быны аңғармайыраҡ ултырған килен кинәт кенә көлөп ебәрҙе: "Памперс ул, ҡайным, памперс..." Еҙнәм үҙе лә аптырап, һөйләнә-һөйләнә, икенсе бүлмәгә сығып китте: "Әй, нимә тип аталғанын кем белһен уларҙың, памперсмы, тампаксмы, сникерсмы..."

*Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.*

ИНТЕРНЕТТАН



# КЕМ БӘХЕТЛЕ?

■ Америка тикшеренеүселәре асыҡлауынса, эштәге уңыштар бәхетле тормоштоң нигеҙе булып тора алмай. Нотр-Дам университеты эргәһендәге Мендоза бизнес мәктәбе ғалимдары 70 йыл дауамында 717 һәләтле кешенең тормошон күҙәткән һәм уларҙы 5 төп өлкә: эш, ғаилә тормошо, ял, сәләмәтлек һәм "тормош килтергән шатлыҡ" буйынса ҡәнәғәтлек кимәлен тикшергән. Амбициялар кимәле уларҙан һорау алыуҙар ярҙамында асыҡланған. Университеттың профессоры Тимоти Джадж әйтеүенсә, амбициялы кешеләр матди планда уңышлыраҡ булған, әммә быға ҡарамайынса, улар үҙҙәрен "ялҡауҙар"ға ҡарағанда саҡ ҡына бәхетле тойған һәм уларҙың ғүмер оҙайлығы башҡаларҙыҡынан айырылмаған. Ә бына амбициялы булып та карьераһы килеп сыҡмағандар үҙҙәрен бөтөнләй бәхетле иҫәпләмәгән.

■ Аҙнаһына бер генә ус еләк-емеш ашау Паркинсон ауырыуынан һаҡлай ала, ти Гарвард һәм Көнсығыш Англия университеттары эксперттары. Ғалимдар 20 йыл дауамында 130 мең кешене тикшергән, ошо ваҡыт эсендә уларҙың 800-өндә Паркинсон билдәләре күҙәтелгән. Белгестәр уларҙың туҡланыу рационы һәм сирҙәре араһында бәйләнеш тапҡан һәм ауырыуҙар исемлегендә флавоноидтарға бай еләк-емеште аҙ ҡулланыуын асыҡлаған. Был матдәләргә бай аҙыҡты күп ҡулланыусылар Паркинсон сире менән 40 процентҡа һирәгерәк ауырыған. Аҙнаһына бер ус еләк ашау ҙа ҡартая барыусыларҙың баш мейеһе зарарланыу ҡурҡынысын 25 процентҡа түбәнәйтә. Бынан тыш, рационға еләк-емеш индереү ҡан баҫымын нормаға килтерергә, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртырға, яман шеш булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Британияның спорт журналы хәбәр итеүенсә, ултырып эшләү гипертонияға һәм диабетҡа килтереүе ихтимал. Бөгөн күп кешеләр 9-ар сәғәт буйына офиста ултыра, машинала йөрөй, һөҙөмтәлә, калориялар кәрәгенсә ҡулланылмай, аяҡ һәм арҡа мускулдары хәрәкәтләнмәй, метаболизм яйлана, умыртҡа бағанаһы һығылмалығын юғалта. Былар барыһы ла арҡа ауыртыуына, ҡан әйләнешенең насарайыуына килтерә, үпкәләр тулы ҡеүәтендә эшләмәү сәбәпле, организмға кислород етмәй башлай. Әгәр ҙә эштә көнө буйы ултырырға тура килһә, эшкә йәйәү йөрөргә, спортзалда шөғөлләнергә кәңәш итә табиптар.

■ Клиник тәжрибә күрһәтеүенсә, көлөү кешенең ғүмерен оҙайта. Позитив кешеләр эштә лә, эргәһендәге кешеләр менән аралашыуҙа ла күберәк уңышҡа өлгәшә. Көлөү - иммун системаһын көйләй, адреналин һәм допамин бүленеп сығыуға булышлыҡ итә. "Ул шулай уҡ эндорфин һәм энкефалин бүленеү механизмын әүҙемләштерә, - тип билдәләй Milandағы Fatebenefratelli психология фәндәре департаменты Клаудио Менкаччи. Шул уҡ ваҡытта статистика күрһәтеүенсә, хәҙерге заман кешеһе ата-бабаларына ҡарағанда һирәгерәк көлә. Corriere della Sera гәзите үткәргән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, 50 йыл элек кеше көнөнә уртаса 15 минут көлһә, бөгөн быға 5 минут ваҡытын бүлә.

■ Етен орлоғо кеше, бигерәк тә ирҙәр организмы өсөн файҙалы. Айова дәүләт университеты эргәһендәге Тикшеренеү үҙәге ғалимдары әйтеүенсә, етен орлоғо ҡандағы холестерин кимәлен түбәнәйтә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, етен орлоғонда булған химик матдә - лигнин ҡатын-ҡыҙҙар ҡаны торошон бер нисек тә үҙгәртә алмай икән. Ғалимдар быны лигнин тәьҫиренә тестостерондың йоғонтоһо менән аңлата. Ирҙәрҙә көнөнә 3 ҡалаҡ етен орлоғо ҡабул итеү холестерин тупланыуын 10 процентҡа кәметергә мөмкинлек бирә.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

**Мосолман донъяһында изге нәмәләр һәм төшөнсәләр күп түгел. Аллаһы Тәғәләнән һуң беҙ изге тип Ҡәғбә ташын, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе, Ҡөрьән китабын һәм уларға бәйле ҡайһы бер нәмәләрҙе һанайбыҙ. Изге - тимәк, "йөрәк түрендә һаҡлана торған, иң ҡәҙерле, бөйөк, мөҡәддәс; дингә бөтә күңеле менән бирелеп хеҙмәт иткән, дин рухы менән йәшәгән, гонаһһыҙ, саф..."("Башҡорт теле һүҙлеге", Мәскәү, "Русский язык", 1993). Изге төшөнсәһенең һүҙлектә күрһәтелмәгән тағы бер яғы: уға бер кеше, бер йән эйәһенең дә ҡул менән дә, һүҙ менән дә тейергә ярамағанлығы. Ул нисек бар, шул көйөнә йөҙәр, меңәр йыл буйына үҙгәрешһеҙ ҡалырға тейеш. Был бигерәк тә Аллаһы Тәғәлә Ергә төшөргән китап - Ҡөрьән Кәримгә ҡарата әйтелә. Шуға ла изге Ҡөрьән бына инде мең ярым йылға яҡын дәүер элек боронғо ғәрәп телендә нисек яҙылған булһа, шул көйө һаҡлана килә. Ә бүтән телдәргә уны тәржемә итеү - уны үҙгәртеү, йә боҙоу һаналмай. Тәржемә - Ҡөрьәнде башҡа телдә аңлатыу, тәфсирләү генә. Транскрипциялау, йәғни Ҡөрьәндең боронғо ғәрәп телендәге яңғырашын хәҙерге ниндәйҙер тел нигеҙендәге өндәр әйтелешендә ҡабатлап биреү - шулай уҡ тәфсир.**

# ИЗГЕ КИТАПҠА...

## изге күңел менән тотонайыҡ!



Изге Ҡөрьәнде башҡорт телендә тәфсирләп аңлатырға ынтылыу XX быуат башынан алып яһала. Әммә уға 1993 йылда ғына өлгәшелде. Ошо йылда Башҡортостан "Китап" нәшриәте Ҡөрьәнде боронғо ғәрәп телендә, башҡортса транскрипцияла һәм башҡортсаға тәржемәлә баҫып сығарҙы. Шулай итеп Ер йөҙөндәге Ҡөрьән тәфсирҙәре тағы ла икегә артты. Әммә был һуңғыһы түгел ине. Китапты уҡыусылар башҡортсаға тәржемәлә күп етешһеҙлек тапты һәм тәржемәне филология фәндәре кандидаты, башҡорт һәм ғәрәп телдәрен яҡшы белгән Әкрәм Бейеш өр-яңынан башҡарҙы. Транскрипцияны Нурмөхәммәт Сөйәрғолов та ҡабат эшләне һәм ике тәфсир ҙә фән юғарылығы дәрәжәһенә күтәрелде. Н. Сөйәрғоловтың тәфсирен күп телселәр (ғәрәп, ҡаҙаҡ, үзбәк, тыва, татар тел белгестәре) хәҙерге замандың иң яҡшы транскрипцияһы тип атаны. Нурмөхәммәт Сөйәрғолов әлеге транскрипция менән тәржемә тәфсирҙәрен ентекләп аңлатты һәм уларҙың башҡорт тел ғилемендә быға саҡлы булмаған ҡанундар барлыҡҡа килтереүен раҫланы. Ошо рәүешле әлеге ике хеҙмәт фән өлгөһө тип танылды, ә уны күрһәткән ғалим филология фәндәре кандидаты дәрәжәһен алды. Рәсәйҙә эшләгән 66 фән докторы, Сөйәрғоловтың асыштары бик юғары баһаға лайыҡ, тине. Башҡортостандағы юғары комиссия транскрипция менән беренсе тәржемәне Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ тип тапты.

Ҡөрьән-Кәрим боронғо ғәрәп телендә, башҡортса транскрипцияла, башҡортсаға тәржемәлә 2009, 2012, 2014 йылдарҙа йәнә донъя күрҙе һәм бик тиҙ арала башҡортса уҡыған мосолмандар араһында таралып бөттө. Шуны күргән "Китап" нәшриәтенең етәкселәре уны ҡабатлап баҫырға ҡарар итте һәм ул 2018 йылда тағы донъя күрҙе.

Күренеүенсә, барыһы ла яҡшы. Әммә нәшер итеүселәрҙән ҡайһы бер кешеләр изге Ҡөрьәндең бөйөклөгө менән ҡуша тыйыуы ла бар икәнен әллә белмәгән, әллә инде уға тейергә ярамағанлығы тураһындағы дин ҡанунын һәм Рәсәй Федерацияһының авторлыҡ закондарын һанға һуҡмаһаң да була, тип уйланы инде. Йыйынтыҡта тупаҫ хаталарға юл ҡуйылған булып сыҡты. Китапта "Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим (Мәрхәмәтле һәм шәфҡәтле Алланың исеме менән)" һүҙбәйләнеше 228 тапҡыр ҡабатлана. Транскрипцияның авторы уны әле алдағы һөйләмдә нисек бирелгән - шулай яҙған. Ә 2018 йылда сығарылған китапта иһә "Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим" тип алынған. Һуңғы һүҙбәйләнеш ғәрәпсә лә, башҡортса ла мәғәнәһеҙ өндәр теҙмәһе. Быныһын нәшриәттең ниндәйҙер "аҡыллы башы" уйлап сығарған һәм 228 тапҡыр хата яһаған, өҫтәүенә, был транскрипцияның авторы Нурмөхәммәт Сөйәрғолов исеменән башҡарыла. Ә Сөйәрғолов был хаҡта белмәй ҙә ҡала.

Төҙөлөшө яғынан 2018 йылда сығарылған Ҡөрьән-Кәрим 2009, 2012, 2014 йылғы китаптарҙы ҡабатлай. 2018 йылғыһында ҡайһы бер биттәр урынынан шылған һәм ғәрәпсә яҙма эрерәк хәрефтәр менән бирелгән, ҡалғандары - элеккене ҡабатлау. Быуат башындағы китаптарҙы төҙөүсенең исеме китаптарҙа күрһәтелгән һәм был турала уларҙа һылтанма бар. Ә 2018 йылдағыһында төҙөүсеһе күрһәтелмәгән, йәғни китап, йәнәһе, үҙенән-үҙе төҙөлгән.

Ошо рәүешле Ҡөрьән-Кәримдең тәфсирҙәрен башҡортса сығарыуға бик күп көс һалған кешеләр ғәйепһеҙҙән ғәйепле булып ҡалды. Улар үҙҙәренең исемдәрен аҡлар һәм юҡтан тағылған ғәйептән ҡотолор өсөн "Китап" нәшриәтен судҡа бирҙе. Уларҙың ғаризаһын тәүҙә Өфөнөң Совет район суды, шунан республиканың Юғары суды ҡараны. Ике кимәлдәге суд та дәғүәселәрҙең ғаризаһын урынһыҙ тип тапты.

Тағы бер суд тикшереүе булды. Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры Ю.Псәнчин "Китап" нәшриәте директорына: 2009, 2012, 2014 йылдарҙағы Ҡөрьәндең транскрипцияларында бик күп хата яһалған, баяғы "Бисмилләәһи-ррахмәәни-ррахиим" һүҙбәйләнеше лә дөрөҫ түгел, ә 2018 йылғы баҫма - дөрөҫ, тип хат яҙған. Етмәһә, Сөйәрғолов "тупаҫ хата" яһай, тип тә раҫлаған. Институт директоры менән ризалашмайынса, Сөйәрғолов уны судҡа бирҙе, үҙенең ғәйебен таныуҙы үтенде. Өфөнөң Октябрь район суды Сөйәрғолов менән килешмәне, Башҡортостандың Юғары суды траскрипция авторын хаҡлы тип ҡарар сығарҙы һәм уның хоҡуғын боҙған өсөн аҡса түләргә ҡушты.

Ҡөрьән айҡанлы ыҙғыштар ошо рәүешле бара. Ошоноң менән уларға нөктә ҡуйылдымы, юҡмы - билдәһеҙ. 2021 йылдың һуңында Сөйәрғоловҡа "Китап" нәшриәте яңы тәҡдим яһаған: 2018 йылғы баҫмалағы бөтөн хаталарҙы ла төҙәтәбеҙ һәм 2022 йылда Ҡөрьәндең яңы баҫмаһын эшләйек. Был Сөйәрғоловтың һәр яҡтан да хаҡлы икәнен тулыһынса таныу булды.

Әлеге тарихты һөйләп, ҡәҙерле гәзит уҡыусылар, бер мөһим һығымта яһарға кәрәктер: Ҡөрьән Кәрим мосолман өсөн иң изге китап, уны үҙгәртергә, яңы тәфсирҙәр яҙырға тотонор алдынан мең ҡабат уйларға, шунан ғына ниндәйҙер ғәмәл башҡарырға кәрәк. Быға саҡлы яһалған тәфсирҙәрҙе эшләүселәр бик ныҡ әҙерлекле, бик күпте күргән, бик күп утты, һыуҙы кискән кешеләр бит. Изге китап менән эшләп, үҙҙәренең күңелдәрен дә сафландырған улар. Саф күңелгә саф ҡул менән йоғонайыҡ. Беҙҙең атай-бабайҙарыбыҙ тап шулай эшләгән бит - изгелеккә изгелек менән яуап биргән һәм беҙгә лә шуны васыят иткән. Әгәр тәфсирҙәрҙең ниməһелер оҡшамай икән, әйтегеҙ уларҙы яһаусыларҙың үҙҙәренә. Моғайын, һеҙҙе аңларҙар, эшләгәндәрен яҡшыртырға тырышырҙар, хаталары булһа, төҙәтерҙәр. Изге Ҡөрьәнгә изге күңел менән тотонайыҡ.

**Ғәлим ХИСАМОВ.**

✓ *Йышыраҡ булһын ине ошондай бәйгеләр, тыуған ерен һаҡлап яу сапҡан, сит ерҙәрҙә походтарҙа ал бирмәгән яугир ирҙәрҙең рухын иҫкә төшөрөп торһон ине. Әрүахтарға аяттар уҡып, доға ҡылыуға бәрәбәр бит бындай йыйындар!*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МӨҒЖИЗӘГӘ ТИҢДЕР БЫЛ БАЙРАМ

**Сибай ҡалаһынан йыраҡ түгел Алтын ҡасабаһы менән Иҫке Сибай ауылы араһындағы Сәпәй һаҙы яланында ҙур мөғжизә булды. Эйе, мөғжизә! Эх, бөгөнгө ығы-зығылы, ашыҡ-бошоҡ заманда, ултырып уйланырлыҡ ваҡыт тапмаған мәлдә мөғжизәгә тиң ваҡиғалар иғтибар үҙәгенән ситтә ҡала шул, арбанан аңғармаҫтан төшөп ҡалған кәрәкле әйбер кеүек, юҡҡа сыға. Юҡтың эҙе юҡ, ти халҡыбыҙ. Эйе, эҙһеҙ ҡалыу, мәңгелек арауығында сүпкә әйләнеү ҡурҡыныс. Ә бына боронғонан ҡалған йолаларҙың эҙе бар, эҙе булғанға ла тере улар һәм мәңгелеккә дәғүә итә алалар.**



Ситкә киттем, һүҙем күҙгә күренмәгән, күңел менән генә тойоп була торған сәйер мәл тураһында ине. Рухиәттең сағылышы, үткән менән бөгөнгөнөң киҫешкән урынында барлыҡҡа килгән ауаз, тиер инем был күренеште. Уның Иҫке Сибай ауылы эргәһендә булыуы үҙе үк сәйерлеккә ишара. Беҙ бит ниңәлер "иҫке" һүҙенә насар мәғәнә һалып өйрәнгәнбеҙ: иҫке-моҫҡо, тип тә ебәрәбеҙ, тимәк, алама, насар. Иҫке бит - ул боронғо! Ҡасандыр Иҫкеһенән (боронғоһонан) Яңы Сибай айырылып сыҡҡан да аҙаҡ ҡалаға әйләнгән, яңыса тормош барлыҡҡа килгән. Иҫке Сибай ҙа, әлбиттә, бөгөн боронғоса йәшәмәй, әммә, иманым камил, был тамаша боронғолоҡтоң эҙҙәре һаҡлаған урында булды. Сәйерлеге лә бик ябай уның - бер көнгә булһа ла ата-бабаларыбыҙҙың рухы бөгөнгөгә әйләнеп ҡайтҡандай тойолдо. Тойолдо ғына түгел, күңел күҙе күргәндәрҙең эргәһендә булды рухиәттең сағылышы.

Күҙ алдына килтерегеҙ: һалҡынса салт аяҙ көн, йөк машинаһы бортына ҡулайлаштырып эшләнгән заманса сәхнә, тирмәләр һәм бихисап еңел машиналар. Машиналарҙың да ниндәйе: береһенән-береһе ҡиммәтерәк иномаркалар - насар йәшәмәйбеҙ, тимәк! Һәм... ошо күҙ өйрәнгән ғәҙәти күренешкә тәрән мәғәнә өҫтәп, уҡ-һаҙаҡлы егеттәр-ҡыҙҙар, бик күп һыбайлылар, үткәндәрҙең тере шаһиттары кеүек, бер ни булмағандай, әлеге машиналар араһында йөрөп ята. Тағы нимә иғтибарҙы йәлеп итә: ир-егеттәрҙең күбеһе үҙҙәренә килешеп торған һаҡал ебәргән, эргәләрендә оҙон итәкле һомғол ҡыҙҙар! Сәхнәгә ҡаршы бер яҡ ситтәрәк күптән түгел генә боронғоға тартымыраҡ эшләнгән кәртә эсендә арҡаһы эйәр күрмәгән ике тиҫтәләп тайтулаҡ бикле тора. Егеттәрҙең аҫылдары тиҙҙән уларҙы меңгегә өйрәтергә тейеш. Нисекме? Нисек тип ни, ҡороҡ ташлап, йүгәнләп-ауыҙлыҡлап, эйәр ҙә һалып тормай һыбай йөрөп күрһәтергә тейештәр. Ҡасандыр, бик борон, булғандыр бындай йола. Булғандыр ҙа онотолғандыр - арбанан төшөп ҡалғандыр. Бөгөн ана шул йола яңынан тергеҙеләсәк, бәйге рәүешендә ирмен тигән ирҙәрҙең йөрәктәрен елкендереп, яңынан заманса тыуасаҡ. Америка ковбойҙарына ғына өйрәтелмәгән ат өҫтөндә йөрөргә тимәгән! Кемдән кәм беҙҙең башҡорт егеттәре! Ҡар өҫтөндә, һыуыҡта, бейәләйһеҙ ҡул өшөп барғанда ҡороҡ ташлап ҡараһындар маҡтансыҡ американдар, шәп булғас.

Тамашасыларҙың күпселеге кәртә тирәләй өйөлгән ҡар өҫтөндә яңы уйын төрөнөң башланыуын түҙемһеҙлек менән көтә. Уттарын ялпылдатып, эргәгә генә тиҙ ярҙам машинаһы килеп туҡтауы йөрәктәргә шом өҫтәй. Ниһайәт, уйын башлана, кәртәгә йәрәбә буйынса беренсе өс ир инә. Әбйәлилдәр! Ни булыр? Һыр бирмәҫме ир-егеттәр, оятҡа ҡалмаҫтармы, яҡташтарының ышанысын аҡлармы? Ят тауышҡа - судьяның һыҙғырғысы сыйылдауға тайҙар тетрәнеп ҡуя. Был ярыш башланыуға ишара булды. Егеттәрҙең өлкәнерәге, күрәһең, оҫтарағы, тәжрибәлерәге халыҡ геүләүенән ярһыған тайҙар араһына инеп, ҡороҡ ташланы. Һуйылға беркетелгән оҙон арҡандың элмәге өйөрҙәге ҡола тайҙың муйынына һығыла. Күҙ асып йомғансы ирҙәрҙең икенсеһе аттың муйынына йәбешә һала. Командалағы йәш егет тиҙ генә ярһыған тайҙың башына йүгән кейҙереп, ауыҙлыҡлап, тыпырсынған толпарҙың һыртына менеп тә ултыра. Күҙ менән ҡаш араһы - кәртәне аша һикереп сығырҙай хәлгә еткән тай, ауыҙлыҡтың көсөн тойоп, кәртә эсе буйлап саба башлай. Һыбайлыһын алып һелкер ине лә, уныһы, йәтсә һымаҡ, ат өҫтөндә бик оҫта йөрөй.

Судьяның һыҙғырғысы тағы тауыш бирә. Тимәк, ярыш өсөн тәғәйен ваҡыт үтте. Егеттәр өлгөрҙөләр. Өлгөрөү генә түгел, ваҡытынан алда йылҡы малын меңгегә өйрәтеп тә ҡуйҙылар. Һыбайлы аттан төшмәйенсә генә йүгәнде һыпырып, ярһып сапҡан аттан һикереп төшөп ҡалды. Халыҡ еңел һулап, гөр килеп ҡул саба башланы. Беренсе команда уйын шартын теүәл үтәне, ҡалғандарҙың хәленән килерме? Йәрәбә сираты буйынса артабан майҙанға сыҡҡан командалар бөтәһе лә әлегә ят күренгән ярышҡа әҙер булып сыҡты. Ғорурланырға була егеттәр менән! Ғорурланыу ғына түгел, һоҡланырға кәрәк шундай ауан ирҙәр барлығына.

Ике һыбайлының бербереһен ат өҫтөнән ауҙарыш ярышы ла бик көсөргәнешле булды. Бәйге батырҙарына ҡарап, һай, үҙебеҙҙең егеттәр, тип, күңел күтәрелеп китә, бөгөнгө хәүефле ваҡыт онотола, яҡты киләсәккә өмөт уяна. Йышыраҡ булһын ине ошондай бәйгеләр, тыуған ерен һаҡлап яу сапҡан, сит ерҙәрҙә походтарҙа ал бирмәгән яугир ирҙәрҙең рухын иҫкә төшөрөп торһон ине. Әрүахтарға аяттар уҡып, доға ҡылыуға бәрәбәр бит бындай йыйындар! Мәргән уҡсыларҙың ярышы ғына үҙе ни тора, бигерәк тә уларҙың атта сабып барған килеш уҡ сойорғотоуҙары тәндәрҙе семерләтеп ебәрә. Ҡыҫҡаһы, сараны ойоштороусылар байрам матур үтһен өсөн бик күп көс түккән. Рәхмәт уларға, күпме сауап алғандарын беләме икән улар! Бер рәхмәт мең бәләнән ҡотҡара, тип, бушҡа әйтелмәгән бит!

Тағы бер күренеш сәйер тойолдо: ваҡыты-ваҡыты менән сәхнәләге тауыш көсәйткес аша, "Ялан кухняһына ашарға барығыҙ, ашау бушлай", тигән иғлан әйтелә. Буштың атаһы үлгән заманда бушлай ашатһындар әле! Бөгөнгө ҡолаҡ өсөн үтә лә ят бындай тәҡдим. Әйтәм бит, мөғжизәгә тартым булды был мәжлес: иҫке менән яңы осрашты ла, нур бөркөлдө - рухиәт нуры! Ашһыу тигәндән, ирҙәргә бар донъяһын онотоп бәйге ойоштороу өсөн көслө тыл кәрәк. Ә уны кемдәр ойоштора? Әлбиттә, ҡатын-ҡыҙҙар! Был осраҡта, Иҫке Сибай ауылының "Ағинәйҙәр ҡоро" ағзалары. Улар менән һөйләшкәндә быға тағы бер тапҡыр ышандым: майҙанда - бәйге, тирмәлә - икенсе тормош. Тыштағы байрам матур булһын өсөн ҡатындарҙың күҙгә күренмәгән ваҡ мәшәҡәттәре лә матур булырға тейеш. Ирҙәр мускулдары менән уйнар ҙа бөтөр, быға менән донъя тамамланмай ҙа баһа - тормоштоң башҡа мең ваҡ мәшәҡәттәрен ҡатын-ҡыҙҙар үҙ иңенә һалып, ары һөйрәр. Дан йырлайыҡ, ирҙәр, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға! Тормошобоҙҙоң тылы ныҡлы булһын өсөн беҙ уларға бурыслы. Ирҙәрҙең ҡатын-ҡыҙҙарға мөнәсәбәте дөрөҫ булғанда ғына тормош дауам итә.

Сәпәй һаҙы халыҡ таралғас та меңәрләгән кешенең эҙен һаҡлар. Эҙе булған, эҙ ҡалдыра алған халыҡ һөйөүгә лайыҡ, мәңгелек халыҡ!

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Стресс депрессияға этәргәндә нимә эшләргә?

Депрессия - стресс эҙемтәләренең береһе. Ул үлем теләгенә тиң. Депрессия торошонда йәшәүгә ихтыяр бөтә, кеше тиҙ ҡартая башлай. Яҡындарығыҙ ниндәй хәлдә икәнегеҙҙе аңлар, әммә уларға был турала үҙегеҙ ҙә әйтегеҙ, быны йәшерергә ярамай. Сөнки бында һүҙ тормошоғоҙҙоң яҡшымы, насармы икәнлеге тураһында түгел, һеҙ, ғөмүмән, йәшәйәсәкһегеҙме - шул хаҡта бара. Ғаилә ағзалары һеҙҙе табипҡа күренергә өгөтләй башлар - был насар тәҡдим түгел.

Оҙайлы ваҡыт көсөргәнештән арыныу менән шөғөлләнгәндән һуң, һеҙгә был бүлектә яҙылған башҡа ысулдарға ла мөрәжәғәт итергә тура килер. Бәлки, был бик ғәҙәти күренер, әммә шаҡ ҡатырлыҡ һөҙөмтә алырһығыҙ: томанды яҡтылыҡ ярҙамында таратығыҙ. Бына быны эшләүҙең бер нисә ысулы: аҡ һауыт һәм йоҡа фарфор файҙаланығыҙ; көндөҙ ҙә, төнөн дә аҡ һәм сағыу кейем кейегеҙ; бүлмәгеҙҙә көн яҡтылығы күберәк булһын өсөн ҡорғандарҙы һәм жалюзиҙарҙы асып ҡуйығыҙ; кисен күберәк ут яҡтыртығыҙ; күҙҙәрегеҙгә зыян итмәһә, ҡояштан һаҡлаусы күҙлек киймәгеҙ.

Мин һеҙгә мөмкин булған тиклем ыңғай фекер йөрөтөргә ҡушмайым - был үтәп булмаҫтай кәңәш. Депрессия ваҡытында ыңғай фекерләп булмай. Әммә мейе компьютерығыҙҙы ыңғай йүнәлешкә программалаштырып була. Быға көсөргәнештән арыныу һәм ыңғайға көйләнеү ярҙамында өлгәшергә мөмкин. Үҙегеҙ көсөргәнештән арынған ваҡытта дуҫтарығыҙҙың йәки туғандарығыҙҙың берәйһенең кәрәкле инструкцияны ҡысҡырып уҡыуын һорағыҙ. Түбәндәге аффирмацияларҙың береһен генә һайлағыҙ, әммә уны һеҙгә бер нисә тапҡыр уҡыһындар. Түбәндәгенән башлағыҙ. Уҡығандарын эстән генә үҙегеҙ ҙә ҡабатлағыҙ.

"Мин күңел төшөнкөлөгөнә бирелдем. Мин ҡабат ергә ышанысды баҫырға теләйем. Күҙҙәремде асҡанда барлыҡ ауыр уйҙарым таралып, күңелһеҙлек мине ташлап китер. Күҙҙәремде асыуға мине урап алған ҡараңғылыҡ таралыр һәм тормошом яҡтыраҡ булыр. Күҙҙәр асыла. Мин уянам һәм яҡты донъяға инәм".

Быны көнөнә бер нисә тапҡыр бер нисә көн ҡабатлағыҙ. Һуңынан икенсе көйләүгә күсегеҙ:

"Мин тынысыраҡ, көслөрәк, үҙ-үҙемә ышанысдыраҡ була барам. Көн һайын мин бөтә мөнәсәбәттәрҙә лә тормошҡа ғашиҡ оптимист һәм энтузиаст була барам. Мин үҙем менән көндән-көн яҡшыраҡ идара итәм, бәхетлерәк һәм ышанысдыраҡ була барам".

Быны ла көнөнә бер нисә тапҡыр бер нисә көн дауамында ҡабатлағыҙ. Һуңынан, күҙҙәрегеҙ асыҡ килеш, өсөнсө көйләүҙе тыңлағыҙ һәм үҙегеҙҙе нисек тойоуығыҙҙы баһалағыҙ. Әгәр әҙер икәнлегегеҙҙе тойһағыҙ, күнекмәләр циклын һуңғы аффирмация менән тамамлағыҙ. Уны көн дауамында бер нисә тапҡыр тыңлағыҙ:

"Мин - ижади шәхес. Мин идеялар бирәм. Мин проблемаларҙы хәл итәм. Юғары аң миңә яуаптар һәм хәл итеү юлдарын әйтеп, ярҙам итә. Быға отчет бирәмме, юҡмы, әммә мин алға барам. Минең киләсәккә пландарым бик ҙур".

Ҡотлайым, һеҙ рухҡа эйә булдығыҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



### 28 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Зацепка". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Линия света". [12+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**14.45 Специальный репортаж. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Т/с "Улыбка пересмешника". [12+]**
**17.30, 20.45 История одного села. [12+]**
**17.45 Ради добра. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00, 4.30 Күстәнәс. [12+]**
**23.30, 5.00 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Взятки гладки". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Прекрасная возлюбленная". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

### 1 МАРТА ВТОРНИК
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Зацепка". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Линия света". [12+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Улыбка пересмешника". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Хазина". [0+]**
**15.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.30, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Дорога к храму". [0+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 "Образцовая башкирская семья". Церемония награждения победителей Открытого республиканского конкурса. [12+]**
**22.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Позвоните Мышкину". [6+]**
**2.45 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**
**4.30 "Алтын тирмә". [0+]**
**5.15 История одного села. [12+]**

### 2 МАРТА СРЕДА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Зацепка". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Линия света". [12+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Кумысный путь. [12+]**
**11.30 "Елкән". [6+]**
**12.00, 13.30, 16.30, 22.00 Тамыр. 30 лет заряжаем сердца.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Сибирь" (Новосибирск). 1/4 финала коференции "Восток". 1 матч.**
**23.00 "Байыҡ" представляет... [12+]**
**0.00 Х/ф "Отдать концы". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Тамарис". [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 3 МАРТА ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Зацепка". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Линия света". [12+]
23.35 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.20 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.00 Т/с "Семейный детектив". [16+]
4.50 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Улыбка пересмешника". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Теге өсәү! [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Песни композитора, заслуженного деятеля искусств РФ и БАССР Салавата Низаметдинова. [12+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45, 5.15 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "Кромовъ". [16+]**
**3.15 Спектакль "Оставайтесь солнцем". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 4 МАРТА ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Зацепка". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Линия света". [12+]
23.35 Х/ф "Любовь с риском для жизни". [12+]
3.15 Х/ф "Соседи по разводу". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Вместе с наукой". [12+]**
**10.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 "Тамға". Финал II Международного конкурса мастеров башкирского национального костюма. [12+]**
**17.30, 23.00, 5.45 Автограф. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Сибирь" (Новосибирск). 1/4 финала коференции "Восток". 2 матч.**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00 Х/ф "Каникулы президента". [16+]**
**2.15 "Спектакль "Асылъяр". [12+]**
**4.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**4.45 Әлләсе... [12+]**
**5.30 История одного села. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 5 МАРТА СУББОТА
### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
8.00, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
12.35 "Доктор Мясников". [12+]
13.40 Х/ф "Ни к селу, ни к городу". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.20 Т/с "Линия света". [12+]
23.35 Х/ф "Лёд-2". [6+]
2.05 Х/ф "Секта". [16+]
5.23 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 Д/ф "Назар Наджми. Сотканный из пламени и чувств". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "КультУра". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Волшебные мелодии курая". IV открытый конкурс самодеятельных кураистов в г.Туймазы. [12+]**
**18.15 Полезные новости. [12+]**
**19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Образцовая башкирская семья. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры". [12+]**
**0.00, 4.00 Х/ф "Медвежья шкура". [16+]**
**2.15 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!". [12+]**
**5.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 6 МАРТА ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1

5.25, 3.15 Х/ф "Алла в поисках Аллы". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 "Аншлаг и Компания". [16+]
13.30 Х/ф "Ни к селу, ни к городу-2". [12+]
17.30 "Танцы со Звёздами". Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Другой берег". [16+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Д/ф "Возвращение". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Ҡош юлы. Балалар". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.00 Территория женского счастья.**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.20 Хоккей. "Сибирь" (Новосибирск) - "Салават Юлаев" (Уфа). 1/4 финала коференции "Восток". 3 матч.**
**17.45 "Дорога к храму". [0+]**
**18.15 Полезные новости. [12+]**
**18.30 VI Открытый городской конкурс кураистов им. А. Искужина. [12+]**
**19.15 Песни композитора Ильшата Яхина. [12+]**
**20.00 Образцовая башкирская семья. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 3.00 Х/ф "Миллион в брачной корзине". [12+]**
**1.00 Спектакль "Женская сюита". [12+]**
**4.45 Историческая среда. [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**4-5 март Премьера! "Әсмә"** (Р. Фәхретдин, Ш. Шәкүрова инсц.), драма. 12+
**6 март "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 18.00 112+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**4 март Премьера! "Мөхәббәт тураһында легенда"** (Н. Хикмәт), мәңгелек тарих. 16+
**5 март Премьера! "Мөхәббәт тураһында легенда"** (Н. Хикмәт), мәңгелек тарих. 18.00 16+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**28 февраль "С теми, кто рядом"**, Л. Фоменко концерты (флейта). 6+
**1 март "Шаңdau"** концерт. 6+
**2 март** Өфө органына 35 йыл, **В. Мортазин** концерты. 6+
**5 март "Музыку слушем вместе. Сказки органного зала"**, 3 йәшкә тиклемге балалар өсөн концерт. 11.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**3 март "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия. 16+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**3 март "Король оперетты"** И. Кальманға арналған кисә. 12+
**4 март Премьера! "Тормош - ҡуласа"** (Т. Миңнуллин), драма. 12+
**5 март "Эх, күгәрсенкәйҙәрем..."** (Ф. Бүләков), комедия. 18.00 12+
**6 март "Пусть всегда будет мама!".** 12.00 0+
**"В поисках утраченного волшебства"** (М. Хейфец), әкиәт. 12.00 0+
**"Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 18.00 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**1 март "Ҡар аҫтында ҡайнар шишмә"** (А. Гиләжиев), мелодрама. 12+
**2 март "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), комедия. 12+
**3 март "Шахтер"** (Б. Ҡаһарманова), драма. 14.00, 19.00 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Февраль - Март (Рәжәб - Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 28 (27) дүшәмбе | 6:40 | 8:10 | 13:30 | 16:54 | 18:47 | 20:17 |
| 1 (28) шишәмбе | 6:38 | 8:08 | 13:30 | 16:56 | 18:49 | 20:19 |
| 2 (1) шаршамбы | 6:35 | 8:05 | 13:30 | 16:57 | 18:51 | 20:21 |
| 3 (2) кесе йома | 6:33 | 8:03 | 13:30 | 16:59 | 18:53 | 20:23 |
| 4 (3) йома | 6:30 | 8:00 | 13:30 | 17:01 | 18:55 | 20:25 |
| 5 (4) шәмбе | 6:28 | 7:58 | 13:30 | 17:03 | 18:57 | 20:27 |
| 6 (5) йәкшәмбе | 6:25 | 7:55 | 13:30 | 17:04 | 18:59 | 20:29 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Рәсәйҙәр ковид менән ауырығандан һуң диспансеризация барышында үҙҙәренең психоэмоциональ хәлен яҡшыртырға мөмкин. Программаға психотерапевт консультацияһын индерергә әҙерләнә.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# МАРТ АЙЫНДА ТЫУҒАНДАР




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**7-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Салют. Любизар. Ҡашҡа. Әкиәт. Ҡалай. Уңай. Фа. Эйәрле. Ҡурай. Шоморт. Әсә. Бра. Алтын. Танк. Хис. Тараҡ. Оран. Вече. Ҡаһым. Робот. Медиана. Таналыҡ.

**Вертикаль буйынса:** Эскадрон. Әҙәбиәт. Ләүәш. Лālә. Азамат. Ту. Сабаҡ. Бысҡы. Машина. Шайморатов. Елкән. Торҡа. Ҡаҡ. Актер. Урал. Алты. Йәй. Һокот.

БЫЛ ҠЫҘЫҠ

## БАШ МЕЙЕҺЕ...

Ҡайһы бер кешеләрҙең баш мейеһе үҙенсәлекле характеристикаға эйә. Тап ошо үҙенсәлек уларҙы йәш көйө оҙаҡ һаҡлай икән. АҠШ-тың Төньяҡ-Көнбайыш университеты тикшеренеүселәре "ваҡытҡа бирешмәүсе" кешеләр тибын асыҡлаған. "Паспорт" йәшенән күпкә йәш күренеүселәр, ғәҙәттә, яҡшы хәтер менән маҡтана ала. Ғалимдар 80 йәште үткән 62 кешене тикшергән, уларҙың береһе лә хәтере насарайыуға зарланмаған. Һынауҙар барышында аҡыл ҡеүәһе йәшәтенән тиҫтерҙәренән айырылып торған 15 кеше асыҡланған, тест һорауҙарына яуап биргәндә улар 55 йәшлектәргә хас һөҙөмтәләр күрһәткән. Ни өсөн холоҡтары, йәшәү рәүеше, ғәҙәттәре менән бер-береһенә бөтөнләй оҡшамаған кешеләр бер үк һөҙөмтәләргә өлгәшеүен асыҡлап ҡарағандан һуң, медицина хеҙмәткәрҙәре быны баш мейеһенең үлсәменә бәйле булыуын фаразлаған. Ысынлап та, МРТ күрһәтеүенсә, был төркөмдөң баш мейеһе күләме буйынса ҙурыраҡ икәне билдәләнгән. Ғалимдар әйтеүенсә, 40 йәштән һуң баш мейеһе бәләкәйә башлай, 10 йыл дауамында ул 5 процентҡа ҡыҫыла, 70 йәште үткәс, процесс тағы ла тиҙәйә.

## ЙӘШЕРЕН КҮНЕКМӘЛӘР

Әгәр ҙә спорт залына йөрөргә ваҡыт ҡалмаһа, йәшерен күнекмәләр ысулын ҡулланығыҙ. Һәр эште лә фитнесҡа әүерелдерергә мөмкин. Мәҫәлән, ауыр сумка тотоп китеп бараһығыҙмы? Уларҙы гантелдәр тип уйлағыҙ һәм атлап барышлай сумкаларҙы еңелсә күтәрегеҙ. Өй йыйыштыраһығыҙмы? Тубыҡтарҙы өҫкә күтәреп атлағыҙ, был аяҡтарҙың мускулдарын нығытыр. Компьютер артында ултыраһығыҙмы? Аяҡтарығыҙҙы ултырғыста ултырған көйөнә һуҙып алығыҙ, йәки янбаш һәм ултырыш мускулдарына көсөргәнеш төшөрөгөҙ. Ошо рәүешле сәғәтенә 6 минут күнекмә эшләһәгеҙ, көн һайын спорт залында 1 сәғәт шөғөлләнгәндәге кеүек файҙа аласаҡһығыҙ.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## ҺАМАН ШУЛ СИР ТУРАҺЫНДА

● Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы антиматдәләргә тест һөҙөмтәләре буйынса QR-код бирергә рөхсәт итте. Документтан күренеүенсә, антиматдәләргә тестың ыңғай һөҙөмтәләре тураһында мәғлүмәттәр булған сертификат ғариза тапшырған көндән алып өс көн эсендә төҙөлә. Унда дәүләт хеҙмәттәре порталындағы яҙманың номеры, тикшереү үткәреү көнө һәм ысулы, медицина изделиеһын етештереүсе, шулай уҡ тест үткәргән медицина ойошмаһы хаҡында мәғлүмәт индерелә. QR-код тест һөҙөмтәләрен алған көндән башлап алты ай ғәмәлдә була.

● Арыу һәм баш әйләнеү коронавирустың яңы варианты "стелс-омикрон"дың билдәләре булыуы ихтимал. Был турала Англияның Милли һаулыҡ һаҡлау хеҙмәтенә һылтанма менән Mirror гәзите (Британия) хәбәр итте. Көньяҡ Африка Республикаһы табибы Анжелика Кутзи фекеренсә, арыу һәм мускулдар һыҙлауы йыш ҡына SARS-CoV-2-нең ошо типтағы индикаторы була. Баш әйләнеү ҙә BA.2 мутацияһының киң таралған билдәләре иҫәбендә. Был ике билдәнең көн дауамында ҡуҙғалеүе һәм юғалыуы ихтимал, тип иҫәпләй табиптар. Әгәр улар даими йәки бик көслө булһа, табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.

● Коронавирустың S-аҡһымына антиматдәләргә бер нисә миллион лаборатор тикшеренеү мәғлүмәттәре илдә коллектив иммунитет кимәленең 80 процентҡа етеүен раҫлай. Был турала табип-инфекционист Андрей Поздняков хәбәр итте. Лаборатория 2020 йылдың 18 майынан рәсәйҙәрҙә антиматдәләр булыуын иҫәпләй, әлеге ваҡытҡа 4,2 миллиондан ашыу тикшереү уҙғарылған. Рәсәйҙәрҙең күпселеге "омикрон" менән сирләй, ләкин уларҙың бик һирәктәре стационарҙа дауалана, үлем осраҡтары аҙ, тип раҫланы ул.

● Рәсәйҙәр ковид менән ауырығандан һуң диспансеризация барышында үҙҙәренең психоэмоциональ хәлен яҡшыртырға мөмкин. Илдең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы сенаторҙар менән берлектә программаға психотерапевт консультацияһын индерергә әҙерләнә. "Терапевта йүнәлтмә биреү мөмкинлеген ҡарайбыҙ, шулай уҡ анкета әҙерләйбеҙ, уның һөҙөмтәләр буйынса аныҡ йүнәлештә генә эшләгән белгескә мөрәжәғәт итергә кәңәш бирергә мөмкин", - тине Федерация Советының социаль сәйәсәт комитеты башлығы Инна Святенко. Спикер һүҙҙәренсә, бындай ярҙам коронавирусты үткәргәндәр йыш зарланған депрессияны һәм хәтер юғалтыуҙы асыҡларға мөмкинлек бирергә тейеш.

● 2022 йылдың аҙағында донъяла коронавирустың яңы штамы таралыуы ихтимал. Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһының Европа төбәк бюроһы директоры Ханс Клюге матбуғат брифингында ошо турала белдерҙе. "Йыл аҙағында вирустың кире ҡайтыу ихтималлығы ҙур, сөнки күптәр инфекция йоҡторҙо. Ә был вирустың яңы мутациялары барлыҡҡа килеүен аңлата. Ҡышҡыһын вирус кире ҡайтыр, ләкин беҙ пандемияның кире ҡайтыуына юл ҡуймаҫҡа тейешбеҙ", - тине ул. Вакцинация кимәле юғары булған илдәрҙә "омикрон" бик тиҙ үтә, тип билдәләне спикер. Клюге фекеренсә, сирҙең яңы варианты барлыҡҡа килә ҡалһа, уны тиҙ арала асыҡлау өсөн илдәргә прививка яһауҙы дауам итергә, вирусты күҙәтеп тороу системаһын көсәйтергә кәрәк.

● Шәхси клиникаларҙа аҡса түләп ПЦР-тест тапшырыусылар дәүләт учреждениеһында ауырығанлыҡ ҡағыҙы асырға теләй. "Был мөмкин, ләкин мутлашыу осрағы булмаһын өсөн табип йәки медицина хеҙмәткәрен саҡыртырға кәрәк. Ҡызғаныҫҡа күрә, ҡайһы берәүҙәр тейешле мәғлүмәттәр булмаһа ла, ауырығанлыҡ ҡағыҙын дистанцион асырыу мөмкинлеге менән файҙалана башланы", - ти Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин. Шул уҡ ваҡытта ыңғай ПЦР-тест булған осраҡта ауырығанлыҡ ҡағыҙын дистанцион рәүештә 15 мартҡа тиклем ябайлаштырылған тәртип буйынса асып була. Кәрәк булһа, ул оҙайтыласаҡ. Бының өсөн 122 һандары буйынса колл-үҙәккә шылтыратырға һәм ғариза ҡалдырырға кәрәк.

*АФАРИН!*

# УЛАР - ШАЙМОРАТОВСЫЛАР!



**(Башы 1-се биттә).**

Рәсәй Эске эштәр министрлығының генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов исемендәге 29-сы махсус тәғәйенләнештәге эске ғәскәрҙәр отряды төркөм командиры урынбаҫары Максим Пенчук был саралағы тантаналы ант уҡыусыларға айырым бурыстар һалыуын билдәләне. "Шайморатовсылар" кластарында уҡыусыларҙы Ватандың илһөйәре, тоғролоҡло, тәрбиәле, хәрби намыҫ һәм юғары выжданлылыҡ рухында әҙерләйҙәр. Мәктәбегеҙ, яугир шайморатовсылар традицияларына тоғро булығыҙ. Махсус тәғәйенләнештәге беҙҙең отрядтың девизын иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ: "Беҙгә ҡаршы булғандар түгел, ә беҙҙең менән кем - шул мөһим. Киләсәктә һеҙҙең погон кейеүегеҙ мөһим түгел. Илебеҙҙең лайыҡлы граждандары булыуығыҙ мөһим. Киләсәктә кем Рәсәй Федерацияһының Милли гвардияһы ғәскәрҙәрендә хәрби хеҙмәтен дауам итергә теләй, Шайморатов исемендәге отрядҡа өҫтөнлөклө тәртиптә ҡабул ителәсәк", - тине Максим Пенчук һәм 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының байрағы күсермәһен "шайморатовсылар" класына тапшырҙы.

"Әлеге ваҡытта "шайморатовсылар класы" стандартын булдырыу буйынса эшләйбеҙ. Унда айырым талаптар булырға тейеш: иң беренсе уҡыу, кластан тыш эш, илһөйәрлек тәрбиәһе, физик әҙерлек. Был стандартҡа тура килеү еңел булмаясаҡ. "Шайморатовсы" исемен яулап алырға, лайыҡ булырға кәрәк. Беҙ күптәргә ышаныс бирәсәкбеҙ, күп мәктәп әле үк теләк белдерә. Полилингваль мәктәптәрҙе йәлеп итеп, бик яҡшы эшләнде. Бындай ҡарарҙарҙа улар локомотив кеүек. Тиҙҙән Стәрлетамаҡ полилингваль гимназия ла, Урал аръяғы мәктәптәре лә инер, тип уйлайым", - тип йомғаҡлау һүҙен әйтте Радий Хәбиров.

Балалар "йәш шайморатовсылар" антына бирҙе, башҡорт һәм урыҫ телдәрендә "Шайморатов генерал" йырын башҡарҙы.

Әйткәндәй, РФ Геройы генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов исемендәге кластар Башҡортостан мәктәптәрендә 2020 йылда асыла башланы. Былтырғы уҡыу йылында 3 класс асылды, уларҙа 62 уҡыусы "шайморатовсы" булды. 2021-2022 уҡыу йылында Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты һәм 1-се 2-се республика полилингваль күп профилле гимназияларҙа тағы 4 класс асылды, уларҙа 120 бала уҡый. "Шайморатовсы" кластарына математика, урыҫ теле, тарих буйынса яҡшы билдәләргә уҡыған, һаулыҡ торошо буйынса спорттың хәрби-ғәмәли төрҙәренә яраҡлы булған уҡыусылар ҡабул ителә. Унда "тулы көн" режимында белем алалар. Уҡытыу сит һәм башҡорт телдәрен, спорт һәм башланғыс хәрби әҙерлек фәндәрен ныҡлы өйрәнеү программаһы буйынса алып барыла. Тарих, математика, физика, инглиз һәм башҡорт телдәре профилле уҡытыла. "Шайморатовсылар" класында 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы кавалеристары батырлығы өлгөһөндә ил тарихына ихтирам, Тыуған ил өсөн ғорурлыҡ, илһөйәрлек тәрбиәләү, рухи-әхлаҡи ҡиммәттәр формалаштырыу йүнәлешендә системалы эш алып барыла.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# ИЛҺӨЙӘРЛЕК БЕҘҘӘН БАШЛАНА!

**23 февралдә ил кимәлендә дәүләт байрамы - Ватанды һаҡлаусылар көнө билдәләнде. Өфө районы Шамонин урта дөйөм белем биреү мәктәбе лә был матур йоланан ситтә ҡалманы - патриотик тәрбиә биреүгә нигеҙләнгән фәһемле саралар үткәрҙе.**



Был сараларҙа һәр синыф үҙенең оҫталығын, илһөйәрлеген күрһәтте. 5-11-се кластар араһында класс сәғәттәре, волейбол, шахмат турнирҙары, тантаналы рәүештә "Йәш армия" сафына ҡабул итеү, саңғы ярыштары, тематик күргәҙмәләр, "Һалдат шинеле" исемле патриотик йырҙар, социаль селтәрҙә Ватанды һаҡлаусылар көнөнә арналған төрлө номинациялар буйынса фотолар конкурсы, "Минең яҡыным бында хеҙмәт итте" исемле акция ойошторолдо. Мәҫәлән, 6-сы "в" класында үткән Ленинград ҡамауын өҙөүгә арналған класс сәғәте бигерәк тә оҡшаны. Балалар һуғышта булған ваҡиғаларҙы ҡарап, халҡыбыҙ өсөн Тыуған илебеҙҙең ниндәй ҡәҙерле, һуғыштың ниндәй аяуһыҙ икәненә төшөндө.

5-се "б" класында Рәсәй Федерацияһы Геройы, яҡташыбыҙ Миңлеғәли Шайморатов иҫтәлегенә арналған дәрестә геройҙың тормош һәм хеҙмәт юлына, Башҡорт атлы дивизияһының ҡаһарман яу юлына байҡау яһалды. Шулай уҡ совет һалдаттарының Афғанстандан сығарылыуының 31 йыллығына һәм Ватанды һаҡлаусылар иҫтәлегенә бағышланған класс сәғәттәре лә бик бай йөкмәткеле һәм фәһемле булды.

Ошондай матур сараларҙан башланғыс синыф уҡыусылары ла ситтә ҡалманы. Улар һүрәттәр, йырҙар конкурстарында әүҙем ҡатнашты. "Атайҙар һәм улдар", "Йәгеҙ әле, егеттәр!" исемле ҡыҙыҡлы спорт уйындары менән бөтәһен дә хайран ҡалдырҙы.

Был иҫтәлекле көндә шинель кейгән барлыҡ ир-егеттәрҙә Тыуған илебеҙҙең, яҡындарыбыҙҙың һаҡсыһын һәм яҡлаусыһын күрәбеҙ. Шулай уҡ был байрам элек-электән Ватанға тоғро хеҙмәт итеүҙең тарихи дәлиле булыуы менән дә ҡәҙерле, сөнки илебеҙҙе дошмандан һаҡлау ир-егеттәребеҙ өсөн иң изге, ҡәҙерле бурыс булып һаналып, һәр саҡ данланған. Мәктәптә уҙғарылған һәр сараның балалар күңеленә үтеп инеп, уларҙа Тыуған илебеҙгә, еребеҙгә ҡарата дөрөҫ, ыңғай ҡараш тәрбиәләү беҙҙең төп бурысыбыҙ ул.

**Әнфирә ҒӘЛИӘКБӘРОВА,**
**Өфө районы Шамонин урта мәктәбе уҡытыусыһы.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҢЫ БАЙЫҒАНДАН...

## бурысҡа алма

Юрға менгән юлдашынан айырылыр, күп йәшәгән ҡорҙашынан айырылыр, күп һөйләгән дуҫынан айырылыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡатын-ҡыҙ үҙ ире менән нисек кенә бәхетле булһа ла, уның кейәүҙә булмауын теләгән ирҙәр барлығын ҙур ҡәнәғәтләнеү менән иҫкә аласаҡ.

**(Генри Менкен).**

Ҡатыныңдың юлда торған полицейскийға йылмайғанын күргәнең булмаһа, тимәк, уның иң матур йылмайыуын бөтөнләй күргәнең юҡ.

**(Кин Хаббард).**

Мөхәббәт терегөмөш кеүек: уны асыҡ усыңда тотоп була, ә йоҙроҡта тотоп булмай.

**(Дороти Паркер).**

Уға бер ваҡытта ла:"Мин яратҡан кеше - һин беренсе", - тип әйтмә. Уға шулай тиң: "Һине белмәгәнгә тиклем мин бәхеттең ни икәнен белмәгәнмен икән". Ир кеше быныһына шунда уҡ ышанасаҡ.

**(Жорж Массон).**

Кемгә көнләшеп ҡарайҙар, шуны күрә алмайҙар.

**(Генри Менкен).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше күрше ауылда бар ауырыуҙарҙан да дауалай алған Копыло исемле бағымсы барлығын ишетеп ҡалған да, арҡаһы ауыртыуынан ҡотолорға өмөтләнеп, шунда йүнәлгән. Бағымсының өйөн эҙләп тапҡан был. Ихатала уны йәш ир ҡаршы алған. "Һинме атаҡлы бағымсы Копыло?" - тип һораған унан ауырыу. "Эйе, мин", - тип яуап биргән йәш ир. "Һеҙ мине дауаламаҫһығыҙмы икән? Арҡам бик ауырта..." - тигән ауырыу. "Ә ниңә дауаламаҫҡа? Хәҙер аяҡҡа баҫтырам мин һеҙҙе", - тигән бағымсы. Копыло ауырыуҙы дауалау өсөн ниндәй алымдар ҡулланғандыр, уныһын бер Хоҙай белә. Әммә был дауалауҙан ауырыуҙың хәле яҡшырмаған. Хәҙер инде ауыртыныу уның аяҡтарына ла төшә. Быны күреп, Копыло ағарынып, өйҙән йүгереп сығып китә һәм бер ҡартты эйәртеп алып инә. Ҡарт ҡуҙғала ла алмай ятҡан ауырыуҙың арҡаһына бер нисә тапҡыр һуҡҡылай һәм... Бына мөғжизә - ауырыу аяғына баҫа, ауыртыныуҙарҙың эҙе лә ҡалмағанын тойоп, хатта бейеп китә. Шунан ул үҙен оҙата сыҡҡан ҡарттан: "Әйтегеҙ әле, һеҙ кем? Мин ғүмерем ахырынаса Хоҙай алдында һеҙгә рәхмәттәремде уҡырмын..."- ти. "Мин - Копыло", - ти ҡарт. "Ә ниңә улай булғас был егет бағымсы булып йөрөй?" - тип аптырай ауырыу. "Ә ул минең ейәнем. Минең бағымсылыҡты үҙләштерә..." була яуап. Донъяла бындай миҫалдар бихисап бит: берәүҙәрҙең исеме менән эшләнә, ә уның емештәрен икенселәр татый".**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22008

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99, 246-03-24** |
| **Матбуғат таратыу** | **246-03-23** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
25 февраль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3387
Заказ - 236

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.